ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

4-10 июль (майай) 2025

№26 (1170)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Башҡортостан...**

фән үҙәгенә әүерелә



6

**Салауат батырыбыҙҙың...**

ысын йөҙ-ҡиәфәте нисек булған?



7

**Тыуған телебеҙҙең нескәлектәре...**

асыҡланып бөтмәç мөғжизә



8-9

**Ҡуҙғалаҡ**



12-13

*Рух камиллығын үтескә алып та, һатып алып та булмай. Һатылһа ла, һатып алыусыһы булмаç ине. Уның ҡарауы, түбәнлек көн дә һатып алына.*

*(Сенека).*

КӨН ТЕМАҺЫ

# ТРАДИЦИЯЛАР ТӘРӘНЛЕГЕНӘН...

## технологиялар бейеклегенә



**Шулай итеп, 2 июлдә Өфөләге "Торатау" конгресс-холында XIII Бөтә Рәсәй Йәш ғалимдар советы һәм Студент фәнни берләшмәләре съезы үҙ эшен башланы.**

"Традициялар тәрәнлегенән - технологиялар бейеклегенә тиклем" тип аталған сараға илдең төрлө төбәктәренән йәш ғалимдар, студенттар берләшмәләре әүҙемселәре, дәүләт ярҙамы алған йәш ғалимдар Рәсәй Президентының фән һәм инновациялар өлкәһендә йәш ғалимдар өсөн премияһы лауреаттары, фән, технологиялар һәм юғары белем биреү өлкәһендә идара итеү кадрҙары резервын үçтереү программаһын тамамлаусылар, йәштәрҙең төрлө ғилми берләшмәләре вәкилдәре йыйылды.

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров XIII Бөтә Рәсәй йәш ғалимдар һәм студенттар ғилми йәмғиәттәре советтары съезының пленар ултырышында сығыш яһап, "Башҡортостан бер ҡасан да ошондай күп, талантлы, сағыу йәш ғалимдарҙы ҡабул иткәне юҡ ине, республика өсөн был - оло мәртәбә", - тип белдерҙе һәм форумды Өфөлә үткәрергә тигән ҡарар өсөн Рәсәй Федерацияһының Фән һәм юғары белем биреү министрлығына рәхмәт белдерҙе.

Ҡатнашыусылар ҙа форум сиктәрендә ойошторолған сараларҙан, күргәҙмәләрҙән, төрлө экскурсиялар, осрашыуҙарҙан ҡәнәғәт булып, үҙҙәренең матур фекерҙәре менән уртаҡлашты. Мәçәлән, Рәсәйҙең фән һәм юғары белем биреү министры урынбаçары Денис Секиринский, Башҡортостан - ғәҙәттәгесә, фәнни-технологик үçеш буйынса алдынғылар рәтендә, тип һыҙыҡ өçтөнә алды һәм: "Төбәктәрҙең фәнни-технологик үçешенең милли рейтингында тикшеренеүҙәр үткәреү өсөн мөхитте баһалаған субрейтинг бар. Ул Рәсәй Федерацияһының теге йәки был субъектындағы тикшеренеүселәргә ни тиклем уңайлы булыуын күрһәтә. Был субрейтингта Башҡортостан - беренсе урында", - тигән баһаһын еткерҙе.

"Курчатов институты" ғилми-тикшеренеү үҙәгенең мегасайенс проекттар буйынса директор урынбаçары, Рәсәй Президенты ҡарамағындағы Фән һәм мәғариф буйынса советтың фәнни һәм мәғариф өлкәләрендә йәштәр эштәре буйынса Координация советы рәйесе Никита Марченков, Башҡортостан шулай уҡ йәш ғалимдарға ярҙам итеү буйынса ла илдә беренсе урынды биләй, тип әйтеп үтте. "Быйыл төбәктәр араһында съезды үткәреү урыны өсөн етди көрәш булды. Башҡортостан хаҡлы рәүештә еңеү яуланы, тип иçәпләйем", - тине Никита Марченков.

Журналистар менән әңгәмәлә Радий Хәбиров йәш ғалимдар һәм тотош Башҡортостан өсөн күләмле саралар үткәреүҙең мөһимлеген билдәләне. "Бындай ваҡиғалар фән менән шөғөлләнгән тикшеренеүселәргә үҙ-ара аралашыу, тәжрибә уртаҡлашыу мөмкинлеге бирә, ғилми эшмәкәрлектең абруйын арттыра, - тине Башҡортостан Башлығы. - Бынан тыш, республика башҡа төбәктәрҙә эштең нисек ойошторолоуы, йәш ғалимдарҙың нindәй ғилми тикшеренеүҙәр үткәреүе тураһында ҡыҙыҡлы тәжрибәләргә эйә була".

(Теманың дауамы 6-сы биттә).

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ЯРҘАМ ИТӘЙЕК!



**Башҡортостанда "Мәктәпкә әҙерләнергә ярҙам ит" хәйриә акцияһы башлана. Акцияның маҡсаты - ауыр тормош хәлендә ҡалған ғаиләләргә балаларын яңы уҡыу йылына әҙерләргә ярҙам итеү.**

1 июлдән 31 августа тиклем теләгән һәр кем аҙ тәьмин ителгән, ишле, тулы булмаған һәм һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән балалар тәрбиәләгән ғаиләләргә балаларын мәктәпкә әҙерләүҙә ярҙам күрһәтә ала. Бының өсөн канцелярия тауарҙары, яҙыу һәм һүрәт төшөрөү өсөн кәрәк-яраҡтар, балалар ижады өсөн йыйылмалар һатып алып, "Ғаилә" район-ара үҙәктәренә һәм уларҙың республика ҡала-райондарында урынлашҡан бүлексәләренә тапшырырға кәрәк. Адрестарын Башҡортостандың Ғаилә порталында табырға мөмкин. Шулай уҡ яңы йәки яҡшы тороштағы портфелдәр, мәктәп формалары, дәреслектәр һәм кластан тыш уҡыу өсөн китаптар ҡабул ителә. Йәй аҙағына йыйылған ярҙам халыҡҡа социаль ярҙам учреждениеларында иçәптә торған ғаиләләргә тапшырыла. Акция буйынса һорауҙарҙы "Ғаилә" үҙәктәренең 8-800-347-50-00 телефоны буйынса шылтыратып бирергә мөмкин.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# СТУДЕНТ ӘСӘЙГӘ...

**Студент әсәйҙәр өсөн йөклөлөк һәм бала табыу буйынса пособиелар 90 мең һумға тиклем арттырыла. Был хаҡта Рәсәй Хөкүмәте башлығы Михаил Мишустин белдерҙе.**

Дәүләт Советының ғаиләгә ярҙам күрһәтеүгә арналған ултырышында Президент студент әсәләргә айырым иғтибар кәрәклеген билдәләне, уларға йөклөлөк һәм бала табыу буйынса пособие күләмен арттырырға ҡушты, тип иçкә төшөрҙө ул. Хөкүмәт ҡануниәткә тейешле үҙгәрештәр әҙерләгән. Түләү күләме әлеге ваҡыттағы кеүек стипендияға түгел, ә төбәктәге йәшәү минимумы дәүмәленә ҡарап иçәпләнә. Шулай итеп, ҡатын-ҡыҙға 140 көнлөк декрет ялы өсөн түләнгән аҡсаның суммаһы бер нисә тапҡырға артып, илдә уртаса 90 мең һум тәшкил итергә тейеш. Бындай ярҙам юғары уҡыу йорттарында һәм колледждарҙа, шулай уҡ өçтәмә һөнәри белем биреү учреждениеларында һәм ғилми ойошмаларҙа көндөҙгө бүлектә уҡыған буласаҡ әсәләргә бирелә. "Закон проекты Дәүләт Думаһына индерелгәндән һуң тиҙ арала барлыҡ процедураларҙы үтер һәм яңы уҡыу йылы башында үҙ көсөнә инер тип ышанабыҙ", - тип билдәләне Хөкүмәт башлығы.

12+

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

✓ *Донъяла халыҡ һанының йылдан-йыл ҙур тиҙлек менән арта барыуы, уның тирә-яҡ мөхит һәм социаль-иҡтисад үҫеш өлкәләрендә етди проблемалар тыуҙырыуы сәбәпле, Милләттәр Ойошмаһы күптән борсолоу белдерә килә.*



*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*



# ТҮЛӘП ТӘ УҠЫРҘАРМЫ?

**Дәүләт Думаһы Хөкүмәткә юғары уҡыу йорттарына түләүле ҡабул итеү күләмен көйләү буйынса вәкәләттәрҙе беркетеү тураһында закон проектын ҡараны, тип хәбәр ителә парламент сайтында.**

Бынан алда Владимир Путин Фән һәм мәғариф буйынса Совет ултырышында иҡтисад һәм хеҙмәт баҙары яғынан һорау булмаған һөнәрҙәр буйынса юғары уҡыу йорттарына артыҡ түләүле ҡабул итеүҙе булдырмау кәрәклеген билдәләне.

Әлеге ваҡытта Юғары белем һәм фән министрлығының түләүле уҡытыу күләмен көйләү вәкәләте булмауын иҫәпкә алып, ҡаралған закон проекты түләүле уҡыусылар һанын тәртипкә килтереүгә һәм дөйөм алғанда квалификациялы кадрҙар дефициты проблемаһын хәл итеүгә йүнәлтеләсәк, тип билдәләне Дәүләт Думаһы рәйесе Вячеслав Володин. Уның һүҙҙәренсә, бөгөн дәүләт һәм шәхси юғары уҡыу йорттарында уҡыусыларҙың 56 проценты түләүле нигеҙҙә белем ала, шуның 42,5 проценты - иҡтисад һәм юридик бүлектәрҙә. "Тимәк, юғары уҡыу йортоноң һәр дүртенсе сығарылыш студенты - иҡтисадсы һәм юрист", - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Вячеслав Володин. Уның фекеренсә, юғары мәктәптең хеҙмәт баҙарына йүнәлеш аламы-юҡмы тигән һорау ҡала.

Закон проектын апрелдә Вячеслав Володин һәм Федерация Советы спикеры Валентина Матвиенко етәкселегендәге депутаттар һәм сенаторҙар индерә. Ул Мәғариф тураһындағы законға төҙәтмәләр индерә һәм хөкүмәткә түләүле нигеҙҙә вуздарға ҡабул итеү күләмен билдәләү, шулай уҡ күрһәтелгән күләмде билдәләү тәртибен һәм ваҡытын раҫлау буйынса вәкәләттәрҙе нығытырға тәҡдим итә. Закон ҡабул ителгән осраҡта ул 2026 йылдың 1 сентябренән көсөнә инә. Үҙгәрештәр 2025 йылдың инеш кампанияһына ҡағылмаясаҡ, тип асыҡлана. Республикала урта һөнәри белем биреү учреждениеларына ҙур иғтибар бүленә, атап әйткәндә, колледждарҙа бюджет урындары һаны арта. Мәҫәлән, 2025 йылғы ҡабул итеү кампанияһында уҡ иҡтисадтың өҫтөнлөклө тармаҡтары буйынса эшсе һөнәрҙәр белгестәрен әҙерләү өсөн Башҡортостан колледждарында ҡабул итеүҙең контроль һандары 2 мең бюджет урынына арттырыласаҡ.

*БЫЛ АЙҘА...*

# ХАЛЫҠ КҮП ЕРҘӘ АҠЫЛ КҮП



**Йәй уртаһы - боронғоса майай ҙа килеп етте. Сәскәле-гөллө үләндең шифалы һутҡа тулышҡан һөтләкәс мәле, уңған хужабикәләр тап ошо осор йәйге май йыйып ҡалырға тырыша. Бесән өҫтө. Мал аҫраған халыҡ ҡышҡылығын ҡайғырта: бесән эшләй. Мәшәҡәтлерәк булһа ла, үҙенең ҡабатланмаҫ матурлығы, яңы сабылған үлән, кипкән бесән, еләк еҫтәре аңҡып торған бер генә мәл бит был, "һә" тигәнсе үтеп тә китәсәк ул.**

Йәй һауа торошоноң һәр көнө мөһим, шуға ла синоптиктар был айға яҡынса күҙаллауҙарын бирҙе лә инде. Улар фаразынса, майайҙа үтә эҫе көндәр күҙәтелмәйәсәк. Уртаса һауа температураһы 24-26 градустан да артмаҫ, тип ышандыра улар. Ямғырлы, йонсоу көндәр һирәкләй төшөр: ни тиһәң дә, ҡыҙыу эш ваҡыты бит. Шуға күрәлер ҙә, бәлки, был айҙа ҡәҙимге һөнәри байрамдарҙан тыш, ҡыҙыл дата менән билдәләнеүсе байрам көндәре лә юҡ. Йәйге ял һәм хеҙмәт осорона ярашлы Балыҡсылар **(13)** менән Баҡсасылар **(23)** көндәре генә июль календары битен йәмләп торғандай. Ләкин, әгәр баҡсасылар дачаларында иркенләп ял да итә, тир түгеп эшләй ҙә ала икән, балыҡсыларға иһә тәбиғәт ҡосағында, һыу буйҙарында һағыраҡ һәм һаҡсылыраҡ булыу зыян итмәҫ: ***быйыл Рәсәйҙә һәүәҫкәр һәм спорт балыҡсылығы тәртиптәренең яңыртылған ҡағиҙәләре ғәмәлгә индерелде, был документҡа ошо йылдың 6 апрелендә РФ Хөкүмәте Премьер-министры Михаил Мишустин ҡул ҡуйҙы. Яңы ҡағиҙәләр һыу биоресурстарын һаҡлау һәм балыҡсылыҡ тармағының тотороҡло үҫешен тәьмин итеүгә йүнәлтелә. Яңы тәртиптәр буйынса браконьерлыҡҡа ҡаршы көрәш маҡсатында һәүәҫкәр балыҡсылыҡтың бөтөн төрҙәренә мотлаҡ электрон путевкаларҙың булыуы талап ителә.*** Документта шулай уҡ балыҡ тотоуҙың тәүлек нормалары, тыйылған балыҡсылыҡ ҡоралдары, балыҡсылыҡты тыйыу мөҙҙәте, ҡағиҙәләрҙе боҙған өсөн штраф саралары ҡарала, хәүефһеҙ балыҡсылыҡ шөғөлө өсөн кәңәштәр бирелә.

Ә бына июлдәге тағы бер көн - Бөтөн донъя халыҡ һаны (Всемирный день народонаселения - **11 июль**) көнө уйландыра төшә. Был көн Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы тарафынан 1987 йылда, ул саҡ планета халҡы һаны 5 миллиардҡа еткән ваҡытта, булдырыла. Донъяла халыҡ һанының йылдан-йыл ҙур тиҙлек менән арта барыуы, уның тирә-яҡ мөхит һәм социаль-иҡтисад үҫеш өлкәләрендә етди проблемалар тыуҙырыуы сәбәпле, Милләттәр Ойошмаһы күптән борсолоу белдерә килә. ***Бөгөнгө көндә Ер шарында халыҡ һаны 8,21 миллиард кешегә барып етте. 2023 йылға ҡарағанда былтыр, йәғни бер йыл эсендә, планетала кеше һаны 82 миллионға артҡан. Бигерәк тә Африкала тыуым юғары. Яҡындағы егерме йыл эсендә был континентта кеше һаны ике тапҡырға артасаҡ, тип фаразлай эксперттар. БМО иҫәпләүенсә, 2037 йылға Ер йөҙөндә халыҡ һаны 9 млрд һыҙығына етәсәк.*** Росстат мәғлүмәттәре буйынса, 2023 йылда Рәсәй халҡы 243 мең кешегә (0,17 процент) кәмегән һәм 2024 йылдың 1 ғинуарына барлығы 146,204 млн кеше тәшкил иткән.

2022 йылда "Комсомольская правда" гәзите сайтында бынан ярты быуат элек шау-шыу тыуҙырған "Үҫеш сиктәре" тигән доклад айҡанлы "Алтын миллиард" теорияһы: ни өсөн глобалистар планета халҡын бер нисә тапҡырға кәметергә теләй" тигән мәҡәлә баҫылғайны. Унда әйтелеүенсә, был доклад үҙен кешелек үҫеше сценарийын көйләүсе тип таныған Рим клубы ҡушыуы буйынса яҙылған. Был клубтың ойоштороусылары артында "донъя хөкүмәте" яҡлы Дэвид Рокфеллер тора, тип яҙа мәғлүмәт сығанаҡтары. Доклад авторы Дэнис Медоуз фекеренсә, планетала ни бары миллиард кеше генә бәхетле, етеш, таҙа экология һәм тотороҡло сәйәси шарттарҙа йәшәй аласаҡ. Шул уҡ ваҡытта: "Төп проблема халыҡтың күп булыуында ла түгел, ә сиктән тыш ҡулланыуҙар күләмендә", - ти Медоуз. Үҫешкән илдәр халыҡтары үҙҙәренең саманан тыш ҡулланыуҙары арҡаһында экосистемаға ярлы илдәргә ҡарағанда әллә күпмегә күберәк зыян килтерә, тип тә өҫтәй автор. Был клубтың ошоға тиклемге докладтарында ла Ер йөҙөндә кеше һанын кәметеү идеяһы ярылып ята. Клуб ағзаларының береһе медиамагнат Тэд Теренр, мәҫәлән, 1996 йылда уҡ әле Ерҙәге кеше һанын 250-300 миллионға кәметергә тәҡдим иткән. Донъя элитаһы Ер йөҙөндә 7-8 түгел, ә бер "алтын миллиард" ҡына йәшәргә тейеш, тигән идеяны бөгөн дә дауам итә һәм уны нисек итеп һөҙөмтәлерәк башҡарыу ысулдары хаҡында баш вата. "Ерҙә халыҡ һаны бик күп булыу сәбәпле, планета уларҙың бөтәһен дә аҫрай алмаясаҡ, шуға күрә кеше һанын кәметеү кәрәк", тип бынан 200 йыл элек үк тәүләп сығыш яһаусы Мальтус ошо маҡсатта эпидемияларҙы вариант итеп ҡарай. Артабан уның эйәрсәндәре биологик ҡорал менән химия ҡулланыуҙы яйлы тип таба.

Ләкин бөгөн планетаға һыймай, бөтөн кешелекте күрә алмаусы әлеге теория авторҙары ниндәйҙер яңылыҡ уйлап сығармаһа ла була. Улар өсөн тәбиғәт үҙе эшләй. Ғалимдар иҫкәртеүенә ҡарағанда, яҡындағы ун йыллыҡтар эсендә планета халҡы-

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә МХО яугирҙарына наградалар тапшырҙы. Радий Хәбиров указы менән Вячеслав Булавинцев һәм Денис Тоҡомбәтов генерал Шайморатов миҙалдарына лайыҡ булды. Денис Тоҡомбәтов - кадрлы хәрби. "Етенсе кластан Ишембай башҡорт кадет корпусында тәрбиәләндем. Һуңынан мин Рязань гвардия юғары һауа-десант команда училищеһын тамамланым. Бер айҙан һуң МХО биләмәһенә юлландым. Хәҙер беҙ илебеҙ күге тыныс булһын өсөн һуғышабыҙ", - тип билдәләне яугир.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республиканың 12 район дауаханаһының һәм Өфөнөң ике балалар поликлиникаһының баш табиптарына 31 яңы автомобиль асҡысы тапшырҙы. Машиналар "Оҙайлы һәм әүҙем тормош" милли проектының "Башҡортостан Республикаһы һаулыҡ һаҡлауҙың беренсел звеноһын яңыртыу" төбәк программаһы сиктәрендә һатып алынған. Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин һүҙҙәренсә, Lada Largus базаһындағы "Медицина хеҙмәте" еңел автомобиле түшәктә ятҡан пациентты һәм бер медицина хеҙмәткәрен йәки дүрт пассажирҙы ташырға мөмкинлек бирә.

✓Урал аръяғы райондарының имам-ахуны, "Рәсулиә" мәсетенең имам-хатибы Сәйфулла хәҙрәт Ғайсин Махсус хәрби операция зонаһына юлланды. Ул МХО-ның тәүге көндәренән алғы һыҙыҡҡа һалдаттарға гуманитар ярҙам ебәреү менән шөғөлләнә. Ике тапҡыр үҙе Донбассҡа барып ҡайта. Ошо көндәрҙә ул Рәсәй мосолмандары Үҙәк Диниә назараты менән килешеү төҙөп, алғы һыҙыҡҡа хеҙмәт итергә юлланды. "Беҙ православие дине руханиҙары менән бергә хәрби частарға барып, һалдаттарҙың рухын күтәрәбеҙ, ауыр саҡта уларға терәк булабыҙ", - тип һөйләне Сәйфулла хәҙрәт. Билдәле булыуынса, уның ҡустылары ла МХО биләмәһендә хеҙмәт итә.

✓Башҡортостанда оборона-сәнәғәт комплексы ойошмаларының 3 меңгә яҡын хеҙмәткәр белемен камиллаштыра. Профессиональ яҡтан уҡытыуға һәм өҫтәмә һөнәри белем биреү өсөн республика федераль бюджеттан 160 миллиондан ашыу аҡса йәлеп иткән. "2944 хеҙмәткәрҙе һөнәри уҡытыуға 13 оборона-сәнәғәт комплексы предприятиеһы менән килешеүҙәр төҙөлдө. 841 хеҙмәткәр уҡыуға кереште", - тип белдерә Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова.

✓Башҡортостан спортсылары Рәсәй йәштәренең VI йәйге Спартакиадаһында миҙалдар яуланы. Республиканың спорт министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, Туймазынан Алеся Шәрипова һәм Өфөнән Самат Маннанов самбо буйынса ярыштарҙа бронза призер булды. Илдең 23 төбәгендә, шул иҫәптән Башҡортостанда 51 спорт төрө буйынса Рәсәй йәштәренең VI йәйге Спартакиадаһы бара. Өфөлә спорт гимнастикаһы буйынса турнир 27 июндә тамамланды.

ның тәбиғи сәбәптәр арҡаһында кәмеүе бик тә ихтимал. ***Мәҫәлән, был йәһәттән әлеге пандемиялар, һуғыштар һәм экологик фажиғәләрҙән тыш, тыуымдың кәмеүе төп сәбәптәрҙең береһе булып тора. Мәҫәлән, тотош Евроберләшмә илдәрендә 2023 йылда башҡа йылдарға ҡарағанда иң әҙ һанда бала тыуған - 3,666 млн. Быңдай күренеш айырыуса Греция, Италия, Испания, Польша, Финляндия, Балтик буйы илдәрендә күҙәтелә.*** Бының сәбәптәре күп төрлө: иҡтисад проблемалары - хаҡтар артыуы, йәштәр араһында эшһеҙлек; социаль нормаларҙың үҙгәреүе - күптәр үҙҙәрен генә ҡайғырта һәм бала тәрбиәләүгә ҡарағанда карьераһы менән була, сәйәхәт итә, күңел аса һ.б.; глобаль хәүефтәр: климат үҙгәреүе, пандемия, һуғыштар, көрсөк хәлдәр, тормошта тотороҡлоҡ булмауы һ.б.

Рәсәйҙә лә тыуым кәмей. Мәҫәлән, былтыр тыуым коэффициенты, йәғни бер ҡатынға тура килеүсе балалар һаны 1,43 тәшкил итһә, быйыл 1,42 булыуы көтөлә. Халыҡ һанын арттырыу өсөн был коэффициент 2 һәм унан артығыраҡ тәшкил итергә тейеш. Президент 2030 йылға был күрһәткесте - 1,6, ә 2036 йылға 1,8 балаға еткереү буйынса маҡсат күрһәткесе хаҡында указ ҡабул итте. Быйыл Рәсәйҙә донъяға килгән сабыйҙар һаны 1,18 млн самаһы булыр тип фаразлана. Демограф Алексей Ракша фекеренсә, тыуымдың кәмеүе дөйөм планета өсөн насар булмаһа ла, Рәсәй өсөн яҡшы түгел. Беҙҙә тыуымды арттырыу өсөн байтаҡ саралар күрелә. Рәсәй Президенты Владимир Путин илдә тыуымды арттырыуҙы өҫтөнлөклө демографик йүнәлеш тип ҡарай һәм был мәсьәләне даими контролдә тота; балалы ғаиләләрҙе социаль яҡлау буйынса туҡтауһыҙ саралар күрелә, указдар ҡабул ителә. Ошоға өҫтәп, демограф Ракша әйтеүенсә, икенсе һәм өсөнсө булып тыуған сабыйҙар өсөн Әсәлек капиталын артабан 2 миллионға тиклем арттырыу кәрәк. Был мөһим, әлбиттә, шулай ҙа эш бер аҡсала ғына түгел икәне лә яҡшы аңлашыла: матур, өлгөлө ғаилә ҡороп, шат һәм сәләмәт балалар тәрбиәләү өсөн - ҡыҫҡаһы, киләсәгеңдән хәүефләнмәй, ябай кеше мәнфәғәттәре һанланған, үҫешкән һәм етеш иҡтисад, тотороҡло хаҡтар һәм хеҙмәт баҙары шарттарында, именлектә, тыныслыҡта йәшәү кәрәк Ер йөҙөндә әҙәм балаһына.

***Был айҙағы иҫтәлекле даталар һәм һөнәри байрамдар:*** Хәрби хәрәкәттәр ветерандары көнө **(1)**, Билдәһеҙ осоусы объект **(2)**, ЮХХДИ **(3)**, Ғәшүрә **(5)** көндәре, Диңгеҙ һәм йылға флоты **(6)**, Башҡорт авиацияһының тыуған **(7 июль 1933)** көндәре, Ғаилә, мөхәббәт һәм тоғролоҡ, Рәсәй Ҡораллы Көстәренең Зенит-ракета ғәскәрҙәре, Бөтөн донъя аллергия менән көрәш көндәре **(8)**, Өфөлә Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы (ШОС) илдәре етәкселәре ултырышы һәм БРИКС илдәре башлыҡтары осрашыуҙары үткәрелеүгә - 10 йыл **(8-10 июль, 2015)**, Бөйөк Ватан һуғышында Ленинград өсөн һуғыш **(10 июль 1941 - 10 август 1944)**, Бөтөн донъя халыҡ һаны **(11)**, Граждандар авиацияһының бөтөн донъя бортпроводниктар **(12)**, Бөтөн донъя йәштәр күнекмәләре **(15)**, Рәсәй почтаһы, Балыҡсылар **(13)**, Рәсәй Хәрби-Диңгеҙ Флоты авиацияһы, Этнограф **(17)**, Дәүләт янғын һағын күҙәтеү органдары **(18)** көндәре, Халыҡ-ара шахмат **(20)**, Металлургтар **(21)**, Баҡсасылар **(23)**, Сауҙа хеҙмәтсәндәре **(26)**, Хәрби-Диңгеҙ флоты **(27)**, PR-менеджерҙар **(28)**, Халыҡ-ара дуҫлыҡ **(30)** көндәре билдәләнә.

***Майайҙа тыуғандар:***

**2 -** подполковник, хәрби хәрәкәттәр ветераны, яҙыусы, йәмәғәт эшмәкәре, Дондағы Ростов Башҡорттар йәмғиәте етәксеһе, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының Башҡарма комитеты ағзаһы, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Мәхмүт Сәлимовҡа - 65 йәш** (1960).

**22 -** педагог, 1948-1972 йылдарҙа М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры режиссеры, РСФСР һәм БАССР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, К.С.Станиславский һәм Ғ.Сәләм премиялары лауреаты, ике тапҡыр "Почет билдәһе" ордены кавалеры **Шәүрә Мортазинаның тыуыуына - 100 йыл** (1925-2002).

**26 -** йырсы, М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры артисы, Башҡортостандың халыҡ артисы **Алһыу Бәхтиеваға - 55 йәш** (1970).

**28 -** Рәсәй йәмәғәт эшмәкәре, 2004-2013 йылдарҙа РФ Федераль Йыйылыш Федерация Советы ағзаһы, "Ҡыҙыл Йондоҙ" һәм Афғанстан Республикаһының "Йондоҙ" ордендары кавалеры **Рудик Исҡужинға - 75 йәш** (1950).

**28 -** шағирә, журналист, "Аҡбуҙат" журналының баш мөхәррире, Салауат Юлаев ордены кавалеры, Ш.Хоҙайбирҙин, Ш.Бабич исемендәге һәм киң мәғлүмәт саралары өлкәһендә РФ Хөкүмәте премиялары лауреаты **Лариса Абдуллинаға - 50 йәш** (1975).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# ҺӨЙӨНӨСТӘР ҘӘ, КӨЙӨНӨСТӘР ҘӘ...

**Үткән аҙнаның һөйөнсөһөнән башлайыҡмы әллә? Тик күҙ тейҙерә күрмәйек: үҙегеҙ белмәгән ни эш бар - хәрби хәрәкәттәр барышында йә бер яҡ, йә икенсеһе алға сыға. Әле иһә Рәсәй ғәскәре үҙенең мөһим литий яҡтылығы менән билдәле Шевченко ауылын яулаған, тигән хәбәр килеп етте.**

Днепропетровск өлкәһенә барышлай юлда урынлашҡан был тораҡ пунктын, атап әйткәндә, Европалағы иң эре литий ятҡылығын, обороналауҙа Украина Ҡораллы көстәре составындағы НАТО ялланыусылары һәм офицерҙары ҡатнашҡан, сөнки АҠШ өсөн был объект мөһим әһәмиәткә эйә: хәтерләһәгеҙ, Украина һирәк ҡаҙылдыҡтар ятҡылыҡтарын АҠШ ҡарамағына тапшырыу хаҡында килешеү төҙөп һатыуы хаҡында бынан алда яҙғайныҡ инде. Шуға күрә лә Шевченконы нисек тә һаҡлап ҡалыу өсөн ныҡлы әҙерлек алып барылған. Запорожьелағы Текә яр (Крутая балка) литий ятҡылығына өҫтәп, Донецк халыҡ республикаһындағы һирәк металл ятҡылығының да Рәсәй контроленә күсеүен Украина өсөн сираттағы еңелеү тип ҡарарға була. Шевченко участкаһы 90 проценттан ашыу литий менән алюминий силикатынан тора. Унда шулай уҡ тантал, ниобий, бериллий, цезий, рубидий һәм аҡ ҡурғаш кеүек һирәк металдар ҙа бар. Литий, йәғни "аҡ алтын", электромобилдәр өсөн заман аккумуляторҙары эшләүҙә, шулай уҡ электроникала, быяла сәнәғәтендә, авиатөҙөлөштә, энергия туплау системаларында файҙаланыла.

The New York Times гәзите яҙып сығыуынса, РФ Ҡораллы көстәренең был уңышы Киевтың АҠШ менән хеҙмәттәшлек мөмкинлектәрен юҡҡа сығара, сөнки, эксперттар фекеренсә, был стратегик ятҡылыҡтарһыҙ Украина Америка өсөн әһәмиәтен юғалтасаҡ. Өҫтәүенә, 29 июнгә ҡарай төндә Украина хәҙер инде былтырҙан алып дүртенсе F-16 көнбайыш истребителен юғалтты. Харьков өлкәһенең Купянск районында Рәсәй дрондары әүҙемләшеү сәбәпле, Украина Ҡораллы көстәре үҙҙәренең боҙолған техникаһын ташлап ҡалдыра.

Ләкин, нисек кенә булмаһын, Украина террористары Рәсәй территорияһына дрондар менән һөжүмен туҡтатмай. 29 июнь, мәҫәлән, Брянск ҡалаһына күпләп шартлатҡыс аппараттар осоролған. Урындағы тыныс халыҡ зыян күргән, ике кеше яраланған. Рәсәй Хәүефһеҙлек советы секретары урынбаҫары Юрий Коков әйтеүенсә, Киев Рәсәйгә ҡаршы асыҡтан-асыҡ терроға йүнәлеш алды. Рәсәйҙең сик буйы төбәктәренә ҡарата ғына ла былтыр 645 теракт (2023 йылда ни бары 89) ҡылынһа, быйыл биш ай эсендә 481 осраҡҡа барып еткән. Был күбеһенсә Рәсәй төбәктәренә дрондар яуҙырыу, тыныс тораҡ пункттарға диверсион-террористик төркөмдәр һөжүме, ут асыу рәүешендә алып барыла. Әле Курск өлкәһенә 5 меңлек аҡса рәүешендә Украина лозунгыһы менән QR-кодлы листовкалар ташлай башлағандар. QR-код ярҙамында Украина махсус хеҙмәттәре кешенең телефон мәғлүмәттәренә үтеп инергә иҫәп тота.

РФ Оборона министрлығы хәбәр итеүенсә, 27 июндә Рәсәй Һауа һөжүменә ҡаршы саралар тарафынан 39 украин дроны атып төшөрөлгән: Ростов өлкәһендә - 19, Волгоградта - 13. Әммә дошмандың һөжүме яуапһыҙ ҡалмай. 29 июнгә ҡарай төндә Рәсәй яғы тарафынан Украинаның хәрби объекттарына 450-нән ашыу "Герань" дроны, 40 ҡанатлы ракета осоролған һәм, әлбиттә, "Кинжал" менән "Искәндәр" ҙә үҙ эштәрен башҡарған: хәрби-сәнәғәт комплексы һәм нефть эшкәртеү предприятиелары пыранзаран килтерелгән, тип хәбәр итә мәғлүмәт сығанаҡтары.

Рәсәй сит ил эштәре министры Сергей Лавров әйтеүенсә, "Украина ҡулы" менән беҙҙең илгә ҡаршы һуғыш алып барған Көнбайыш та инде Рәсәйҙе стратегик еңелеүгә дусар итеп булмаясағын аңлай башлағандыр, моғайын. Улар бер ҡасан да был хәлде күрмәне һәм был юлы ла күрмәйәсәк. Президент Владимир Путин әйтмешләй, Көнбайыш менән бер ҡапҡаға уйнау тамам. Етмәһә, Евроберләшмә илдәрендә Украинаға хәрби ярҙамды туҡтатыуҙы талап иткән сығыштар көсәйә бара. Был хаҡта күптән түгел Румыния, Венгрия, Словакия, Польша, Италия, Германия һәм Франция йәмәғәтселеге һәм оппозиция партиялары белдерҙе һәм Киевҡа ҡорал оҙатыуҙы туҡтатыу, конфликтты көйләү буйынса һөҙөмтәле һөйләшеүҙәр башларға саҡырып мөрәжәғәт итте. Үткән аҙнала Парижда булып үткән протест акцияһында, мәҫәлән, йөҙәрләгән кеше "Макрон, беҙ Украина өсөн үлергә теләмәйбеҙ", тип яҙылған лозунг тотоп урамдарға сыҡты һәм НАТО-ла ағза булып тороуҙан баш тартыуҙы, президент Макронды отставкаға ебәреүҙе талап итте.

Ә хәҙер Израиль премьеры Биньямин Нетаньяху хаҡында бер йөмлә. Был әҙәмде 2019 йылдың ноябрендә үк генпрокурор өс төрлө коррупция эше: ришүәтселек, мутлыҡ һәм йәмәғәтселек ышанысы менән яуыз ниәттә файҙаланғаны өсөн яуапҡа тарттырырға ниәтләгән, ләкин Нетаньяху был ғәйепләүҙәрҙең барыһын да инҡар итеп килгән, шулай ҙа был эш Иерусалим округ судына тапшырылған. Премьерҙың адвокаттары шаһит күрһәтеүҙәре биреүҙән бер аҙналыҡ тәнәфес һорап мөрәжәғәт иткәс, суд яҡлаусы юллауҙарын өлөшләтә ҡәнәғәтләндергән, тип хәбәр итә Ynet порталы. Быңа һиңә кәрәк булһа, мә!..

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Һаҡсы Илдан Ғәзимов "Салауат Юлаев" клубы менән яңы килешеүгә ҡултамғаһын ҡуйҙы. Яңы контракт бер йылға иҫәпләнгән. Уҙған миҙгелдә "Салауат Юлаев" тәрбиәләнеүсеһе Ғәзимов КХЛ-дың бронза призеры булды, 72 уйында 6 (2+4) мәрәй йыйҙы, файҙалылыҡ күрһәткесе +4. Плей-офф уйындарында ла Илдан команда өсөн лайыҡлы көрәште, ике позицияла уйнаны: һаҡта һәм һөжүмдә. "Әлбиттә, Өфөлә ҡалғым килде, иҫ белгәндән алып, ошонда йәшәйем, тиергә мөмкин. Көйәрмәндәр ҙә мине үҙ башҡорто итте", - тип һөйләне "Башинформ"ға Ғәзимов.

✔Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы тау һәм бәләкәй йылғаларҙа һыу кимәленең күтәрелеүе, гидротехник ҡоролмаларға ағымдың артыуы, уйһыу ерҙәрҙе һыу баҫыу ихтималлығы хаҡында иҫкәртте. Министрлыҡ мәғлүмәттәре буйынса, күпселек райондарҙа ямғыр, урыны менән көслө ямғыр яуыу дауам итә. Ҡайһы бер райондарҙа күк күкрәүе, боҙ-борсаҡ яуыуы, елдең секундына 15-20 метрға тиклем көсәйеүе мөмкин.

✔Башҡортостанда әҙәбиәт, сәнғәт һәм архитектура өлкәһендәге Шәйехзада Бабич исемендәге республика йәштәр премияһына ғаризалар ҡабул итеү тамамланды. Республика етәксеһе Радий Хәбиров ҡарары менән премиялар күләме 150 мең һумдан ярты миллионға тиклем арттырылды. Премия республика мәҙәниәте үҫешенә тос өлөш индергән йәш яҙыусыларға, рәссамдарға, артистарға, музыканттарға, архитекторҙарға һәм режиссерҙарға ике йылға бер тапҡыр тапшырыла. Дәғүәселәрҙең йәше - 16-35.

✔Дәүләт Думаһында мәктәп уҡыусыларының уҡыу йөкләмәһе юғары булыуы һәм төп дәүләт имтиханының (ОГЭ) маҡсатҡа ярашлылығы мәсьәләләре тикшереләсәк. Рәсәй Дәүләт Думаһы рәйесе Вячеслав Володин уҡытыусылар, профилле министрлыҡ, ата-әсәләр берләшмәһе, эксперттар ҡатнашлығында был теманы тикшереүҙе ойоштороға ҡушты. Парламент спикеры фекеренсә, юғары класс уҡыусыларының уҡыу йөкләмәһе санитар-эпидемиологик нормаларҙан 30 процентҡа күберәк булыуы хәүеф тыуҙыра. Шул уҡ ваҡытта, Вячеслав Володин һүҙҙәренсә, 9-сы кластан һуң бала колледжға, техникумға, училищеға уҡырға инһә, уға ни өсөн ОГЭ тапшырырға?

✔"Башинформ" агентлығының "Башҡортостандың иң яҡшы клубы" конкурсы апрелдә старт алғайны. Унда төрлө район-ҡаланан 1,5 меңдән ашыу клуб ҡатнашты. Был аҙнала конкурстың еңеүселәре билдәләнде. Вәғәҙә ителгәнсә, тәүге өс урынды яулаған клубҡа гармун, ҡурай һәм ҡубыҙ башҡорт уйын ҡоралдары, аҡсалата приздар тапшырылды. I урын - Мәсетле районының Оло Аҡа ауылы мәҙәниәт йорто (6481 тауыш), II урын - Шишмә районының Бүләкбаш ауылы мәҙәниәт йорто (5727 тауыш), III урын - Нуриман районының Иҫке Күл ауылы мәҙәниәт йорто (2924 тауыш).

*✓ Беҙҙең һалдаттарҙың ныҡлығы һоҡландырҙы: ауыр йәрәхәттәргә ҡарамаҫтан, улар мөмкин тиклем тиҙерәк фронт һыҙығына әйләнеп ҡайтырға теләй. Бер кем дә үкенмәй, мыжымай.*



ҠЫҪҠАСА

# ХӘҮЕФҺЕҘ БУЛҺЫН

**Башҡортостанда рәсми туристик маршруттар исемлеге төҙөлдө.** Белдереүҙәренсә, туристик маршрутҡа рәсми тигән статус биреү туроператорҙарҙан тейешле ғариза ҡаралғандан һуң ғәмәлгә ашырыла. Ғариза биреүселәргә критерийҙар иҫәбендә - республика биләмәһендә бер йылдан ашыуыраҡ эшмәкәрлек алып барыу; туристик маршрутты Рәсәйҙең һәм сит илдәрҙең киң мәғлүмәт сараларында, социаль селтәрҙәрҙә, рейтингтарҙа күрһәтеү. Туроператорҙарҙан бөтәһе 67 ғариза килгән, тип хәбәр иттеләр республиканың Эшҡыуарлыҡ һәм туризм министрлығынан. Ведомство-ара комиссия 59 маршрутты хуплап, исемлеккә индерҙе. Категориялы туристик походтар был исемлеккә юҡ. Исемлеккә рәсми раҫланған маршруттар тураһында дөйөм мәғлүмәттәр генә бирелгән. Ентеклерәк мәғлүмәт алыу өсөн туроператорҙарға һәм ойоштороусыларға туранан-тура мөрәжәғәт итергә кәңәш ителә. Туристик маршрутты хәүефһеҙлеген тәьмин итеү өсөн турҙы ойоштороусы яуаплы.

✓ **Башҡортостанда тәрбиәгә бала алған ғаиләләр, опекундар һәм уллыҡҡа (ҡыҙлыҡҡа) алыусылар өсөн бер тапҡыр түләнә торған пособие күләме билдәле булды.** Социаль фондтың Башҡортостан Республикаһы буйынса бүлексәһе мәғлүмәттәренә ярашлы, 2025 йылдың 1 февраленән район коэффициенты менән бергә түләүҙәрҙең күләме 30 982,97 һум тәшкил итә. Инвалид баланы, 7 йәше тулған йәки бер туған ике йәки унан күберәк баланы тәрбиәгә алғандар өсөн пособие күләме һәр балаға 236 735,10 һум була. Шул уҡ ваҡытта уллыҡҡа алыусылар һәм опекундар Рәсәй Федерацияһы граждандары булырға, Рәсәйҙә даими йәшәргә тейеш. Бер тапҡыр бирелә торған пособиены алыу өсөн 6 ай эсендә мөрәжәғәт итергә кәрәк. Ғаризаны Социаль фондтың Башҡортостан буйынса бүлексәһенең клиенттар хеҙмәтендә, Күп функциялы үҙәктә йәки Дәүләт хеҙмәттәре порталында бирергә мөмкин. Социаль фондтың төбәк бүлексәһе матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, 2024 йылда 780-дән ашыу ғаилә ошондай түләүҙәр алған.

✓ **Бөгөн дәүләт урман фонды биләмәһендә икенсе-өсөнсө класлы янғын хәүефе фаразлана.** Янғын хәүефенең юғары булыуына бәйле Башҡортостандың Урман хужалығы министрлығы Әбйәлил, Баймаҡ, Бөрйән урмансылыҡтары биләмәһендә урмандарға һәм уларға транспорт сараларының инеүенә элек индерелгән сикләүҙе оҙайтты. Урман үҫентеләрен ҡуртымға алыу һәм һатып алыу-һатыу килешеүенә ярашлы, урмандарҙы һаҡлау, тергеҙеү буйынса сараларҙы тормошҡа ашырған юридик шәхестәргә һәм граждандарға сикләү ҡағылмай. Әммә туристарға һәм һунарсыларға ҡәтғи ҡағыла, тип билдәләләр Министрлыҡта. Янғынға ҡаршы махсус режим шарттарында урмандарҙа янғын хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен боҙған өсөн граждандарға - 40 меңдән 50 мең һумға; вазифалы кешеләргә - 60 меңдән 90 мең һумға; юридик шәхестәргә 600 меңдән бер миллион һумға тиклем административ штраф һалыныуы мөмкин.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БӘЙЛӘНЕШТӘР НЫҒЫЙ




**26-27 июндә Түбәнге Новгородта Рәсәй һәм Белоруссия төбәктәренең 12-се форумы үтте. Унда Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров етәкселегендә республика делегацияһы ҡатнашты. "Түбәнге Новгород йәрминкәһе" күргәҙмә үҙәге майҙансығында ойошторолған сараға быйыл Рәсәйҙең 79 төбәгенән һәм Белоруссия өлкәләренән 800-ҙән ашыу делегат килгәйне.**

Форумда ҡатнашыусыларҙы онлайн форматта Рәсәй Президенты Владимир Путин тәбрикләне. Форум делегаттарына видеотәбрикләү менән шулай уҡ Белоруссия Президенты Александр Лукошенко ла сыҡты. Ул үҙенең сығышында ике ил төбәктәре форумының һөҙөмтәле булыуы тураһында белдерҙе.

Сара сиктәрендә Башҡортостан һәм Белоруссия вәкилдәренең эшлекле осрашыуҙары үтте. Шул иҫәптән Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары - иҡтисади үҫеш һәм инвестиция сәйәсәте министры Рөстәм Моратов Белоруссия сәнәғәт министрының беренсе урынбаҫары Андрей Конюшко менән һөйләшеүҙә алып барҙы. Яҡтар ике республиканың тотороҡло үҫеше, сәнәғәт кооперацияһын киңәйтеү мәсьәләләрен тикшерҙе. Шулай уҡ "Беллегпром" концерны рәйесе урынбаҫары Наталья Мурашко менән осрашыу барышында ике арала енел сәнәғәт өлкәһендә хеҙмәттәшлекте үҫтереү мәсьәләләре тикшерелде. Республикала Беларусь Сауҙа йортон, Өфөнөң сауҙа үҙәктәренең береһендә "Да Дому" (йорт һәм интерьер дизайны өсөн тауарҙар) магазины асыу мөмкинлеге ҡаралды.

Башҡортостан делегацияһы Рәсәй һәм Белоруссия төбәктәренең халыҡ хужалығы ҡаҙаныштары күргәҙмәһен дә ҡараны. Унда үҙенең продукцияһын Өфөнөң трамвай-троллейбус заводы күрһәтте. Машина эшләү предприятиеһы Минск автомобиль заводы менән берлектә заманса троллейбустар эшләп сығара. Етештерелгән 700-ҙән ашыу троллейбус Рәсәйҙең 14 төбәгендә пассажирҙарҙы хеҙмәтләндерә. Был ҡала транспортын яңы майҙансыҡта етештереү күҙаллана. Ошо маҡсатта быйыл февралдә "МАЗ-УТТЗ" электр транспорты үҫеше биләмәһе" тигән берлектәге предприятие теркәлгән. Рөстәм Моратов яңы компанияның етәкселеге менән осрашты, производствоны үҫтереү пландары тикшерелде.

# ХӘРБИ ЖУРНАЛИСТАРҘЫ...

**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаттары аҙаҡҡы уҡыуҙа "Башҡортостан Республикаһы киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәрҙәренең айырым категорияларына дәүләт ярҙамы тураһында" закон ҡабул итте. Документ республика етәксеһе Радий Хәбиров башланғысы буйынса әҙерләнде.**

Хәбәр ителеүенсә, закон проекты менән республиканың хәрби журналистарына дәүләт ярҙамы ҡарала, киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәрҙәренең ошо категорияһының, хәрби журналистика ветерандарының статусы, уларға һәм уларҙың ғаиләләренә социаль гарантиялар билдәләнә. Һәләк булған хәрби хәбәрселәрҙең туғандарына һәм хеҙмәт бурыстарын үтәгәндә зыян күргән журналистарға түләүҙәр индереү планлаштырыла. Ярҙам сараларының аныҡ исемлеген республика Хөкүмәте билдәләй, тип белдерҙеләр парламенттың яҙғы сессияһының йомғаҡлау ултырышында.

Дәүләт Йыйылышы комитеты рәйесе Рөстәм Ишмөхәмәтов һүҙҙәренсә, әлегә Рәсәйҙең бер субъектында ла киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәрҙәренә дәүләт ярҙамын күҙ уңында тотҡан закон юҡ. МХО биләмәһендә һәм башҡа ҡыҙыу нөктәләрҙә эшләгән журналистарҙың хоҡуҡтарын нығытыу, Башҡортостандың хәрби журналисы, хәрби журналистика хеҙмәткәре, хәрби журналистика ветераны статусын һәм дәүләт ярҙамы сараларын билдәләү мөһим, тине Рөстәм Ишмөхәмәтов. Һәләк булған хәрби журналистарҙың ғаилә ағзалары өсөн дә социаль гарантиялар ҡарала. "Башҡортостан Республикаһының хәрби журналистика ветераны таныҡлығы индерелә, ул дәүләт ярҙамы сараларын алыу өсөн документаль нигеҙ булып тора. Бөгөн республиканан 11 киң мәғлүмәт сараһы хеҙмәткәре МХО биләмәһендә эшләй. Әгәр журналистың дөйөм эш күләме 60 көндән ашыу тәшкил итһә, ул ошо закондың мөмкинлектәрен ҡуллана ала. Әлбиттә, республика бюджетынан сығымдар талап ителә", - тип йомғаҡ яһаны Рөстәм Ишмөхәмәтов Дәүләт Йыйылышы ултырышында.

# ЯУГИРҘАР ЯНЫНДА

**Ҡатын-ҡыҙҙар ҙа алғы һыҙыҡта еңеү өсөн көрәшә. Республика Башлығы Радий Хәбиров ҡушыуы буйынса булдырылған беренсе ҡатын-ҡыҙҙар ирекмәндәр отряды инде 15-се тапҡыр МХО биләмәһендә эшләп ҡайтты. Был юлы Луганск Республикаһындағы хәрби госпиталгә ярҙамға Өфөнән һәм Межгорье ҡалаһынан 8 ирекмән юлланды.**

"Беренсе тирмә" проекты ирекмәндәренең береһе, БР Йәмәғәт палатаһы ағзаһы Ынйы Әхмәҙуллина алғы һыҙыҡта эшләп ҡайтҡандан һуң "Башинформ" журналисына кисерештәре, уй-тойғолары хаҡында һөйләне.

-Ике аҙналыҡ сменабыҙ йәһәт кенә үтеп тә китте. Һәр һалдат өсөн борсолоуҙар, шатлыҡ-көйөнөстәр, яҡташтар менән осрашыуҙар, оҙайлы һөйләшеүҙәр менән уҙы ул. Көнөбөҙ шулай башлана ине: кемдер түшәктә ятҡандарҙы ҡарай, кемдер ашханала ризыҡ бешерә, ә һуңынан һалдаттарҙы операцияларға әҙерләйбеҙ, уларҙың матрастарын алмаштырабыҙ. Ҡайһы бер һалдаттар ҡатмарлы операция кисерҙе. Ампутацияланған егеттәр ҙә бар ине. Беҙ уларҙы, ҡулдарынан тотоп, көндәлек тормош тураһында һөйләшеүҙәр менән ауыртыуҙан арындырырға тырыштыҡ. Беҙҙең һалдаттарҙың ныҡлығы һоҡландырҙы: ауыр йәрәхәттәргә ҡарамаҫтан, улар мөмкин тиклем тиҙерәк фронт һыҙығына әйләнеп ҡайтырға теләй. Бер кем дә үкенмәй, мыжымай. Бөтә дауахана һалдаттарҙың рух ныҡлығы һәм көслө хис-тойғолары менән солғанғайны.

Яугирҙар медицина хеҙмәткәрҙәренә, ирекмәндәргә ҙур рәхмәтле. Ирекмәндәр улар өсөн һуңғы тинен сығарып һалырға әҙер. Яралыларға яңы кейемдәр, ғаиләләре менән бәйләнешкә инә алһын өсөн телефондар килтерәләр. Һалдаттарҙы тәмлекәстәр менән һыйлайҙар: беҙҙең ҡыҙҙар ҙа кәнфит, шәкәр, ҡаһуә һатып алды. Межгорье ирекмәндәре госпиталдә унайлы шарттар булдырыу өсөн бүлектәргә вентиляторҙар, ял бүлмәһенә ҡорғандар ҡуйҙырттылар. Һалдаттар бик шатлана, фронт һыҙығындағы хәл-әхүәл хаҡында һөйләй. Уларҙың күбеһе Еңеү менән ғаиләләренә ҡайтырға, киләсәктә улдар һәм ҡыҙҙар үҫтерергә хыяллана... - тип һөйләне ирекмән күҙ йәштәре аша.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Күгәрсен районынан миномёт расчёты составында хәрби бурыстарын үтәгән "Бал" позывнойлы яугир дошмандың һөжүмен кире ҡаҡҡан һәм 25-тән ашыу боевикты юҡ иткән. Яҡташыбыҙ контузия алһа ла, хәрби бурысын үтәүен дауам иткән. Республикабыҙ яугиры хеҙмәт иткән ғәскәри часть командирынан Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировҡа килгән рәхмәт хатында ошо турала әйтелә. Күгәрсен районы хакимиәтенән хәбәр итеүҙәренсә, "Бал" 2023 йылдан алып МХО биләмәһендә хеҙмәт итә.

✓Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаттары "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған күп функциялы үҙәк хеҙмәткәре" тигән маҡтаулы исем булдырыу, һөнәри байрам - республиканың дәүләт һәм муниципаль хеҙмәттәр күрһәтеү буйынса күп функциялы үҙәк хеҙмәткәрҙәре көнөн билдәләү тураһында закон ҡабул итте.Һөнәри байрам йыл һайын 27 июлдә билдәләнә, сөнки 2010 йылда тап ошо көндә Рәсәй Президенты "Дәүләт һәм муниципаль хеҙмәттәр күрһәтеүҙе ойоштороу тураһында" федераль законға ҡул ҡуйғайны.

✓Башҡортостанда мәҙәниәт министры урынбаҫары тәғәйенләнде. Эльза Ҡарамурзина мәҙәниәт министрлығында социомәҙәни блок - музейҙар, китапханалар, клубтар, яҙыусылар союзы эшмәкәрлеге өсөн яуаплы. Ошо йүнәлештә эшләгән элекке куратор Илнур Мөхйәнов министр урынбаҫары вазифаһында ҡала һәм милли сәйәсәт өсөн яуап бирә. Эльза Ҡарамурзина Баймаҡ районының Иҫке Сибай ауылында тыуған. Мәҙәниәт һәм идара итеү өлкәһендә юғары белемгә эйә. Быға тиклем Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығында, Республика Башлығы хакимиәтендә эшләй. 2020-2025 йылдарҙа спорт министры урынбаҫары була.

✓Дәүләкән - Талбазы юлында Дим йылғаһы аша һалынған күпер өлөшләтә ремонтҡа ябылған. Эштәр 2024 йылда башланған. Әле подряд ойошмаһы 206 метр оҙонлоғондағы яһалма ҡоролманың Талбазы йүнәлешендәге уң яғының тимер-бетон плиталәрен алмаштыра. "Күпер аша тәүлегенә 1800-ҙән ашыу автомобиль, шул иҫәптән йәмәғәт транспорты һәм мәктәп автобустары үтә. Уның тимер-бетон балкалары алмаштырыла, конустарын нығытыу эштәре алып барыла", - тип хәбәр итәләр Башҡортостандың Транспорт һәм юл хужалығы министрлығынан.

✓Аксен - Аксаков - Бәләбәй автомобиль юлындағы юл участкаһы ремонтлана. Был эштәрҙе 30 сентябргә тиклем тамамлау ҡаралған."Аксен - Аксаков - Бәләбәй юлы мәҙәни мираҫ һәм ял объекттарына илтә. С.Аксаков исемендәге шифаханаға, Дмитрий Солунский сиркәүенә, 1941-1945 йылдарҙа госпиталдәрҙә һәләк булған совет яугирҙарының туғанлыҡ ҡәбере-мемориалына ла ошо юл үтә", - ти республиканың транспорт һәм юл хужалығы министры Любовь Минакова.

ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ!



# БАШЛАНДЫ!

**Хәбәр ителеүенсә, 30 июнда Салауат Юлаев һәйкәлен реконструкциялау һәм реставрациялау проектына старт бирелде. Әлегә майҙанда әҙерлек эштәре үткәрелә, ә сентябрҙә һәйкәлде реставрацияға алып китәсәктәр.**

Һәйкәлгә юлды ябып, уның тирәһендәге майҙанды кәртәләй башланылар. Был турала Башҡортостан Мәҙәни мираҫ объекттарын дәүләт һаҡлауы идаралығы етәксеһе Салауат Ҡолбахтин Милли музейҙа үткән брифингта белдерҙе. Ул киң йәмәғәтселектең проектҡа ҙур иғтибары арҡаһында ведомстволағы Күҙәтеү советы ойошторолоуы, унда сәнғәт белгестәре генә түгел, геология, геодезия һәм металл өлкәһендәге белгестәр ҙә инеүе тураһында белдерҙе. Уларға реставрация эштәре барышы тураһында мәғлүмәт биреп тороу бурысы йөкмәтелгән.

Төп реконструкция эштәре 2027 йыл аҙағына тиклем дауам итәсәк, яңыртылған комплекс һәйкәлдең 60 йыллығын билдәләгән ваҡытта асыласаҡ. Алдан белдереүҙәренсә, эштәр өс этапта башҡарыласаҡ. Беренсеһе - әҙерлек этабы: биләмәне кәртәләү, төҙөлөш урынын әҙерләү, ауыр техника үтә алырлыҡ юл һалыу. Сентябрҙә 60 тонна ауырлыҡты күтәрә алыусы кран һәйкәлде постаменттан төшөрәсәк.

Икенсе, төп этап: һындарҙы реставрациялау, постамент һәм курғанды, шулай уҡ фонтанды реконструкциялау. Тикшереүҙәр монумент ултырған урындың торбаларҙан һыу үтеп сығыуы сәбәпле аҫҡа төшөүен асыҡлағайны.

Скульптура үҙе цехта реставрацияланасаҡ. Тутығыу арҡаһында зыян күргән каркас тулыһынса алыштырыласаҡ, ә һыбайлы һәм ат һындары йыйылмаһының суйын пластиналары һәйкәлде елдән һәм ультрафиолет нурҙарҙан һаҡлаусы полимер материалдар менән эшкәртеләсәк.

Шулай уҡ һәйкәл эсендә конденсат барлыҡҡа киләсәк, сөнки ул шундай мөхит эсендә урынлашҡан. "Һәйкәлде ҡала үҙәгендә ҡуйыу варианты ла булған, ул саҡта, әлбиттә, уны тәбиғи факторҙарҙың көслө тәьсиренән һаҡларға мөмкин булыр ине. Әммә Тавасиев быға ҡырҡа ҡаршы тора. Ул үҙенең ижадын тик Ағиҙел буйында күрергә теләй. Уның был идеяһын тормошҡа ашырыу еңелдән булмай, сөнки был тирәләге өйҙәрҙе һәм унда йәшәүселәрҙе күсерергә тура килә", - тине Салауат Ҡолбахтин.

Өсөнсө, аҙаҡҡы этапта, 2027 йылдың апреленән сентябренә тиклем, майҙанды тәртипкә килтереү эштәре атҡарыла. Проекттың хаҡы 300 млн һумға баһалана. Артабан һәйкәл реставрацияһыҙ 60 йыл торорға тейеш, тип ҡуҙаллана. "Реконструкциялау эштәренең сифаты тураһында борсолорға кәрәкмәй, ул профессионалдарға ышаныл тапшырыла. Закондарға ярашлы, был һәйкәл кеүек федераль әһәмиәттәге объект үҙгәртеүҙәргә дусар ителә алмай. Бер ниндәй яңылыҡтар ҙа индерелмәйәсәк. Ә бына юғалған пропорциялар һәм элементтар тергеҙеләсәк", - тине Салауат Ҡолбахтин.

# ЛЕНИН ПАРКЫ ЯҢЫРА

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөләге Ленин паркын төҙөкләндереү барышы менән танышты. Килешеү буйынса эштәрҙе башҡарыусы ойошма вәкилдәре Башҡортостан Башлығына баш ҡаланың иң боронғо паркын төҙөкләндереү сиктәрендә ниндәй эштәр атҡарыласағы хаҡында һөйләне.**

Был паркҡа 1869-1872 йылдарҙа нигеҙ һалына, уның дөйөм майҙаны 7,5 гектар. Бынан алдағы һуңғы төҙөкләндереү эштәре 1980 йылда башҡарыла. Быйыл 12 майҙа парк ябылды һәм уны тергеҙеү эштәре башланды. Паркты төҙөкләндереү "Тормош инфраструктураһы" милли проектының "Уңайлы ҡала мөхите булдырыу" программаһы сиктәрендә алып барыласаҡ. Килешеү буйынса эштәрҙе башҡарыусы ойошма вәкилдәре Башҡортостан Башлығына баш ҡаланың иң боронғо паркын төҙөкләндереү сиктәрендә ниндәй эштәр атҡарыласағы, атап әйткәндә, ике фонтанды тергеҙеү, йәйәүлеләр һәм йүгереүселәр өсөн яңы юлдар булдырыу, яҡтылыҡ һәм видеокүҙәтеү системалары үткәреү хаҡында һөйләне. Граждандар һуғышы геройҙарына һәйкәл менән БАССР наградалары стелаһы ла яңыртыласаҡ. Тәбәк әһәмиәтендәге мәҙәни ҡомартҡы булараҡ, парктың төп элементтары һәм объекттары һаҡлап ҡалынасаҡ.

- Өфөнөң Ленин паркы республика һәм уның халҡы өсөн мөһим әһәмиәткә эйә. Республикабыҙ тарихында күп нәмәләр уның менән бәйле. Парк күптән тотошлай яңыртыуға мохтаж ине. Бындағы бөтөн иҫкергән материалдарҙы алып ташлап, яңыларына алмаштырабыҙ. Иң мөһиме, беҙ бындағы тәбиғи мөхитте һаҡлап ҡаласаҡбыҙ. Йәмәғәтселек советы менән кәңәшләшеп, ҡартайған ағастарҙы ҡырҡыуҙар буласаҡ, әлбиттә. Ҡалған ағастар һаҡланасаҡ. Бында мәҙәни ҡомартҡы объекттары байтаҡ, уларҙы тәртипкә килтерәсәкбеҙ. Ҡыҫҡаһы, парк яңырасаҡ. Студенттар бында спорт менән шөғөлләнә, уларға йүгереү өсөн һуҡмаҡ һалынасаҡ. Ҙур булмаған кафе, балалар өсөн уйын майҙансыҡтары төҙөләсәк. Мин төҙөүселәр һәм Торлаҡ-коммуналь министрлығ алдына республикала ғына түгел, Рәсәйҙә иң яҡшы парк төҙөгөҙ, тигән бурыс ҡуйҙым. План буйынса бындағы эштәр йыл ярым-ике йыллап барасаҡ,- тип һөйләне Радий Хәбиров журналистарға.

Ленин исемендәге был парк тәүҙә Ушаковский исеме менән йөрөтөлһә, аҙаҡ Азатлыҡ паркы тип үҙгәртелә. Бында революция һәм Граждандар һуғышы йылдарында һәләк булғандар ерләнгән һәм ул урында хәҙер мемориал урынлашҡан. 1934 йылда бында шулай уҡ башҡорт һәм татар әҙәбиәте классигы, Башҡортостандың халыҡ шағиры Мәжит Ғафури ерләнгән. 1951 йылда Александр Матросов һәйкәле ҡуйыла һәм парк Александр Матросов исеме менән йөрөтөлә башлай. 1970-1980 йылдар сиктәрендә парктың тышҡы күренеше тағы үҙгәреш кисерә: бөтөн аттракциондар менән революцияға тиклемге фонтан алып ташлана, ҡайһы бер ағастар ҡырҡыла. Парк янында КПСС Өлкә комитеты бинаһы урынлашҡанлыҡтан, мәҙәни объектҡа В.И.Ленин исеме бирелә, һәм ул әле лә шул исем менән йөрөтөлә.

"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан бик күп арҙаҡлы шәхестәребеҙ бар. Бөгөн балалар, йәштәр улар хаҡында бигүк хәбәрҙар түгел. Башҡорт мәктәбендә фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһендәр әйҙә.**

## ДӘҮЛӘТОВ ҒӘБДЕРӘҮЕФ ҒӘБДЕЛҒӘНИ УЛЫ

Ул - Бөйөк Ватан һуғышында батырҙарса һәләк булған яугир-кавалерист, 112-се Башҡорт кавалерия (16-сы гвардия Чернигов) дивизияһының 58-се гвардия кавалерия полкында пулемёт взводы командиры, гвардия лейтенанты. Советтар Союзы Геройы.

Ҡаһарман йөрәкле башҡорт егете Ғәбдерәүеф Дәүләтов 1916 йылдың 27 мартында Ырымбур губернаһы Верхнеурал өйәҙе Хәлил ауылында (хәҙерге Әбйәлил районы) крәҫтиән ғаиләһендә бишенсе бала булып донъяға килә. Ғаиләлә бөтәһе 12 бала булып, икеүһе сабый сағында уҡ үлә. Ғәбдерәүеф тәүҙә тыуған ауылы мәктәбендә, һуңынан Билал ауылында уҡый, Баҡыруҙәктә ете класты тамамлай. 1937-1938 йылдарҙа янғындан һаҡлау начальнигы, һуңынан шахтер булып эшләй. 1938-1940 йылдарҙа - Ҡыҙыл Армия сафтарында хеҙмәт итә. РККА-ның поляк походында ҡатнаша. Демобилизациялангандан һуң всеобуч инструкторы булып эшләй, артабан - Башҡорт АССР-ының Әбйәлил районы хәрби комиссариаты инструкторы. 1942 йылдың октябрендә РККА-ға ҡабаттан саҡыртыла. Өфөлә "Выстрел" курсы филиалын тамамлай. 1943 йылдың мартынан - Бөйөк Ватан һуғышында, Үҙәк һәм Белорус фронттарында барған яуҙарҙа ҡатнаша. Гвардия лейтенанты Дәүләтов 1943 йылдың сентябренән 16-сы гвардия кавалерия дивизияһында, 58-се гвардия кавалерия полкының пулемёт взводы командиры (Үҙәк фронт, 61-се армия. 7-се гвардия кавалерия корпусы). Днепр өсөн алыштарҙа айырыуса ҡаһарманлыҡ күрһәтә. 1943 йылдың 26 сентябренән 27 сентябренә ҡараған төндә Нивки ауылы тирәһендә (Белоруссия, Гомель өлкәһе, Брагин районы) беренселәрҙән булып Днепр аша сыға. Ҡаршы ярға сыҡҡан саҡта пулемёт расчеты сафтан сыға һәм Дәүләтов яңғыҙ ҡалып, дошман һалдаттарына ут аса һәм уларҙы траншеяла йәшенергә мәжбүр итә. Кәмәләге яугирҙар килеп еткәс, улар менән бергә дошман траншеяһына бәреп инә һәм шәхсән үҙе 6 немец һалдатын юҡ итә, ә берәүһен әсирлеккә ала. 1943 йылдың 27 октябрендәге тиңһеҙ алышта батырҙарса һәләк була. Асаревичи ауылында (Белоруссия, Гомель өлкәһе) туғандар ҡәберлегендә ерләнә.

СССР Юғары Советы Президиумының 1944 йылдың 15 ғинуарындағы указына ярашлы, немец баҫҡынсылары менән көрәштә фронт командованиеһының хәрби заданиеларын өлгәле башҡарғаны һәм уны үтәгәндә күрһәткән батырлығы һәм ҡаһарманлығы өсөн гвардия лейтенанты Дәүләтов Ғәбдерәүеф Ғәбделғәни улына Советтар Союзы Геройы исеме бирелә (үлгәндән һуң).

**Маҡтаулы исемдәре:** Советтар Союзы Геройы (1944); "Алтын Йондоҙ" миҙалы (15.01.1944); Ленин ордены (15.01.1944); Ҡыҙыл Байраҡ ордены (31.10.1943). Әбйәлил районының Хәлил ауылында Герой хөрмәтенә мәктәпкә уның исеме бирелгән, Хәлил һәм Асҡар ауылдарында уның исемендәге урамдар бар. Ғ. Ғ. Дәүләтовтың исеме алтын хәрефтәр менән, 112-се Башҡорт кавалерия (16-сы гвардия Чернигов) дивизияһының башҡа 78 Советтар Союзы Геройы исемдәре менән бер рәттән, Башҡортостан Республикаһының Милли музейы бинаһында (Өфө ҡалаһы, Совет урамы, 14) мәңгеләштерелгән, шулай уҡ уның исеме 112-се кавалерия дивизияһы музейы бинаһында (Өфө ҡалаһы, Левитан урамы, 27) уйылып яҙылған.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Уҙған ял көндәрендә Өфөлә 55 юл-транспорт ваҡиғаһы теркәлгән. Уларҙа дүрт кеше зыян күргән. Баш ҡала Дәүләт автоинспекцияһы мәғлүмәттәре буйынса, юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоуҙың 592 осрағы асыҡланған. Шул иҫәптән хәүефһеҙлек ҡайышын ҡулланыу ҡағиҙәләрен һанға һуҡмаған (94), йәйәүлеләргә юл биреү талабын үтәмәгән (37), бала ташыу ҡағиҙәләрен боҙған (30) өсөн протокол төҙөлгән. Бынан тыш, 41 йөйөүсе юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙған өсөн яуаплылыҡҡа тарттырылған. 25 иҫерек водитель ҡулға алынған, 9 иҫерек автоһәүәҫкәр медицина тикшереүе үтеүҙән баш тартҡан.

✓Башҡортостанда 54 йылдан ашыу хеҙмәт стажы булған табип-отоларинголог, фониатр Наил Ғабдуллинға "Өфө ҡалаһының почетлы гражданы" тигән исем бирелде. Наил Талха улы 1946 йылда тыуған, БДМУ-ны тамамлаған, һуңынан Мәскәү ғилми-тикшеренеү институты ҡарамағындағы фониатрия буйынса махсус курс үткән. 1975 йылда республика клиник дауаханаһында фониатрия хеҙмәтен ойоштора һәм уны етәкләй. Медицина фәндәре кандидаты, шулай уҡ "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған табибы" һәм "Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған табибы" Наил Талха улы һөнәре телмәр һәм тауыш менән бәйле булғандарға ярҙам күрһәтә.

✓Матур датала - 2025 йылдың 25 июнендә - Башҡортостан ЗАГС бүлектәрендә 245 никах теркәү тантанаһы уҙған. Республиканың Юстиция эштәре буйынса дәүләт комитетынан хәбәр итеүҙәренсә, был көндө никахтарҙың күбеһе Өфөлә теркәлгән: 15-е - Киров районының ЗАГС бүлегендә, 9-ы - Совет районының ЗАГС бүлегендә, 7-һе - Калинин районының ЗАГС бүлегендә. Республика буйынса беренсе урында Октябрьский ҡалаһы, унда 17 пар өйләнешкән, икенсе урында Нефтекама - 15 пар, өсөнсөлә иһә Стәрлетамаҡ - 12 пар.

✓Өфөнән Алина Маннанова "Башҡортостан геройҙары" кадрҙар программаһында ҡатнаша. 2023 йылда Алина контракт төҙөп, Луганск Халыҡ Республикаһына хәрби табип булып хеҙмәт итергә юлланды. Ул яраланған яугирҙарҙы фронт һыҙығынан эвакуациялау менән шөғөлләнә. "Батыр ҡыҙ бының менән генә туҡтап ҡалмай. Ҡайтҡас та маскировка селтәрҙәре бәйләү, блиндаж шәмдәре әҙерләү, гуманитар ярҙам йыйыу эшенә тотона. Алина - БДМУ-ның тактик медицина үҙәге етәксеһе лә, ул йәш табиптарға үҙенең туплаған тәжрибәһен еткерә", - тип һөйләнеләр мэрияла.

✓Өфөнән Дмитрий Лавров өҫтәл теннисы буйынса Донъя кубогы этабында алтын миҙал яуланы. Башҡортостан паралимпиясыһының еңеүе хаҡында республика вице-премьеры - спорт министры Руслан Хәбибов хәбәр итте. Дмитрий турнирҙың бөтә матчтарында: ике тапҡыр төркөм этабында һәм финалда еңеүсе булды.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

БОРОНҒО АМАНАТ

# ТЫЙЫУ ЙОЛАҺЫ

## Асылдан тайпылма

Тарихҡа баҡһаҡ, тәүтормош ҡәүемдәрендә һәм артабанғы йәшәйештә афәт, бәлә-ҡаза ҡурҡынысы килеүҙән ҡурсаланыр, ҡотолор өсөн берәй нәмәгә, эш-ҡылыҡҡа, ниндәйҙер һүҙгә табу һалынған булған. Табу кешене, көнитмеште тейешле ҡағиҙәләргә буйһондорған. Буйһонмағандар илаһи көстәр тарафынан язаланасағына ышандырылған. Көнитмеш, ижтимағи тормош йолаларға, ҡанундарға ярашлы булырға, кешеләр иһә тыйыуҙарға күнергә тейеш. Бер әкиәттә батша әйтеүенсә: "Батшалығымдың һауаһы шундай: кем дә кем буйһона - шул иркен тын алып, рәхәт йәшәй, кем дә кем буйһонмай - ул кеше тыны ҡыҫылып, интегеп үлә".

Боронғо Ҡытай сығанаҡтарынан мәғлүм булыуынса, мәшһүр дәүләт төҙөүсе Киджа халҡын йолаларҙы үтәргә, ғәҙеллеккә, төрлө кәсептәргә өйрәтә, һигеҙ тыйыу һала. Кешеләр өйҙәрен бикләмәй, урлашыу, әҙәпһеҙлек бөтә. Этик нормалар, кешеләр араһындағы мөнәсәбәт ҡағиҙәләре теркәлгән "Бөйөк закон" (Хунь фань) көнитмеште күркәм, ҡотло итә. Шулай итеп, йолалар, әхлаҡ-әҙәп нормалары, тыйыуҙар йорт-ил ырыҫын, именлеген тәьмин итә, улар этик, эстетик, педагогик, социологик һәм хоҡуҡи әһәмиәткә лә эйә.

Библияла иһә йәшәйешкә ҡағылышлы ун ҡанун (заповедь) бирелгән һәм улар ғәмәлдә тыйыуға ҡайтып ҡала:

- Я Господь, Бог твой, Который вывел тебя из земли Египетской, из дома рабства; да не будет у тебя других богов пред лицом Моим.

- Не делай себе кумира и никакого изображения того, что на небе вверху, и что на земле внизу, и что в воде ниже земли; не поклоняйся им и не служи им, ибо Я Господь, Бог твой, Бог ревнитель, наказывающий детей за вину отцов до третьего и четвертого рода, ненавидящих Меня, и творящий милость до тысячи родов любящим Меня и соблюдающим заповеди Мои.

- Не произноси имени Господа, Бога твоего, напрасно, ибо Господь не оставит без наказания того, кто произносит имя Его напрасно.

- Помни день субботний, чтобы святить его; шесть дней работай и делай в них всякие дела твои, а день седьмой - суббота Господу, Богу твоему: не делай в оный никакого дела ни ты, ни сын твой, ни дочь твоя, ни раб твой, ни рабыня твоя, ни (вол твой, ни осел твой, ни всякий) скот твой, ни пришелец, который в жилищах твоих; ибо в шесть дней создал Господь небо и землю, море и все, что в них, а в день седьмой почил; посему благословил Господь день субботний и освятил его.

- Почитай отца твоего и мать твою, чтобы тебе было хорошо и чтобы продлились дни твои на земле, которую Господь, Бог твой, дает тебе.

- Не убивай.

- Не прелюбодействуй.

- Не кради.

- Не произноси ложного свидетельства на ближнего твоего.

- Не желай дома ближнего твоего; не желай жены ближнего твоего, ни поля его, ни раба его, ни рабыни его, ни вола его, ни осла его, ни всякого скота его, ничего, что у ближнего твоего.

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.**
**(Дауамы бар).**

КӨН ТЕМАҺЫ

# БАШҠОРТОСТАН...

## фән үҙәгенә әүерелә

**Был аҙнала Өфө XIII Бөтә Рәсәй йәш ғалимдар Һәм студенттар ғилми йәмғиәттәре советтары съезын ҡабул итте. Уны үткәреү урыны итеп Башҡортостан осраҡлы һайланмағайны: республиканың технологик потенциалы ҙур, бында мәғарифты һәм фәнде үҫтереү өсөн яҡшы шарттар булдырылған. Был хаҡта "Башинформ" агентлығына биргән интервьюһында республиканың Фән һәм юғары белем биреү буйынса дәүләт комитеты рәйесе Светлана МОСТАФИНА һөйләне.**



**➔ Съездың Өфөлә үтеүе Башҡортостанды илдең фәнни-технологик үҫеш үҙәктәренең береһе булараҡ таныуҙың билдәһе булып тора, тип әйтеү дөрөҫмө?**

- Һис һүҙһеҙ, шулай. Республика үҙ алдына төбәк һәм ил үҫешенең мөһим мәсьәләләрен хәл итеүгә, шул иҫәптән Рәсәйҙең Фәнни-технологик үҫеш стратегияһын һәм Ун йыллыҡ фән һәм технологиялар башланғыстарын тормошҡа ашырыуға йәш ғалимдар берләшмәләрен мөмкин тиклем киңерәк йәлеп итеүгә йүнәлдерелгән амбициоз бурыстар ҡуя. Беҙҙә юғары һәм өҫтәмә белем алыу өсөн заманса платформа, проекттарҙы тормошҡа ашырыу өсөн уникаль тәжрибәләр бар. 2024 йыл йомғаҡтары буйынса Башҡортостан инвестиция мөхите милли рейтингында 3-сө урынды биләне - төбәктең инвестиция йәлеп итеү мөмкинлеген иһә фәнни потенциал да билдәләй икәне бәхәсһеҙ.

**➔ Республика йәш ғалимдарға ярҙам итеүгә байтаҡ аҡса, эҙләнеүҙәр өсөн премиялар бүлә. Дәүләт яғынан ошо иғтибарҙы күреп, хәҙерге йәштәр фәнгә үҙҙәре теләп киләме?**

- Ғалимдар аудиторияһы йылдан-йыл йәшәрә бара. Әлеге ваҡытта Башҡортостанда фән өлкәһендә 4,5 мең самаһы ғалим эшләй һәм уларҙың 2,5 меңдән ашыуы - 39 йәшкә тиклемге йәштәр. Йәш эҙләнеүселәргә ярҙамға республика йыл һайын 300 миллион һумдан ашыу аҡса йүнәлтә. Был аҡсаға 133 йәш ғалим торлаҡ шарттарын яҡшыртты һәм 500-ҙән ашыуы Рәсәйҙең һәм сит илдәрҙең алдынғы юғары уҡыу йорттарында стажировка үтте. Бынан тыш, ғилми йәштәр өсөн яңы лабораториялар асыла, улар менән Рәсәйҙең һәм донъяның алдынғы ғалимдары етәкселек итә. Грант механизмын дөрөҫ ҡороу арҡаһында Башҡортостан 2025 йылда йәш ғалимдарға ярҙам саралары буйынса федераль рейтингта беренсе урын алды.

**➔ Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 2025 йылдың яҙында "Өҫтөнлөк - 2030" программаһы сиктәрендә республика вуздарының үҫеш проекттарын яҡлауҙа үҙе ҡатнашты. Төбәктең идара итеү командаһының фән үҫеше менән яҡындан ҡыҙыҡһыныуын нисек баһалайһығыҙ?**

- Республика Башлығы яғынан университеттарҙың даими ярҙам алыуын күрәбеҙ. Төбәктә ҡеүәтле тикшеренеү инфраструктураһы булдырылған һәм ул үҫеш юлында. Юғары уҡыу йорттарының стратегик лидерлыҡ программаһында ҡатнашыуы федераль аҡса йәлеп итергә, матди-техник базаны яңыртырға, яңы ҡорамалдар һатып алырға булышлыҡ итә. Төбәк Башлығының проекттарҙы яҡлауҙа шәхсән ҡатнашыуы йәш тикшеренеүселәргә ышаныс бирә. Һөҙөмтә булараҡ, Башҡортостандың 4 юғары уҡыу йорто дөйөм финанслау күләме 1 миллиард һумдан ашыу булған проект буйынса еңеп сыҡты. Был уларға фәнни инфраструктураны нығытырға, заманса ҡорамалдар һатып алырға, перспективалы тикшеренеүҙәргә булышлыҡ итеп, һөҙөмтә-ләрен иҡтисадтың төрлө тармаҡтарында ҡулланырға мөмкинлек бирәсәк.

**➔ Евразия ғилми-белем биреү үҙәге (НОЦ) вуз-ара кампусының беренсе сираты асылыуға бер йылдан ашыу ваҡыт үтте. Ул фәнни тикшеренеүҙәрҙең сифатына һәм мөмкинлектәренә нисек йоғонто яһаны? Кампус төҙөлөп бөткәс, ниндәй һөҙөмтәләр көтөлә?**

- Вуз-ара кампустың беренсе сиратын сафҡа индереү республиканың фән мөхите өсөн яңы асыштар нөктәһе булды. Кампус - республикала даими нигеҙҙә университеттар, тикшеренеү үҙәктәре, бизнес һәм стартап-берләшмәләр үҙ-ара тығыҙ эш иткән тәүге майҙансыҡ. Ул асылғанға тиклем төбәктең юғары уҡыу йорттары ресурстар, кадрҙар һәм проекттар өсөн бер-береһе менән дәғүәләште. Хәҙер инде улар федераль һәм халыҡ-ара кимәлдәге конкуренция өсөн берләште.

Төбәктең фәнни ландшафты нисек үҙгәргәне яҡшы күренә: Өфө Рәсәй һәм бөтә донъя өсөн технологиялар эшләү үҙәктәренең береһенә әүерелде. 18 ғилми лабораторияһы булған кампус 5 университетты берләштерҙе, шулай уҡ унда "Киләсәк моторҙары" алдынғы инженерлыҡ мәктәбе, Евразия фәнни-белем биреү үҙәге, "Берлога" киберфизик инновациялар оҫтаханаһы һәм "Ҡайнау нөктәһе" технологиялар һәм командалар үҫеше өсөн майҙансыҡ эшләй.

Шуны ла билдәләп үтергә кәрәк: фән Башҡортостан иҡтисадына торған һайын әүҙемерәк йоғонто яһай. Яңы асыштар, ғәмәли фәнни табыштар ишәйә, компаниялар һәм сит ил партнерҙары менән хеҙмәттәшлек үҫешә. Кампус төҙөлөп бөткәс, был процестар йылдамыраҡ дауам итәсәк.

Һуңғы 4 йылда Башҡортостанда фәнде үҫтереүгә 900 миллион һум аҡса йүнәлтелгән. Республикала, генетиканан һәм биомедицинанан алып, һалма зиһен һәм яңы етештереү технологияларына тиклем фәндең төрлө йүнәлештәре үҫешә. Финанслауҙы артабан арттырыу планлаштырыла. Был турала Башҡортостан Башлығы йәш ғалимдарға мөрәжәғәтендә шулай тип белдерҙе: "Һеҙ республика сиктәрендә фән менән шөғөлләнһен өсөн бөгөн инструменттарҙың киң палитраһы булдырылған. Өҫтәп әйтәм, киләсәктә бындай ярҙам күләмен арттырасаҡбыҙ. Бөгөн үк белем алыу миграцияһы сальдоһының ыңғай булыуын күрәбеҙ. Йәштәр Башҡортостанға уҡырға килергә, бында карьера башларға теләй. Был хуплауға лайыҡ. Беҙ һеҙгә - йәш ғалимдарға - ҙур ихтирам һәм өмөт менән бағабыҙ. Һеҙ киләсәктә республикабыҙҙы һәм тотош илде алға алып китәсәкһегеҙ, тип ышанабыҙ".

**Роман ЯКИМЧУК.**

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Бөтә Рәсәй йәш ғалимдар советы съезы 2009 йылдан алып үткәрелә. 2017 йылдан сара илдең баш ҡалаһында ғына түгел, Рәсәй субъекттарында ла уҙғарыла башланы. 2023 йылдан фәнни йыйында студенттарҙың ғилми берләшмәләре вәкилдәре лә ҡатнаша. Быға тиклемге съездар Түбәнге Новгородта һәм Владивостокта үткәйне. Быйыл эстафетаны Башҡортостандың баш ҡалаһы ҡабул итте. Съезды ойоштороусылар булып Рәсәй Федерацияһы Президенты ҡарамағындағы Фән һәм мәғариф буйынса советтың фән һәм мәғариф өлкәләрендә йәштәр эштәре буйынса координация советы сығыш яһай. Сара Рәсәй Федерацияһының Фән һәм юғары белем биреү министрлығы һәм Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ярҙамында үткәрелә.**

**Өфөләге съездың эше бер нисә майҙансыҡта ойошторолдо. Йәш ғалимдар "Фән һәм дәүләт", "Фән, дәүләт һәм берләшмәләр", "Фән һәм карьера" секцияларында фекер алышты. Уларҙа фән өлкәһендәге дәүләт яҡлауы саралары, йәштәрҙе, айырыуса һәләтле студенттарҙы ғилем донъяһына йәлеп итеү үҙенсәлектәре, фән менән йәмғиәт араһындағы бәйләнештәрҙе нығытыу һәм башҡа мәсьәләләр ҡаралды. Мәҫәлән, һөйләшеү темаларының береһе "Йәш ғалимға ғилми башланғыстарын тормошҡа ашырыу өсөн, дәүләттән тыш, тағы кемдәр ярҙам итә ала?" тип аталды. Сара барышында төрлө проект эштәре менән танышыу, оҫталыҡ дәрестәре ҡарау мөмкинлеге лә булды. Традицияға ярашлы, Рәсәй Фәнни фонды мәктәбе үҙ эшен ойошторҙо, ул тәүге тапҡыр тикшеренеүселәргә ярҙам итеү механизмдарын камиллаштырыу буйынса стратегик сессия үткәрҙе. Шулай уҡ Йәш ғалимдар советы һәм Студент фәнни берләшмәләре проекттары араһында уҙғарылған конкурстарға йомғаҡ яһалды.**

**Йәғни, өс көн дауам иткән сара барышында 50-нән ашыу майҙансыҡ эшләп, съезда ҡатнашыусылар үҙҙәре өсөн ҡыҙыҡлы, файҙалы мәғлүмәттәргә эйә булды, тәжрибә, фекер уртаҡлашты, тип ышанырға була.**

***✓ С.И. Руденконың мәғлүмәттәренә ҡарағанда, Әй-Йүрүҙән бассейны башҡорттарына тән, сәс, күҙҙәр пигментацияһының интенсив, уртасанан тәпәшерәк буйлы, түңәрәк башлы булыу хас.***

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# САЛАУАТ БАТЫРЫБЫҘҘЫҢ...

## ысын йөҙ-ҡиәфәте нисек булған?



Тәүге тапҡыр был төбәк башҡорттары танылған рус ғалимы, этнограф һәм антрополог С.И. Руденко тарафынан 1907, 1912-1913 йылдарҙа, уларҙың физик йәки антропологик тибын һүрәтләү яғынан, ентекле тикшерелә. Тикшереү барышында буй, бит, баш ҙурлығы, тән, сәс, күҙҙәр төҫөнөң төп параметрҙары билдәләнә. Ярҙамсылары Б.Г. Крыжановский һәм С.М. Петров менән бергә С.И. Руденко 1847 аҫаба башҡортто тикшергән, шуларҙың 1512-һенең йөҙ һыҙаттарын С.И. Руденко үҙе шәхсән үлсәгән. Төньяҡ-көнсығыш башҡорттары араһынан 249 ир кеше тикшерелә. Иң ҡыҙығы шунда: Салауаттың тыуған яғы Шайтан-Көҙәй улысының Иҙрис һәм Йонос ауылдарында 22 кеше үлсәнә. Ә уның тыуған ауылы Тәкәй, билдәле булыуынса, бөтөнләй юҡ ителә. Шайтан-Көҙәй һәм күрше Урман-Көҙәй улыстарында бөтәһе 64 ир кеше тикшерелә. Һөҙөмтәлә, Шайтан-Көҙәй улысында өйрәнелгән башҡорттарҙың йөҙ үлсәмдәренән сығып, Салауат Юлаевтың яҡынса тышҡы ҡиәфәтен ижад иткәндәр ҙә инде. XIX быуаттың танылған башҡорт мәғрифәтсеһе Мифтахетдин Аҡмулланың график һәм скульптура портретын төҙөгәндә лә ошо ысул ҡулланылған.

С.И. Руденконың профессиональ һәм бик юғары кимәлдә төшөргән фотографиялары ла Салауат Юлаевтың образын яҡынса күҙ алдына килтерергә булышлыҡ иткән. Башҡорттарҙың физик тибына арналған тәүге монографияһында С.И. Руденко төрлө ырыу башҡорттарының 200 фотографияһынан 34-ен баҫтыра. Фотографияларҙың күбеһе, хәҙерге Салауат районы халҡын да индереп, төньяҡ-көнсығыш башҡорттарының антропологик тибын сағылдыра. Фотографиялар буйынса фекер йөрөткәндә, төньяҡ-көнсығыш башҡорттары өс антропологик типҡа ҡарай: туран (Көньяҡ Себер), Каспий аръяғы һәм урындағы Урал типтары. Был райондарҙа иң таралғаны, моғайын, туран тибылыр, ул ҡаҙаҡтар, ҡарағалпаҡтар, Алтай-Саян таулығы халыҡтары араһында йыш осрай.

С.И. Руденконың мәғлүмәттәренә ҡарағанда, Әй-Йүрүҙән бассейны башҡорттарына тән, сәс, күҙҙәр пигментацияһының интенсив, уртасанан тәпәшерәк буйлы, түңәрәк башлы булыу хас. Был төбәк башҡорттары башлыса ялпаҡ битле, оҙонса йөҙлө, киң танаулы, өҫкө ҡабаҡтары һалыныбыраҡ торған ҙур күҙле. Тәндәре артыҡ йөнтәҫ түгел. Уртаса буйлыларҙың мыҡты кәүҙәле, сағыштырмаса ҡыҫҡа аяҡлы булыуҙары бигерәк тә күҙгә ташлана. Бөтә был билдәләр буйынса әйләләр менән көҙәйҙәр үҙ-ара оҡшаш. Был С.И. Руденкоға уларҙы антропологик яҡтан бер дөйөм районға индерергә ярҙам иткән.

1963-1965, 1967 йылдарҙа башҡорттарҙың антропологик тибын өйрәнеү менән М.В. Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университетының Антропология институты хеҙмәткәре М.С. Акимова шөғөлләнгән. Ул, төньяҡ-көнсығыш башҡорттарын да индереп, дүрт этнографик төркөмдән 1250 башҡорт ир-егетен тикшергән. Әйләләр, табындар һәм ҡатайҙарҙы ул Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында түгел, ә Силәбе өлкәһе территорияһында өйрәнгән. М.С. Акимова башҡорттар араһында дүрт антропологик типты айырып күрһәткән: урал, асыҡ төҫтәге европеоид, туран, понтий типтары. Иң таралғаны урал һәм туран антропологик типтары. Туран тибы бөтә башҡорттар араһында ла бар, шулай ҙа йышыраҡ төньяҡ-көнсығыш төркөмөндә осрай. Әйтергә кәрәк, уның фекеренсә, башҡорттар араһындағы туран тибы ҡаҙаҡтарҙағынан күҙгә бәрелеп торған европеоид ҡушылмаһы менән айырылып тора, уның сығанаҡтары беҙҙең эра сигендәге көньяҡ сығышлы ҡуңыр пигментациялы (понтий) савромат, сарматтар тибының боронғо ҡатламдарына барып тоташа.

Шулай итеп, М.С. Акимованың тикшеренеүҙәре, дөйөм алғанда, С.И. Руденконың башҡорттарҙың антропологик составының ҡатмарлы булыуы тураһындағы һығымталарын раҫлай.

1977-1989 йылдарҙа беҙ үткәргән краниологик тикшеренеүҙәр ҙә 14 краниологик өҙөмтәнән төньяҡ-көнсығыш (айырым алғанда, Ахундан) башҡорттарының баш һөйәктәре серияһына европеоид һыҙаттары хас булыуын күрһәтте. Был билдәләр буйынса улар Алтай-Саян таулығы халыҡтарына һәм ҡаҙаҡтарға, ҡарағалпаҡтарға яҡынлаша.

Быға өҫтәп шуны әйтергә мөмкин: этнография, визуаль антропология мәғлүмәттәре башҡорттар составында сығанаҡтары беҙҙең эраның I-II мең йыллығы сигенә барып тоташҡан оғуз компоненты барлығы хаҡында ышаныслы итеп әйтергә мөмкинлек бирә, ул саҡта башҡорттар менән хәҙерге төркмәндәрҙең, ҡарағалпаҡтарҙың ата-бабалары булған оғуздар үҙ-ара тығыҙ бәйләнештә йәшәгән.

Башҡорттарҙың ырыу-ҡәбиләләре составында, билдәле булыуынса, "төркмән" ырыу төркөмдәре осраштырғылай. Һарт-әйләләр араһында, мәҫәлән, Р. Кузеев "тәкәй" ырыуы төркөмөн асыҡлаған. Етмәһә, төркмәндәрҙең "тәкә" ҡәбиләһе менән башҡорттарҙың "тәкәй" ырыуы тамғалары тура килә, улар араһындағы оҡшашлыҡтар фольклор материалдарында ла осрай. Мәҫәлән, "Ҡуңыр буға" риүәйәтендә башҡорт ҡыҙы менән Каспий диңгеҙе ярҙарынан килгән оғуз егете араһындағы мөхәббәт һәм никах тураһында бәйән ителә. Бындай бәйләнештәр хаҡында антропологик мәғлүмәттәр ҙә һөйләй. Төркмәндәр араһында киң таралған Каспий аръяғы раса тибы йыш ҡына көньяҡ-көнсығыш һәм Урал аръяғы башҡорттары араһында ла осрай. Шулай уҡ улар төньяҡ-көнсығыш башҡорттары составында ла бар.

Салауат Юлаевтың Тәкәй ауылында тыуып үҫеүен, күрше Урман-Көҙәй улысында ла Тәкәй һәм Төркмән исемле ауылдар булыуын иҫәпкә алһаҡ, төньяҡ-көнсығыш башҡорттары араһында туран ғына түгел, ә һомғол европеоид Каспий аръяғы расаһы тибындағы (понтий тибы варианты) вәкилдәр ҙә булыуы һис тә ғәжәп түгел. Ихтимал, был раса тибындағыларҙы, шулай уҡ ҡасандыр оғуз-төркмәндәр менән никахҡа инеп туғанлашҡан башҡорттарҙы халыҡ, уларҙың төркмәндәрҙең "тәкә" ҡәбиләһе вәкилдәре менән ҡәрҙәшлектәрен һыҙыҡ өҫтөнә алып, "иштәктәр" тип атағандыр. Салауат Юлаевтың тыуған ауылының исеме - Шайтан-Көҙәй улысындағы Тәкәй, шулай уҡ 1907, 1912-1913 йылдарҙа Урман-Көҙәй улысында булған Тәкәй һәм Төркмән ауылдары ла ошо фекергә этәрә.

Үрҙә әйтелгәндәрҙе иҫәпкә алып, Салауат Юлаев тышҡы ҡиәфәте менән туран йәки понтий антропологик тибындағы йәки уларҙың ҡушылған вариантын кәүҙәләндереүсе булыуы ихтимал, тип күҙалларға мөмкин. Авторҙарҙың (И.Г. Фрих-Хар, Т.П. Нечаева, С.Д. Тавасиев) художество фантазияһына ҡарамаҫтан, Салауат Юлаевтың хәҙерге скульптура һындары антропологик реалийҙарға тап килә һәм башҡорт халҡының төньяҡ-көнсығыш этнографик төркөмө араһында киң таралған бер туран раса тибының төрлө варианттарын кәүҙәләндерә. Һәр хәлдә, киләсәк тикшеренеүҙәрҙә, скульптура һәм рәссам әҫәрҙәрендә төньяҡ-көнсығыш башҡорттары араһында таралған боронғо Каспий аръяғы расаһы (понтий) тибын күҙ алдында тоторға кәрәк булыр".

**Тарихсы-антрополог Ринат ЙОСОПОВ яҙмаларынан.**

**(Аҙағы. Башы 25-се һанда.)**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



# БАШҠОРТТАР

## Һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

Башҡорттар ҡышын эҙ буйлап килеп, ҡиммәтле тиреле йәнлектәргә һәм мышыларға ҡоралдан атҡан, шулай уҡ махсус һунарҙар ҙа булған. Шулар араһынан иң ҡыҙыҡлыһы - айыуҙың өңө алдында таҙғаҡ ҡороу. П.С. Палластың һүҙҙәренсә, башҡорттар "төнгөлөккә айыуҙарҙы ағас ботаҡтарында йәки улар көтөүгә һөжүм иткән көтөүлектәр, үләкһә тирәһендә ҡарауыллай". Ысынлап та, Көньяҡ Урал тауҙарында таҙғаҡтарҙы айыу йыҡҡан малдарҙың үләкһәһе тирәһендә ҡорғандар. Бының өсөн бер нисә һайғау ҡырҡып, уларҙы икешәрләп йәки өсәрләп ауыш итеп емтек эргәһендәге ике ағасҡа бәйләп нығыҡтандар **(һүрәт)**.



Ошо һайғауҙар буйлап таҙғаҡҡа менгәндәр ҙә инде. Ике ағас араһындағы ағас баҫҡыстарға ике йыуан жирҙә һалынған. Ике жирҙәгә арҡыры һайғауҙар түшәлгән һәм һунарсы шулар өҫтөндә ултырған. Айыуға төнөн, ул емтекте тамаҡлай башлағас, атҡандар. Әгәр ул үлмәй, яраланып, таҙғаҡҡа үрмәләй башлаған осраҡҡа тип һәр һунарсы үҙе менән балта йөрөткән. Тирәяҡтағы үләнде тапап, һиҙгер айыуҙы емтек эргәһенә килеүҙән өркөтмәҫ өсөн, ҡағиҙә булараҡ, һунарсылар һунар урынына аттарҙа килгән.

Башҡорттарҙың айыуға һунар иткәндәге икенсе киң таралған ысулы - уның өңөнә һунар итеү. Улар ҡышҡы йоҡоға китер алдынан айыуҙы күҙәткән йәки өҫтөндәге ағастарға ҡунған бәҫ буйынса уның өңөнә осраҡлы ғына юлыҡҡан. Һунар эттәре башҡорттарҙа бик һирәк булған, шунлыҡтан, улар айыуҙы осло һайғау менән төрткөләп уятҡандар һәм йыртҡыс өңөнән сыҡҡан ваҡытта уға айыу һөңгөһө менән сәнскәндәр йәки атҡандар. Айыу һөңгөһөн башҡорттар үҙҙәре эшләгән: уларҙың башағының оҙонлоғо 50 сантиметрға еткән, уны һапҡа ултыртыу өсөн сөй ҡаға торған тишеге лә булған. Айыу һөңгөһөнөң башағы тал япрағы формаһында эшләнгән.

Ҡайһы бер һунар төрөндә башҡорттар һыбай йөрөгән. Бигерәк тә йәнлектәрҙе ҡырпаҡ ҡарҙан баҫтырыу киң таралған. Һыбай баҫтырыу нигеҙҙә Урал аръяғы яландарында, көньяҡта һәм көньяҡ-көнбайышта күҙәтелгән. И.И. Лепехин әйтеүенсә, һунарға башҡорттар хатта ҡаҙаҡ далаларына ла сыҡҡан. Эттәр булмағанда, һыбайлап нигеҙҙә бүреләргә һунар иткәндәр, эттәр булғанда инде - ҡуяндарҙы һәм төлкөләрҙе аулағандар. Беренсе ҡырпаҡ ҡар төшөү менән улар яланға артель менән сығып, эҙҙәр буйынса ҡайҙа ниндәй йәнлек йәшенгәнен асыҡлаған. Эҙләп табып йәки осраҡлы ғына осратып, йәнлекте артабан эҙәрлекләгәндәр. Хәлдән тайған бүрене тере килеш ҡулға төшөргәндәр йәиһә ҡамсы менән моронона һуғып үлтергәндәр.

**(Дауамы бар).**

***✓ Германияның Фрайе университеты профессоры Маргарет ханымдың: "Башҡорт теле шул тиклем моңло, шул тиклем матур тел!" - тип һоҡланғаны әле булһа ҡолаҡта яңғырай.***



**Был юлы филология фәндәре докторы, Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө федераль тикшеренеүҙәр үҙәге Почет билдәһе орденлы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының баш ғилми хеҙмәткәре, тел ғилеме бүлеге мөдире Гөлназ Нурфәиз ҡыҙы ЙӘҒӘФӘРОВА менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**

# ТУҒАН ТЕЛЕБЕҘҘЕҢ

## асыҡланып

**Гөлназ Нурфәиз ҡыҙы! Һөнәрҙе дөрөҫ һайлау - яҙмышыңды билдәләүгә тиң... Икеләнеүҙәр, шикләнеүҙәр булманымы, тип һорарға иткәйнем дә... Ғаиләгеҙҙәгеләрҙең юлын дауам итеү икеләнеүгә урын ҡалдырмағандыр, шулай бит?**

- Эйе, белем биреү традициялары көслө булған Стәрлебаш урта мәктәбен тамамлағас, һис тә икеләнеп тормайынса, Башҡорт дәүләт педагогия институтының әле яңы асылып торған башҡорт филологияһы факультетының башҡорт-төрөк бүлегенә уҡырға индем. Бәләкәйҙән китап уҡыу, китап аша яңы күренештәр, фекерҙәр менән танышыу һәр ваҡыт ҡыҙыҡһындырҙы мине. Ғөмүмән, ғаиләбеҙҙә китап культы йәшәне, белем алыуға иғтибар ҙур булды. Атайым Нурфәиз Муса улы Баһауетдинов - республикала билдәле шәхес, физик, педагогия фәндәре кандидаты, оҙаҡ йылдар Стәрлебаш районының мәғариф бүлеген етәкләне. Әсәйем Миңлехәнә Ишмөхәмәт ҡыҙы Баһауетдинова - республикала танылған уҡытыусы-ғалимә, филология фәндәре кандидаты, Башҡортостандың халыҡ уҡытыусыһы. Улар икеһе лә ғүмер буйы мәғариф өлкәһендә ең һыҙғанып эшләнеләр. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, атайым баҡыйлыҡҡа күсте. Әсәйем, хаҡлы ялда булыуына ҡарамаҫтан, йәмәғәт эштәре менән була, райондың "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһын етәкләй, төрлө сараларҙа ҡатнашып, бай тәжрибәһе менән уртаҡлаша.

Халыҡ аңындағы тел серҙәренә төшөнөргә өләсәйем дә булышлыҡ итте, тип иҫәпләйем. Ял көндәрендә уның янында ҡалып, беҙ, балалар, күп нәмәгә өйрәнгәнбеҙ. Ул беҙгә әкиәттәр һөйләр ине, йәшәү ҡағиҙәләрен матур ғына, сабыр ғына төшөндөрә торғайны. Әкиәт һөйләп йоҡлатыр ине. Уның балалары бөтәһе лә тип әйтерлек уҡытыусылар, йыр-моңға ғашиҡ Нурислам абзыйымдың, Маһинур, Кәримә, Әнисә апайымдарҙың барлыҡ балалары ла уҡытыусы булып, уҡытыусылар династияһын дауам итә, әлеге көндә күбеһе республикабыҙҙың төрлө мәктәптәрендә уҡыусыларға белем бирә. Шундай белемгә ғашиҡ ғаиләлә тәрбиәләнеү, әлбиттә, баштан уҡ яуаплылыҡ тойғоһон бирһә, икенсе яҡтан, донъяға ҡарашты, төрлө яҡлап ҡыҙыҡһыныуҙы формалаштырғандыр. Художестволы әҫәрҙәр даирәһе, телдәрҙең үҙенсәлектәре, туған телебеҙҙең нескәлектәре һәр ваҡыт асыҡланып бөтмәҫ мөғжизә булып тойолдо. Шуға күрә лә, мәктәпте тамамлағас, бер ҙә икеләнмәй филология факультетына юл тоттом. Айырыуса, яңы асылған факультетҡа башҡорт теленән республика олимпиадаһында еңеүсе булараҡ имтиханһыҙ ҡабул ителдем.

**Яңы ғына ойошторолған факультетта уҡыу өмөттәреңде аҡланымы, белемгә һыуһаған танһығыңды ҡандырҙымы?**

- Эйе, был факультетта бик яҡшы белем алыу форсаты тейҙе беҙгә, тип уйлайым. Сөнки абруйлы, үҙ фәнен тәрән белгән һәм белемдәрен беҙгә тапшырған остаздарыбыҙҙан - Р.Х. Халикова, Э.Ф. Ишбирҙин, М.В. Зәйнуллин, Ф.Ғ. Хисамитдинова, Ә.М. Сөләймәнов, Ф.Т. Күзбәков, Ә.М. Аҙнабаев, Ю.В. Псәнчин, М.Х. Нәҙерғолов, Ә.Х. Дәүләтколов, Ә.Х. Вилданов, Р.Х. Ниғмәтуллин, Г.Х. Бохарова, Н.Ф. Суфиянова, Л.И. Нагаева, Ә.Ә. Әхмәткужа, Х.Ғ. Үтәшев кеүек маһир уҡытыусыларҙан белем алыу бәхете тәтене. Төрөк теле серҙәрен иһә иң тәүҙә Германияның Фрайе университеты профессоры Маргарет ханым Эрсен-Раш өйрәтә башланы, артабан Төркиәнән килгән уҡытыусылар дауам итте. Маргарет ханымдың: "Башҡорт теле шул тиклем моңло, шул тиклем матур тел!" - тип һоҡланғаны әле булһа ҡолаҡта яңғырай. Төрлө яҡлап бирелгән белем, ҡыҙыҡлы әңгәмәләр, мәғәнәле саралар күңелде үҫтереп, рухи яҡтан байытһа, ғилми етәксем Рәйсә Хәлил ҡыҙы Халикова етәкселегендә фәндә тәүләп эшләнгән аҙымдар, конференцияларҙа сығыш яһау үҙеңде һынап ҡарарға, үҙ көсөңә ышанырға мөмкинлек бирҙе. Белем, аҡыл, кешелекле мөнәсәбәт, һәр беребеҙ кисергән индивидуаль асыштар өсөн рәхмәтлемен хөрмәтле остаздарыбыҙға!

**Хеҙмәт юлығыҙ нисегерәк башланып китте?**

- Институтты тамамлағандан һуң "Башҡорт-төрөк эшлекле хеҙмәттәшлек фонды"нда референт-тәржемәсе булып эшләй башланым. Әҙ генә эшләһәм дә, синхрон тәржемә буйынса яҡшы тәжрибә алдым, тип иҫәпләйем. Артабан Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең (хәҙер Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө федераль тикшеренеүҙәр үҙәге) Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында аспирантурала эҙләнеүсе булараҡ теркәлеп, фән донъяһына инеп киттем. Академик З.Ғ. Ураҡсин етәкселегендә "Башҡорт теленең традицион хәрби лексикаһы" темаһын һайлап, 2001 йылда кандидатлыҡ диссертациямды яҡланым. 2011 йылға тиклем Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһында (бөгөн - Өфө фән һәм технологиялар университетының Стәрлетамаҡ филиалы) ассистент, өлкән уҡытыусы, доцент булып эшләнем, башҡорт теле, уның тарихы һәм бөгөнгөһө менән бәйле дисциплиналарҙы уҡытып, студенттар менән аралашып, ғилми эштәр яҙҙырып, уҡытыусы булараҡ тәжрибә тупланым. Ул йылдарҙа кафедра мөдире проф. Д.С. Тикеевтан, өлкән быуын коллегаларым Ғ.Ғ. Ҡаһарманов, Л.Л. Сәмиғуллина, Х.Ғ. Йосопов, И.Ғ. Вәлитовтарҙан, хеҙмәттәштәрем Р.Х. Илешева, Л.М. Хөсәйенова һ.б. теоретик һәм методик яҡтан күп нәмәгә өйрәндем, тип әйтә алам, рәхмәтлемен уларҙың иғтибарына, ихтирамына. Етәкселек башҡорт теле кафедраһы мөдире урынбаҫары, артабан белем биреү сифаты менән идара итеү бүлеге етәксеһе вазифаларын ышанып тапшырғас, документтар менән ентекләп эшләүҙе үҙләштерҙем, тип әйтә алам. Бөгөнгө көндә лә вуз менән бәйләнештәребеҙ өҙөлмәне, емешле хеҙмәттәшлек дауам итә.

Шул алған тәжрибәләр бөтәһе лә, әлбиттә, артабанғы эштә бик тә файҙалы булды. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының тел ғилеме бүлегенә 2011 йылда эшкә килгәс, ҙур проект өҫтөндә эшләй башланыҡ: 2011-2018 йылдарҙа филология фәндәре докторы, профессор Ф.Ғ. Хисамитдинова мөхәррирлегендә дүрт телле (башҡорт - урыҫ - инглиз - төрөк) тәржемәүи-аңлатмалы "Башҡорт теленең академик һүҙлеге"н төҙөүҙә ҡатнаштыҡ. Был 10 томлы баҫманың һәр бер томында бер өлөштөң авторы булараҡ та, һәр томдың редакторы ла, һүҙҙәрҙең төрөксәгә тәржемәһен әҙерләүсе булараҡ та сығыш яһарға насип булды. Телебеҙҙең матурлығы, тәрәнлеге, һәр һүҙҙең мәғәнәлеге хайран ҡалдырҙы ошо хеҙмәтте әҙерләгәндә. Бит бер һүҙ ҙә осраҡлы түгел, һәр береһенең үҙ урыны, үҙ мәғәнә төҫмөрө, үҙ функцияһы бар. Уларҙы барлап, өйрәнеп, теркәп, һүҙлексе-ғалимдарыбыҙ телдәргә һәйкәл ҡуя, һүҙҙәр донъяһы аша халыҡтың фекерләү ҡеүәһен, донъяны танып белеү баҫҡыстарын, кешелектең үҙ-үҙен күҙаллау һәм баһалау юлдарын асыҡлай. Бындай эҙләнеүҙәр юлы - ҡыуанреслы ла, ҡыҙыҡлы ла, кешене үҫтергән, рухи яҡтан байытҡан, асылында, халыҡтыҡын халыҡҡа ҡайтарған юл.

Һүҙлек өҫтөндә эшләгән осорҙа материалдарҙы шул юҫыҡта туплап, тикшереп, ҡасандыр Зиннур Ғәзиз улы Ураҡсин: "Һин булдыраһың, ошо номинация принциптары темаһын артабан эшләрһең!" - тип күрһәткән теманы докторлыҡ диссертацияһы итеп үҫтереп, Фирҙәүес Ғилмитдин ҡыҙы



***Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының тел ғилеме бүлегенә 2011 йылда эшкә килгәс, ҙур проект өҫтөндә эшләй башланыҡ: 2011-2018 йылдарҙа филология фәндәре докторы, профессор Ф.Ғ. Хисамитдинова мөхәррирлегендә дүрт телле (башҡорт - урыҫ - инглиз - төрөк) тәржемәүи-аңлатмалы "Башҡорт теленең академик һүҙлеге"н төҙөүҙә ҡатнаштыҡ. Был 10 томлы баҫманың һәр бер томында бер өлөштөң авторы булараҡ та, һәр томдың редакторы ла, һүҙҙәрҙең төрөксәгә тәржемәһен әҙерләүсе булараҡ та сығыш яһарға насип булды. Телебеҙҙең матурлығы, тәрәнлеге, һәр һүҙҙең мәғәнәлеге хайран ҡалдырҙы ошо хеҙмәтте әҙерләгәндә. Бит бер һүҙ ҙә осраҡлы түгел, һәр береһенең үҙ урыны, үҙ мәғәнә төҫмөрө, үҙ функцияһы бар. Уларҙы барлап, өйрәнеп, теркәп, һүҙлексе-ғалимдарыбыҙ телдәргә һәйкәл ҡуя, һүҙҙәр донъяһы аша халыҡтың фекерләү ҡеүәһен, донъяны танып белеү баҫҡыстарын, кешелектең үҙ-үҙен күҙаллау һәм баһалау юлдарын асыҡлай.***

*Ошо телдәр араһынан бигерәк тә ҡытай теле логик яҡтан аныҡ, теүәл булыуы менән айырылып тора. Балаларҙың логик фекерләүен үҫтерәм тиһәгеҙ, ҡытай телен өйрәтегеҙ, тип кәңәш итер инем.*



Хисамитдинова ҡеүәтләүендә тамамлап, яҡлап ҡуйылды. Шул рәүешле башҡорт телендә исемләү принциптарына бәйле тикшеренеү барлыҡҡа килде. Асыҡланыуынса, һүҙҙәрҙе билдәле бер системаға һалып өйрәнеп, уларҙың барлыҡҡа килеү юлдары нәмәләргә хас өндәрҙе сағылдырыу, функционаллек, билдә, мөнәсәбәт төшөнсәләренә бәйле булыуын һәм телдәге барлыҡ тип әйтерлек һүҙҙәрҙе ошо принциптарҙан сығып аңлатып була. "Башҡорт телендә номинация принциптары" (2018) тигән китап ошо турала.

**Сит телдәр менән дә ҡыҙыҡһыныу ҡайҙан инешләнә?**

- Һәр нәмәнең нигеҙе бала саҡта булған кеүек, телдәргә мөнәсәбәт тә бала саҡта һалына, тип уйлайым. Миндә лә шулай булғандыр. Өләсәйем атайым-апайымдар менән беҙ, балалар, аңла-

нәшриәтендә З.Й. Рәхмәтулина һәм Г.Р. Хөсәйенова мөхәррирлегендә баҫылып сыҡты. Тәржемә иткәндә теге йәки был мәғәнәне бирергә тырышҡанда бик күп лексик варианттарҙы барлайһың, был осраҡта текст, контекст үҙе үк һүҙ һайлауҙа юл күрһәтә, һүҙгә һүҙ үрелеп китә.

**Һеҙ теоретик монографияларҙан тыш уҡытыу-методик әсбаптар авторы булараҡ та танылдығыҙ. Заманында уҡытыусыларҙың өҫтәл китабына әйләнгән "Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән традицион булмаған дәрестәр" (2003), "Башҡорт телен һәм әҙәбиәтен заманса уҡытыу" (2009), "Интеллектуаль уйындар" (2011), "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә яңы технологиялар ҡулланыу" (2008), "Уҡыусыларҙың фәнни-тикшеренеү эшен ойоштороу" (2012), "Рухи байрамдар" (2023) кеүек методик ҡуллан-**

таль хеҙмәттәр яҙылған. Был тикшеренеүҙәрҙең барыһы ла башҡорт теленең бай тарихлы, үҫешкән булыуын, яҡшы өйрәнелгәнлеген күрһәтә. Беҙ был хеҙмәттәргә нигеҙләнәбеҙ, уларҙа ятҡан идеяларҙы үҫтерергә тырышабыҙ. Әлеге көндә иһә тел бүлегендә алып барылған эҙләнеүҙәр башҡорт теленең хәҙерге торошон асыҡлауға йүнәлтелә, донъя лингвистикаһындағы яңы тенденцияларҙы иҫәпкә алып дауам итә, телебеҙҙең үҫеш перспективаларын барлай.

Яңы фекер, яңы ҡараш йыш ҡына ғилми дискуссия барышында барлыҡҡа килә. Был эштең әһәмиәтен күҙ уңында тотоп, тел ғилеме бүлеге һуңғы йылдарҙа "Хәҙерге заманда гуманитар фәндәр: Ураҡсин уҡыуҙары" исемле халыҡ-ара ғилми-ғәмәли конференция ойоштороп ебәрҙе, быйыл ул ноябрь айында 2-се тапҡыр үткәреләсәк. Бынан тыш, былтырҙан башлап Ин-

# НЕСКӘЛЕКТӘРЕ...

## бөтмәҫ мөғжизә

маһын өсөн "ф" өнөн ҡушып, "йәшерен телдә" һөйләшә торғайны. Мәҫәлән, "мин хәҙер ҡайтам" тигәнде "ми-фин хә-фә-ҙе-фер ҡа-фай-тафам" тип әйтәләр. Әлбиттә, серле өндәр донъяһын асырға тырышаһың. Киләсәктә был ынтылыш башҡа телдәрҙең өндәр донъяһына иғтибарҙы йүнәлткәндер. Мәктәптә француз теле менән инглиз телен өйрәнеп, институтта 2-се белгеслек булған төрөк теленән тыш, ғәрәп телен дә уҡыныҡ. Һуңғы йылдарҙа ҡытай телен ҡыҙыҡһынып өйрәнергә тотондом. Һәр телдең тукымаһына халыҡтың яҙмышы, булмышы, фекерләүе, донъяға ҡарашы үрелгән. Һәр береһенең ҡабатланмаҫ аһәңе, мәғәнәләре, төҙөлөшө барлыҡҡа килгән. Ошо үҙенсәлекле өндәр, грамматик формалар, лексик берәмектәр, синтаксик ҡоролоштар сәсмәүеренән хасил булған матурлыҡ ғаләмен өйрәнеү һәр ваҡыт үтә мауыҡтырғыс. Ошо телдәр араһынан бигерәк тә ҡытай теле логик яҡтан аныҡ, теүәл булыуы менән айырылып тора. Балаларҙың логик фекерләүен үҫтерәм тиһәгеҙ, ҡытай телен өйрәтегеҙ, тип кәңәш итер инем.

Хәҙерге тел ғилемендә этнолингвистика, лингвокультурология тармаҡтарының әүҙем үҫеше лә нәҡ телдәрҙең туҡымаһында һаҡланған йәшерен мәғәнәләрҙе асыҡлауға ҡайтып ҡала, сөнки тел ғилемендә инде факттарҙы фиксациялау етерлек кимәлдә эшләнгән (тамам, тип әйтә алмайбыҙ, әлбиттә, сөнки был - туҡтауһыҙ процесс, тел, бер яҡтан, көн дә байый, икенсе яҡтан, көн һайын тиерлек ниндәйҙер берәмектәрен юғалта бара). Тимәк, хәҙерге тел ғилемендә тикшеренеүселәр алдында торған төп һорау - ниңә? Ниңә был һүҙ нәҡ шул мәғәнәлә йөрөй башлаған? Ниңә был һөйләмде нәҡ ошолай ҡулланабыҙ? Ғөмүмән, телдә һүҙҙәр шундай итеп үрелеп килә, сынйырҙың бер башынан тартһаң, артабан йомғаҡ кеүек, һүтелә лә һүтелә.

Быны бигерәк тә тәржемә эшендә аныҡ күҙ алдына килтереп була. Мәҫәлән, миңә бер нисә ҙур ғына тәржемә проектында ҡатнашырға тура килде. Һуңғыларынан - яҡут халҡының "Нюргун батыр" тип исемләнгән олонхо-эпосын башҡорт теленә тәржемә иттек. Был китап 2023 йылда "Китап"

**малар нәшерләнегеҙ. Бының өсөн бит бай практик тәжрибә лә кәрәк...**

- Был методик ҡулланмалар абруйлы уҡытыусы, ҙур тәжрибәле методист Миңлехәнә Ишмөхәмәт ҡыҙы Баһауетдинова менән берлектә яҙылған. Бөгөнгәсә 16 уҡытыу-методик әсбап баҫтырылды, барыһы ла уҡытыусылар тарафынан йылы ҡабул ителде, ҡулланылыу тапты, заманына күрә яңылыҡ рәүешендә булғандыр - күп кенә ыңғай баһаламалар алдыҡ улар буйынса. Тимәк, беҙҙең эшебеҙ кәрәк, тип табылған. Иншалла, артабан да дауам итергә яҙһын. Замана менән бергә атлау һәр уҡытыусынан уҡытыусы булыуҙан бигерәк үҙе лә тырыш уҡыусы булыуын, яңы сараларҙы, алымдарҙы үҙләштереүен талап итә. Башҡорт теленең уҡытыу методикаһына ҡағылышлы бындай әсбаптар бик аҙ, тип әйтергә кәрәк. Был тәңгәлдә уйланаһы урын бар әле.

Лингводидактикаға килгәндә, уның предметы тотороҡло ҡала килә: телде өйрәтеүҙә ҡулланылған уңышлы алымдарҙы табыу, һөҙөмтәле биремдәр системаһын төҙөү, дөйөм алғанда, былар бөтәһе лә бер маҡсатҡа йүнәлтелә: грамоталы шәхес тәрбиәләү. Грамоталылыҡ иһә әҙәби телдең нормаларынан башлана. Ошо әҙәби тел нормаларын һаҡларға булышлыҡ итеү өсөн институтыбыҙҙың тел ғилеме бүлеге хеҙмәткәрҙәре 2023 йылда Республика Башлығы Гранты ярҙамында "Белемле.ру" тип исемләнгән башҡорт орфографияһы буйынса белешмә платформаһын булдырҙы (belemle.ru). Унда тупланған материалдар башҡортса дөрөҫ яҙырға булышлыҡ итә.

**Бөгөн филология фәндәре докторы Гөлназ Нурфәиз ҡыҙы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының тел ғилеме бүлеге мөдире вазифаһын башҡара. Алдағы көндә ниндәй уй-ниәттәр менән йәшәй бүлек?**

- Институтыбыҙҙың тел ғилеме бүлеге - иҫ киткес бай тарихлы, фундаменталь хеҙмәттәр ижад иткән олуғ телсе-ғалимдарыбыҙ эшләгән бүлек. Бер быуатлыҡ эшмәкәрлек эсендә Институтыбыҙ хәҙерге башҡорт әҙәби теле нормаларын булдырыу һәм камиллаштырыу буйынса ғилми үҙәккә әүерелгән. Башҡорт теленең тарихи үҫеше, лексикология, орфография, грамматика өлкәһендә төплө фундамен-

ститутыбыҙҙың директоры, заман менән бергә атлауҙы, хатта алдараҡ барыуҙы хуплаған етәксебеҙ профессор Зөһрә Йыһанур ҡыҙы Рәхмәтуллина мөхәррирлегендә "РФА ӨФТҮ хәбәрсеһе: Тарих. Филология. Культура серияһы" журналы донъя күрә башланы. Уның биттәре лә яңылыҡ өсөн, ғилми дискуссияларға асыҡ..."

Киләсәкте уйлағанда, фәнгә йәштәрҙең аҙ килеүе һағайта. Фәнгә белемле-ғилемле йәштәрҙе йәлеп итеү эше вузда уҡыу дәүерендә әүҙем генә алып барылһа (быны, мәҫәлән, һуңғы йылдарҙа М. Аҡмулла ис. Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт филологияһы факультетында төрөк теле буйынса дәрестәр биргәндә бик асыҡ күрәм), артабан эш урынын һайлағанда, фән юлынан китеүселәр матди яҡтан тейешенсә тәьмин ителмәүе арҡаһында талантлы, ғилми эшкә барымы булған йәштәр, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, фәнгә килмәй. Һөҙөмтәлә быуындар араһындағы бәйләнештең өҙөлөп ҡалыуы күҙәтелә, фәндә остаз - уҡыусы бәйләнеше бик мөһим. РФА Өфө федераль тикшеренеүҙәр үҙәгендә аспирантура эшләп килеүгә ҡарамаҫтан, һуңғы йылдарҙа гуманитар фәндәр буйынса килеүселәр аҙыраҡ.

**Үҙегеҙҙең ғаиләгеҙ хаҡында ла әйтеп китһәгеҙ ине...**

- Ғаиләмә килгәндә, тормош иптәшем Ринат Ғәлимйән улы Йәғәфәров - оҙаҡ йылдар мәғариф өлкәһендә эшләне, үҙе лә фән кешеһе, башҡорт фольклоры буйынса диссертация яҡланы, филология фәндәре кандидаты... Эшкә бәйле бер-беребеҙҙе яҡшы аңлағанға бер-беребеҙгә ныҡлы таянысбыҙ, шуның менән бәхетлебеҙ. Балаларыбыҙ - илһам сығанағы, Аллаға шөкөр, үҙ юлдарын табып баралар. Киләсәктә донъяларыбыҙ имен, күңелдәребеҙ көр булып, эшләгән эштәребеҙҙән ҡәнәғәтлек кисереп, һаулыҡта йәшәргә яҙһын.

**Ихлас яуаптарығыҙ өсөн рәхмәт! Гәзит уҡыусылары исеменән һеҙгә фән өлкәһендә яңы ижади үрҙәр, ғаиләлә именлек, йән тыныслығы, тән сәләмәтлеге теләйбеҙ!**

**Әңгәмәне Фәнил КҮЗБӘКОВ ойошторҙо.**

---

УҢЫШ ҠАҘАН

## ЯҠШЫҒА ҮҘГӘРЕҮ...

### ыңғай ынтылыштарҙан тора

**Тормоштоң ыңғай яҡтарына ғына иғтибар туплаһағыҙ һәм камиллыҡҡа ынтылһағыҙ, тиҙҙән яҡшы яҡҡа үҙгәреүегеҙҙе һәм ыңғай сифаттарығыҙ барлыҡҡа килеүен тойорһоғоҙ.**

Тап ошондай ынтылыштар - ысын ғилем сығанағы һәм улар һеҙҙе яңы бейеклектәргә күтәрәсәк. Шуға күрә боронғо аҡылды онотоорға ярамай: тейешле белемегеҙ булғанда, был тормошта теләгән маҡсатығыҙға өлгәшә алырһығыҙ. Белем теләһә ниндәй маҡсатҡа өлгәшеү һәм әҙерлек ҡоралы, ул, аңлап һәм дөрөҫ ҡулланғанда, тормоштоң төрлө хәл-торошонда, төрлө ваҡытта тыуған һорауҙарға яуап бирә.

Әгәр һеҙ өс йылда мультимиллионер булырға теләйһегеҙ, ти, әммә үҙегеҙ нимәлер эшләй башламай тороп, Аллаһы Тәғәләгә күпме генә ялбарһағыҙ ҙа, бер ниндәй ҙә һөҙөмтә булмаясаҡ. Әммә үҙ алдығыҙға маҡсат ҡуйып (мәҫәлән, йылына миллион һум аҡса тупларға), план эшләп (мәҫәлән, яңы дефицит продукт уйлап табырға) һәм ошо продукт буйынса барлыҡ мәғлүмәтте, баҙарҙы, эшҡыуарлыҡта уңышҡа өлгәшкән башҡа кешеләр ҡулланған ошондай уҡ белемде эҙләй башлаһағыҙ, еңеүгә ынтылыш һәм башҡа стимулдар маҡсатығыҙға өлгәшергә ярҙам итер.

Йәғни, ниндәйҙер маҡсатығыҙға өлгәшергә теләһәгеҙ - быға юл япябай: ошо өлкәләге барлыҡ мәғлүмәттәрҙе, белемде өйрәнегеҙ, һуңынан инде уны аҡыл менән ҡулланығыҙ. Үҙенең маҡсатына өлгәшкән берәйһен табып, унан ниндәй китаптар уҡыуы, башына ниндәй уйҙар килеүе, ниндәй кешеләр менән аралашыуы, иртәнән кискә тиклем ваҡытын нисек планлаштырыуы тураһында белешегеҙ.

Ҡулығыҙҙа уңыштың нигеҙ ташы бар: кемдер уңышҡа өлгәшкән икән, тимәк, был һеҙҙең дә хәлегеҙҙән килә. Бары тик улар эшләгәнде ҡабатларға өйрәнергә һәм шундай уҡ һөҙөмәләргә ынтылырға ғына кәрәк. Был ысул "уңыштың сағылышы" тигән атама аҫтында билдәле. Йәғни һеҙ ошо өлкәлә уңышҡа өлгәшкән кешенең көҙгөләге сағылышы булырға тейешһегеҙ. Үҙегеҙгә уның физиологияһын (уның кеүек атлап йөрөргә, уның кеүек һөйләргә, уның кеүек ашарға), психологияһын (уның кеүек уйларға, уның кеүек ҡарар ҡабул итергә), ниндәй китап уҡығанын асыҡлап, шундай уҡ китап уҡыуҙы, диетаһын, философияһын һәм стратегияһын өйрәнеүҙе маҡсат итеп алырға тейешһегеҙ.

Башығыҙҙан, белемем етеңкерәмәй, интеллектым үҫешмәгән, бай, бәхетле түгелмен, тигән уйҙарҙы алып ташлағыҙ. Хәҙер үк, ошо минуттан уҡ, артабанғы яҙмышығыҙға ҡарата ҡәтғи ҡарар ҡабул итегеҙ. Аңығыҙҙы һәм тәнегеҙҙе күнектерергә, аҡылығыҙ сиктәрен киңәйтергә, күңелегеҙ төбөндә бысҡып ятҡан ҡөҙҙы дөрләтергә, үҙегеҙ ысынлап лайыҡ булған уңышты ҡабул итергә әҙерләнегеҙ.

**Робин ШАРМА.**

***✓ Мәрйәм әбей тауҙар теҙмәһенән күҙен алманы. Тау араһынан нимәлер килеп сығыр, уның һағышлы уйҙарынан арындырыр кеүек ине. Ул мөғжизә көттө. Тик тауҙар ҡымшанманы. Бала саҡ кисерештәренән айырылырға кәрәк ине.***




* * *

Ҡаршы алыусыларҙың береһе әбейҙе ҡосаҡлап алды.

- Мин Мырҙағол ҡустың булам!

Икеһенең дә күҙе йәшкәҙәне.

- Шәп тораһыңмы, ғүмерҙә лә күрмәгән ҡустым! - тигән булды Марианна.

- Күрмәгән генә түгел, хатта барлығын да белмәгән ҡустың бит, - тип төҙәтте улы Ринард.

- Мәрйәм апай, беҙҙе машина көтә.

"Мәрйәм, Мәрйәм..." тип ҡабатланы Марианна һәм, үҙе лә һиҙмәҫтән, баш сайҡаны. Нисектер, сәйер ишетелһә лә, тыуған ере, туғандары менән бәйләгән исем бит ул. Ренард улына ла ҡыҙыҡтыр, ул да йылмайып ҡуйҙы. Башҡортостанға, Өфө аэропортына килеп төшкәс, Марианна әбей тынысланған һымаҡ ине. Ләкин уларҙы ҡаршы алған машина урман яҡтарына юл тотҡас, күгелйем тауҙар теҙмәһе күренгәс, тулҡынланыуы көсәйҙе. Йөрәге дарҫлап тибергә тотондо.

- Өләсәйемдең өйө бармы, туғаным?

- Юҡ, Мәрйәм апай, ул иҫке йорт күптән һүтеп алынған. Урынында яңы йорт күтәргәндәр. Икенсе кешеләр йәшәй.

- Мырҙағол, туғанҡайым! - Марианна ҡустыһының арҡаһынан һыпырҙы. - Нишләп мине эҙләргә булып киттең? Беҙҙе бит бер нәмә лә бәйләмәй! Мин үҙем дә туғандарым барлығына һаман ышанып бөтә алмайым. Өйрәнә алмайым, тийәйемме...

- Эҙләй башлағанда эштең ыңғай булырына ышанмай инем... Нисектер ярҙам итеүселәр табылды. Шулай китте лә китте. Әсәйем: "Шул балам ҡайҙа икән?" - тип һыҙлана торғайны. Шул баланы эҙләнем инде...

- Бала, тиһең... - Марианна йылмайған ыңғайға күҙҙәрен селт-селт йомоп алды. - Әбей, тип, күҙ алдына ла килтермәгәнһеңдер ҙә.

- Күҙ алдына килтермәһәм дә, нисә йәштә икәненде самалай инем, Мәрйәм апай.

- Эйе-е-е, беҙҙең йәш айырмаһы шаҡтай. Кем ине һинең атайың, Мырҙағол? Ҡасаныраҡ вафат булды? Әсәйемдән иртәрәкме?

- Бик иртә китте атайым. Ул һуғыштан сулаҡ булып, ауыр яралар менән ҡайта. Йәше лә арыу ғына булған. Ҡарт һалдат.

- Ҡарт һалдат? Тимәк, уны фронҡа үҙ ғаиләһе оҙатҡан булған.

Мырҙағол уйланып ултырҙы. Шунан баш ҡаҡты.

- Апай, уның ғаиләһе ҙур булған. Биш балаһы...

- Бишәү...

Марианна әбейҙең башы әйләнеп китте хатта. "Нисек әсәйем биш балалы иргә кейәүгә сыҡты икән?"

- Тик, - тип һүҙен дауам итте Мырҙағол, - улар барыһы ла ҡырыла. Аслыҡ йылында ағыулы башаҡ ашап, ҡатыны ла, балалары ла үлә. Атай бахыр бына шулай ҡороған нигеҙгә ҡайтып төшә. Унан беҙҙең әсәйҙе лә төрмәнән сығаралар. Ике бәхетһеҙ йән ҡауыша. Береһенең аяҡтар йөрөмәй, береһе һыңар ҡул.

- Әсәйем...

- Боҙло һыуҙа ағас ташып, һыуыҡ тейҙереп, бик ыҙаланы. Бер нисә йылдан йөрөй алмай башланы. Бына шулай беҙ күмәкләп ҡараныҡ әсәйҙе.

- Йә, Хоҙай! - тип әсенеп өндәште Марианна. - Ҡалай бәхетһеҙ йән эйәһе булған...

Ренард борсола төштө.

- Әсәй, тыныслан.

- Беҙ бик һәйбәт йәшәнек. Әсәйем ҡәҙерле булды, - тине Мырҙағол. - Килене дә асыҡ кеше. Әсәйемде хәтерләһәң, уға оҡшаған. Килен - ҡәйнә буҫағаһынан, тиҙәр бит.

- Һөйлә үҙеңдең ғаиләң тураһында.

Ҡунаҡтар килеп төшөүгә ҙур табын әҙерләнгән ине инде. Марианна үҙе менән күрешергә килгән ауылдаштарына алмаштилмәш диҡҡәт менән ҡараны. "Йөҙҙәре таныш та һымаҡ", тип уйланы. Үҙ уйынан үҙе көлдө. "Ҡайҙан улар - мине, мин уларҙы беләйем, ти, инде?.." Шунан күңелгә икенсерәк фекер ҡунды: "Ә йөҙ һыҙаттары ят түгел, сөнки улар минең ҡандаштарым бит... Тауыш моңо, интонацияһы, хәрәкәттәре - береһе лә ят түгел. Үҙемдеке. Шуны тоям". Ошоларҙы уйлағандан һуң, Марианнаға рәхәт булып китте. Ул улына ғорур ҡарап алды: "Бына әсәйеңдең тамырҙары, бына әсәйеңдең үткәне".

Тәүге көн ауылдаштар, туғантыумаса менән күрешеүҙәр, осрашыуҙар булараҡ үтеп тә китте. Иртәгәһен Мырҙағол менән улар әсәләренең ҡәберенә зыярат ҡылдылар. Ҡайтышлай Мәрйәм әбей тауҙар теҙмәһенән күҙен алманы. Тау араһынан нимәлер килеп сығыр, уның һағышлы уйҙарынан арындырыр кеүек ине. Ул мөғжизә көттө. Тик тауҙар ҡымшанманы. Бала саҡ кисерештәренән айырылырға кәрәк ине. Шуны аңлағандай, күк йөҙөн ҡапыл ғына болот ҡаплап алды. Баяғы сағыулыҡ тоноҡланды. Бала саҡ буяуҙары төҫһеҙләнде. Донъя күшекте...

- Апай, беҙҙең яҡҡа ҡайтҡың килмәйме?

- Мырҙағол ҡустым, мин йылы яҡты күптән үҙ иткәнмен. Унда буяҡтар сағыуыраҡ. Күк зәп-зәңгәр, Памирҙа тау баштарында ҡар ап-аҡ, күҙ сағыла. Унан сәскәләр. Бөтөн ерҙә сәскәләр. Быҙырайышып балҡыған сәскәләр. Мин сағыу төҫкә, ундағы сағыу нурға ғашиҡ. Күҙ ҡамаштырғыс төҫтәр!

Мырҙағол, бәлки, бүтәнерәк һүҙ көткәндер. Ул шымтайҙы. Бүтән һүҙ ҡатманы. Быны аңлаған Марианна һүҙҙе икенсе төрләрәк дауам итте.

- Әҙәм балаһының хистәре үҙгәреп тора. Тауҙар мәғрур. Улар ел-дауылды сабыр үткәрә. Тау итәгендә әҙәм ышыҡ эҙләй. Ул ышыҡты мин тыуған ерҙән ситтәрәк таптым...

- Урал тауҙары сабыр, - тине Мырҙағол, уның ҡарашы уйсанланды. - Һине бынан, апай, бик иртә алып киткәндәр шул. Күп нәмә иҫеңдән юйылған. Ләкин был тауҙар һине нисек итеп, ҡалайтып алып киткәндәрен күргәндер. Һинекен генә түгел... Нисәмә быуат башҡорт тормошона шаһиттар улар. Быуындар киләкитә, ә тауҙар меңәр йыл тора. Кешеләрҙән алда иң беренсе улар иртәнге ҡояшты сәләмләй, ә кисен иң аҙаҡҡы булып оҙата. Башҡортто ла шулай һаҡлағандар. Урыҫ һалдаттары баш күтәргән башҡорттарҙы яҙаларға, үлтерергә килһә, халыҡ тауҙар араһына ҡасҡан. Ағастарҙы ҡырҡып һирәгәйткәндәр, ә тауҙарҙы әлегә улайта алмайҙар... Тауҙарҙың тамырҙары тәрәнерәк.

- Тажикстанда тороп ҡалыуымдың тағы ла бер сәбәбе бар. Мин альпинист. Ғүмер буйы ирем менән тауҙар үрләнек. Бына шул булды беҙҙе берләштергән шөғөл.

- Шулай икән дә.... - Мырҙағол ысынлап тороп аптыраны. - Мәрйәм апай, мин һине ҡаяларға үрләргә саҡыра алмайым.

- Юҡ-юҡ, мин хәҙер ул йәштә түгелмен, үҙ самамды беләм, - тип көлгән булды Марианна ҡарсыҡ. - Ләкин тирә-яҡ менән танышҡым килә.

- Аңланым. Бөгөн үк ҡайһы бер урындарҙы күрәсәкһең, апай.

Бына шулай уларҙы ултыртып йөрөткән машина бормалы юл буйлап елдерҙе. Марианна, арбалғандай, тирә-яҡтан ҡарашын айырып ала алманы. Йөҙө яҡтырғандан яҡтыра ғына ине. Әсәһен күҙәтеп барған Ренард та ҡәнәғәт тамаҡ ҡырҙы. Тыуған яҡ һауаһы шифалыр, әсәһе йәшәреп киткәндәй. Ә бит был яҡтарҙан айырылғанда уға ни бары дүртбиш йәштәр тирәһе генә булған...

Борма-борма юлдар.

- Ниндәй матур тау! Үҙенә бер башҡа айырылып тора, - тине бер мәл Марианна ҡарсыҡ.

- Матурмы? - тип ҡабатлап һораны Мырҙағол.

- Матур! Матурҙың исеме лә матурҙыр.

- Исемеме? Ямантау булыр уның исеме.

Марианна апайҙың күҙҙәре түңәрәкләнде.

- Был атама һәр саҡ минең хәтеремдә. Гәрсә, яҡындан күргәнем булмаһа ла! Өләсәйем Ямантау тураһында һөйләй торғайны, - тине ул, ниһайәт.

- Әле лә уның тураһында төрлө һүҙ йөрөй. Беҙ бәләкәй саҡта өлкәндәр Ямантауҙа яман көстәр, дейеү-пәрейҙәр бар, улар тауға килгән мал-тыуарҙы ҡыра, тип һөйләй торғайнылар. Баласағаны ул яҡҡа барыуҙан ҡаты тыйҙылар, - Мырҙағол йылмайғандай итте.

- Ә өләсәмдең өс улы дейеүҙәр менән алышырға сығып китә. Ысынлап та, ныҡ ышанғандар дейеүҙәр барлығына. Батыр булғылары килгән. Әле ул саҡта мәктәпкә лә бармаған бәләкәс малайҙар! Өлкәндәр бер булып эҙләп, табып алып ҡайталар тегеләрҙе. Ата-әсәнән дә аҙаҡ эләккәндер инде.

- Әсәй, ниндәй дейеүҙәр менән? Нишләп улар тураһында бер ҙә һөйләгәнең булманы? - тине Ренард.

Марианна ҡарсыҡ көрһөндө.

- Бала саҡ хәтирәләрен мин мәңгелеккә күмгән һымаҡ инем. Хәйер, балалар йортонда үҫеп, бөтөн серҙе эскә йәшереп өйрәнгәнмен шул, улым. Ә мин телгә алған ағайҙарым Ямантау дейеүҙәре менән түгел, бөтөнләй икенсе яҡтан килгән дейеүҙәр менән алышып ҡорбан булдылар. Мин бары тик Ямантау тигән исемде онотманым. Ошо исемде гел ҡабатланым, доға һымаҡ.

- Ни өсөн, әсәй?

- Һорауыңа үҙең яуап бирерһең, тип уйлайым. Мин бер генә ваҡиғаны иҫкә төшөрәйем. Бер саҡ әсәйем менән ҡайҙандыр ҡырҙан ҡайтып киләбеҙ, киске эңергә ҡалғанбыҙ. Көтмәгәндә айҙың тау башында эленеп торғанын күрҙем. "Айҙы тау тотҡан бит, ебәрмәй, айҙы кем ҡотҡарыр?" - тием. "Юҡ, ҡыҙым, ай бит иң матур тауға белеп ҡунған, ай бөгөн тауҙың тажы!", - тине әсәйем. "Тау батшамы әллә?" - тип һораным. Быға тиклем бошонҡо килгән әсәм шундай рәхәтләнеп көлөп ебәрҙе: "Эйе, ә тау-батшаның исеме Ямантау! Ә уның туғандары күп", - тине. Тик ул тауҙарҙың нисек аталғанын онотҡанмын хәҙер...

- Ҡуштау, Йөрәктау, Торатау, Ҡырҡтытау... - Мырҙағол тауҙарҙы исемләп һанай башланы. - Ғәжәпләнмә, Мәрйәм апай, әсәйем миңә лә тауҙар туғанлығы тураһында һөйләй торғайны. Һәм Урал батыр, уның аҫыл һөйәктәре тураһында ла...

Беҙ аҙға шым ҡалдылар. Марианна иренен ҡымтып, бер аҙ тын ултырҙы.

- Был Ямантау тураһында әсәйем һөйләгән, мин белгән иң матур әкиәт... Тау башында алтын таж... Иртәгәһен беҙҙең өйгә тентеү менән килделәр. Әсәйемде алып киттеләр. Бер ус башаҡ урлаған, тинеләр. Бурҙарға хөкөм ҡаты ине...

Мырҙағол ауыр итеп уфтанды.

- Һөйләгәне булды.

- Урындыҡта өләсәм ауырып ята, ашарға бер нәмә лә юҡ. Шунан бер көндө мине күршеләргә алып инделәр. Ишек ярығынан ғына ҡарап торам. Ҡарттар килде. Нимәнелер күтәреп алып сығалар. Оҙон ғына, юрғанмы-сепрәкме шунда. "Нишләп өләсәм был нәмәләрҙе биреп сығарҙы икән? Беҙ хәҙер нимә ябынырбыҙ?" тип уйлайым. Баҡтиһәң, был ҡарттар - мәрхүм булған өләсәмде шулай төрөп зыяратҡа алып киткәндәр икән...

Бәләкәс Мәрйәм күрше апайҙар ҡулына тороп ҡалды. Был апайҙың үҙенең генә лә биш-алты ыбыр-сыбыр балаһы, үҙҙәренә лә йүнле ашарға юҡ. Мәрйәм көндәр буйы ас ултыра торғайны. Әсе ҡара икмәк ауыҙға эләкһә, оло бәхет. Эйе, мысай ононан бешерелгән икмәк күптәрҙе ҡотҡарҙы заманында. Балалар йортонда тәү тапҡыр арыш икмәге ҡапҡас, Мәрйәм шатлығынан нишләргә белмәне. Ул сикһеҙ бәхетле ине. Балалар йортона эләгеүен бәхет тип ҡабул итте. Башта исемен икенсерәк итеп әйтеүҙәре сәйер тойолһа ла, ҡолаҡ тиҙ өйрәнде. Оло тәрбиәсе апайҙар дөрөҫ әйтәләр, исемем шулай булырға тейештер, тип уйланы. Мәрйәләр ыңғайына үҙе лә уларса һупалай башланы. Бер йылдан кемдәрҙер уның хәлен белешергә килде. Аҡ яулыҡ бәйләгән апай нимәлер һөйләй, һораша, ә ул ауыҙын асҡан килеш ултыра бирҙе. Туған телен онотҡайны инде ҡыҙыҡай. Силәбе балалар йортонда үҫте. СССР тигән ил ҙур ине, ул тыуған яҡтарҙан һаман алыҫҡараҡ китте. Тау артында тағы ла тау барлығын Марианна һуңғараҡ яҡшы аңланы.

- Был яҡтың тауҙарына мөкиббән киттең. Мин уныһын яҡшы күреп торам, - тине шаяртыу ҡатыш улы Ренард.

- Урал тауҙары мине хыялланырға өйрәтте бит... Әсәйем көнө-төнө эштә булғас, ауырыу өләсәйем менән икәү генә ҡала инек. Ул әкиәттәр һөйләй торғайны. Шунан мин һорайым: "Тауҙар артында нимә бар? Һин һөйләгән әкиәт донъяһы шундамы? Әкиәттәр шунда йәшәйме? Унда ҡасан барабыҙ?" "Мин Урал тауҙары аша сыҡҡаным юҡ. Һин ҙурайғас, үҙең барып белерһең..."- ти торғайны мәрхүмкәй.

- Әсәй, ауыр булһа, һөйләмә.

- Хәтирәләр кисергәндәремдән ауыр түгел. Юғиһә, ошоғаса мин уларҙы йөкләп йөрөтә алмаҫ инем, балаҡайым.

* * *

Ауыл зыяратында булып ҡайтҡандан һуң, сәйер бер тынысланыу кисерҙе Марианна әбей. Әсәһе, өләсәһе рухына үҙе белгән доғаһын уҡыны. "Мин оҙон ғүмерле булдым, ҡәҙерлеләрем. Һеҙҙең был донъяла йәшәгән йәшегеҙҙе күптән уҙып киткәнмен икән дә баһа. Эйе, йәш хисабынан ҡараған саҡта, был донъялағы тәжрибәм ҙурыраҡтыр ҙа, ләкин үҙемде һеҙҙең сабыйығыҙ итеп тоям. Шул тойғоно кисереү миңә рәхәтлек бирә. Миңә ҡусты бүләк иткәнең өсөн рәхмәт һиңә, әсәй. Туғанлыҡ хисе уянды миндә. Күпме ғүмер шуны белмәй йәшәлгән! Кеше

***✓ Диоген көпә-көндөҙ фонарь яндырып, урамға сыҡҡан. "Ни эшләүең был, йүләр, кеше яҡты көндә фонарь яндырып йөрөймө ни?" - тиҙәр уға. Философ үтә етди итеп яуап ҡайтара: "Халыҡ күп, әммә кешеләр юҡ. Кеше эҙләп йөрөйөм".***

был тойғонан тыш - бик меҫкен. Гүйә, донъяның буяҙарын күреүҙән мәхрүм һуҡыр шикелле. Мин бөгөн иҫ китмәле баймын!"

Ҡарт әсәләге үҙгәреште тойған улы шулай тип ҡуйҙы.

- Тыуған яғындың һауаһы, ысынлап та, килеште! Күҙҙәрең осҡонланып китте, әсәй.

- Ошо тыныс кистә минең күҙҙәге осҡондо күрә алғас, шәп, улым! - тине ҡарт әсә ҡәнәғәт тауыш менән. - Үҙемдең тамырлы, ватанлы икәнемде тойоу рухымды терелтте. Тормошомдоң үҙем белмәгән йәки күрергә теләмәгән яҡтары асылды. Был асыш ҡәнәғәтлек бирә. Улыҡайым, атайыңдың тыуған яҡтарын табырға ине. Ҡалай рухы шатланасаҡ! Бына шундай уйға килдем әле мин бөгөн.

- Хәлдән килгәнде эшләрбеҙ, - тине Ренард.

- Беҙҙе мәктәп йылдарында, илдә бер генә халыҡ - совет берлеге буласаҡ, тип тылҡып үҫтерҙеләр. Тәрбиәселәребеҙ, уҡытыусыларыбыҙ даими шулай тип торғас, беҙ балаларға нимә ҡала? Бер һүҙһеҙ шулай булырына ышандыҡ. Хатта шул көндөң тиҙерәк етерен теләнек. Ә бөгөн мин Башҡортостанға ҡайтып, тыуған-тыумасамды күреп-танышып, әсәйемдең ҡәберенә зыярат ҡылып, ҡандашарымдың миңә нисек өндәшкәнен ишетеп, үҙемде иң бәхетле кеше итеп тоям. Исемемдең матурлығын белеп китәм!

- Эйе, һинең исем матур, әсәй.

- Ҡарасәле, шулай тип әйтеүең генә булды, ана, болот араһынан ялт итеп ай килеп тә сыҡты!

- Тажикстандағы айыбыҙҙан айырыламы ул? Нисек һинең ҡарамаҡҡа?

Улы шаян йылмайып яуап көтә. Ниндәй яуап ишеткеһе килә икән?

- Улым, мин бер төш күрҙем.

- Төш?

- Эйе, уны элек тә күргәнем бар ине. Ә бөгөн тағы ла асығыраҡ итеп күрҙем. Мин бәләкәй генә бала, имеш. Ямантауға ҡарап торам. Тау башына ай килеп ҡунды. Шунан тау башында бер һын хасил булды. Мин уның өләсәйем икәнен хәҙер яҡшы беләм.

"Өләсәй, һин нисек Ямантауға мендең? Унда менергә ярамай бит? Яманлығы тейер, үлтерер!" "Яман түгел ул, Мәрйәмем. Минең бер балама ла яманлығы теймәне. Уландарымды бүтәндәр үлтерҙе. Ямантауҙың әҙәм балалары өсөн һыҙланыуы яман. Был айҙы тотоп торорлоҡ хәлем бар. Ул аҙашҡандарҙың юлын яҡтыртыр". "Матур тауым - Ямантауым! Ысҡындырма, тотоп торсо түңәрәк айҙы, ярҙам ит өләсәмә. Мин менеп еткәнсе, ысҡындыра күрмә! Беҙҙең өләсәм менән көткән кешеләребеҙ бик күп!" Мин ашығып-ашығып тауға үрләйем. Яҡтылыҡҡа ынтылам. Өләсәйем үҙе айға әйләнә. Ул тауҙың затлы тажы. Ул бейектән мең-мең нур һибә. Донъя яҡтыра... Беҙҙең халыҡ ошо тауҙар менән береккән. Быуын-быуын улар бергә. Үткәнебеҙҙә беҙ ҡалдырып киткән кешеләр яҡтылыҡ булып ҡала. Тышҡы яҡтылыҡтан тыш, эске яҡтылыҡ кәрәк. Берәүгә лә әйтмәһәм дә, зарланмаһам да, шул нурҙы һағынып йәшәнем. Мин яуап бирә алдыммы икән һиңә, улым?

Әсәһен тын да алмай тыңлаған Ренард яуап бирмәне. Дөрөҫөрәге, яуап урынына тамағына тыйылған төйөрҙө генә йотто.

Аҙна һиҙҙермәй генә үтте лә китте. Ләкин кисерештәр бер ғүмергә бәрәбәр ине. Мәрйәм әбей ата-бабалары төйәк иткән ерҙән үҙе оя ҡорған яҡҡа тулы күңел менән китәсәк. Һөйөү менән тулы күңел буш була алмай. Ул Мырҙағол ҡустыһын да тау менән сағыштырҙы. "Тауҙар һаҡсылар шикелле. Улар был саф тәбиғәтте, саф күңелле кешеләрҙе һаҡлап уратып баҫҡандар, - тип уйланы ҡатын. - Ауылым да, халҡым да йәшәр".

- Мырҙағол ҡустым, инде һинең сират. Ғаиләң менән ҡунаҡҡа көтәбеҙ. Көтәсәкбеҙ.

- Буяуҙарға бай, буяуҙары сағыу төйәгеңде күрһәтмәксеһеңме? - тип көлгән булды Мырҙағол.- Тырышырбыҙ, апай.

Ҡапыл томан төштө. Марианна ҡарашы менән томан аша күрә ине, ул туймаҫтай булып, тирә-йүнде байҡаны.

- Эй, балҡыу ҙа һуң был донъя!..

- Томан бит, әсәй.

- Күңел күҙенә томан оронсоҡ түгел, - тине әсә уйсан ғына.

Улының башына барып етте: "Әсәйем бит ошо томан эсенән күрә балҡыулыҡты. Ватан төҫөн..."

Тау ҡасмай. Тау сабыр. Тау уйсан. Тау аҡыллы. Тау тәрән тамырлы. Тау кеше ғүмеренә үлсәм. Кеше генә түгел, халыҡ ғүмеренең үлсәме.

Һәр кемдең менер үҙ үлсәме, үҙ бейеклеге булырға тейеш. Шул бейеклеккә менеп етмәйенсә, уның туҡталырға хаҡы юҡ. Памир тауҙарына Марианна гел шулай үрләй торғайны. Иң шәп альпинист булараҡ, күпме маҡтау ҡағыҙҙары, бүләктәр алды. Урал тауҙарына ул менмәне. Ғүмере буйы хәтерендә тотҡан Ямантауға яҡын килмәне! Ләкин бөгөн ул иң ҙур бейеклекте яулағанын аңланы. Был бейеклекте халыҡ ғүмере менән генә үлсәп булалыр.

* * *

Дүшәнбе аэропортына килеп төшкәс, нишләптер, ҙур көҙгө ҡаршыһында туҡтап ҡалды. Ҡапыл үтелгән юлдары иҫенә килеп төштө: "Тыуған яҡтарында үҙеңде бәхетле тойоп ҡанатланып йөрөнөң, ә хәҙер нисек булыр? Артабан ниндәй кисерештәр менән йәшәрһең?" Был һорауға Мәрйәм әбей яуап бирә алмай ине. "Ҡашыңды төймә, көҙгө, һин бит ни бары минең сағылыш ҡына..."

Көҙгө йылмайҙы. Бына шулай. Мәрйәмгә һинең эргәңдән күп тапҡырҙар үтергә яҙһын. Йылмайып оҙат һәм йылмайып ҡаршыла. Уны Уралтау яғына оҙат һәм бер саҡ ул әйләнеп ҡайтмаһа, турһайма, ҡарайма. Донъяла күп нәмә онталғанын, ярсыҡланғанын беләһеңдер. Ләкин үҙ ватанын тапҡандар онталмай, селпәрәмә килмәй. Һин Мәрйәмдең күңел бөтөнлөгөн тапҡанын аңлағанһыңдыр. Көҙгө күптәрҙе ҡаршы ала, оҙата. Һәм һәр береһенә үҙе булып яуап бирә. Һин йылмайһаң, ул мотлаҡ йылмайыу менән яуап бирәсәк. Мәрйәм, ер тетрәп, үҙең онталғанға ҡәҙәр йылмайыуҙан туҡтама! Һин - ватанлы!

**(Аҙағы.**
**Башы 25-се һанда).**

*ФӘЛСӘФӘҮИ ЭССЕ*

# ҠОЯШТЫ ҠАПЛАМАҒЫҘ!

Беҙҙең эраға тиклем III быуатта йәшәгән грек философы Диоген тураһында боронғо донъя тарихын мәктәптә аҙмы-күпме өйрәнгән һәр кем белә. Ул Ҡара диңгеҙ буйындағы Синоп ҡалаһында сауҙагәр ғаиләһендә тыуып үҫһә лә, үтә үҙенсәлекле шәхес булараҡ танылыу таба, шулай булмаһа, уның тормошо хаҡындағы мәғлүмәттәр беҙҙең замандарға тиклем риүәйәттәр, легендалар һәм бар донъяға таралған афоризмдар рәүешендә килеп тә етмәҫ ине. Шуныһы ҡыҙыҡ, Диоген фәлсәфәһенән XXI быуатта ла фәһем алырға була. Шуға күрә бынан 24 быуат әүәл боронғо Элладала булып уҙған ваҡиғаларҙы иҫкә алыу урынлы булыр, тимен.

Диогендың йәш сағында ялған аҡсалар һуғырға өйрәнеүе әлегә тиклем күптәрҙе аптырата: ул артыҡ бай булмаһа ла, етеш йәшәгән ғаиләлә тәрбиәләнә, затлы кейем, татлы ризыҡтан мәхрүм булмай. Ялған металл тәңкәләрҙең уға кәрәге булмаған бит инде. Бына шунан башлап уның исеме легендаларға инеп китә: йәнәһе, Диогенға Дельфтың Аполлон ҡорамы күрәҙәсеһе: "Ҡиммәттәрҙе яңынан һуҡ!" - тип бойорған. Бәлки, буласаҡ философ металл менән эш итеү алымдарын өйрәнергә теләгәндер - быныһы хәҙер ҡараңғы, әммә уны тыуған ҡалаһынан ҡыуып ебәрәләр. Афинаға килеп урынлашҡас, Диоген философ Антисфендың киниктар (аскеттар) мәктәбенә йөрөй, аскеттарса йәшәргә өйрәнә. Улар фанилыҡта кешегә бары тик 3 кенә нәмә кәрәк тип иҫәпләй: тәнде ҡаплау өсөн туҡыма киҫәге, хәйерсе тоҡсайы һәм юл таяғы.

Диоген фани донъя байлығынан ваз кисә, берәҙәккә әйләнеп, хәйерселәр кейемендә йөрөй, уны хатта ки "мискә эсендә йәшәүсе философ", тип атай башлайҙар. Быныһы хаҡында ла боронғо грек ләҡәбе һаҡланып ҡалған. Ул замандарҙа гректар аҙыҡ-түлекте күпләп һаҡлап була торған, кеше кәүҙәһенән дә күләмлерәк булып, пифос тип аталған үтә ҙур балсыҡ көршәктәр яһаған. Бер саҡ шуҡ малайҙар Диогендың иҫке буш көршәгеН таш менән бәреп ватҡас, күрше-күләндәре уға элеккеһенән дә ҙурырағын яһап биргән. Философ иһә: "Бына минең дә яңы өйөм бар хәҙер", - тип әйткән дә, пифосының эсенә инеп ятып, бөтмәҫ-төкәнмәҫ фекер йомғағын һүтеүен дауам иткән, ти. Уның янынан үтеп барыусы берәү, философты мәсхәрәгә ҡалдырырға теләп, уға әйтә икән: "Һин йәшәгән мискә ватыла ҡалһа, ни эшләрһең, ә?" Диоген, мискә эсенән башын сығара биреп, былай тип яуап ҡайтарған: "Ватылһа ватылыр инде, был мине борсомай, сөнки мин ятҡан урын бер ҡасан да ватылмаясаҡ!"

Диогендың көршәк-мискәһе менән бәйле тағы бер эпизод. Философ йәшәгән ҡалаға дошман һөжүм итә. Байҙар тегеләй-былай йүгерешә, мал-мөлкәтен ҡайҙа итергә белмәй хафалана. Шул саҡта Диоген әлеге мискәһен урамға алып сығып, йә былай, йә тегеләй тәгәрәтеп йөрөй икән. Унан һорайҙар: "Ни эшләйһең һин, Диоген, әллә аҡылыңдан яҙҙыңмы?". "Берҙән-бер мөлкәтем шул бит минең, шуны ҡайҙа йәшерергә икән, тип аҙапланам", - ти аҡыл эйәһе.

Диогенға сәйер ҡылыҡтары өсөн "аҡылдан яҙған философ" тигән ҡушамат тағалар. Шулай бер көн Диоген көпә-көндөҙ фонарь яндырып, урамға сыҡҡан. "Ни эшләүең был, йүләр, кеше яҡты көндә фонарь яндырып йөрөймө ни?" - тиҙәр уға. Философ үтә етди итеп яуап ҡайтара: "Халыҡ күп, әммә кешеләр юҡ. Кеше эҙләп йөрөйөм". Йәнә ул бына нимә тигән: "Мин аҡылдан яҙмағанмын, тик минең аҡылым башҡаларҙыҡына тура килмәй".

Шәхсән Диоген хаҡындағы риүәйәттәрҙең иң мәртәбәлеһе бына ошоһолор, тип иҫәпләйем. Антик донъяның йыһангир полководецы Искәндәр Зөлҡәрнәй (Александр Македонский) Коринф ҡалаһын ала. Ул бында даны тирә-яҡҡа таралған философ Диоген йәшәгәнен белә, уны үҙенең янына килеп баш



һалыр, тип өмөт итә. Тегеһе килмәй ҙә ҡуя. "Диоген ҡайҙа?" - тип һорай император ҡала кешеләренән. "Ул гимнасиум янында ҡояшта ҡыҙынып ята", - тип әйтәләр уға. Император һәм уның легионерҙары Диоген янына үҙҙәре бара. Ерҙә салҡан ятҡан философ ҡымшанмай ҙа. Македонский уның янына килеп, эйелә биреберәк һорай икән: "Һин философ Диогенмы?". "Эйе", - ти философ. Аптырабыраҡ ҡалған йыһангир Диогенға әйтә: "Эй, философ! Ниндәй үтенестәрең бар, барыһын да үтәйем". "Император ғали йәнәптәре, минең һеҙгә бер генә үтенесем бар - зинһар өсөн ҡояшты ҡапламағыҙ", - тигән ти ҡурҡыу белмәҫ аҡыл эйәһе. Был легенданың аҙағы лә бик фәһемле. Философ янынан ситкәрәк китә биргәс, Македонский үҙенең ярандарына: "Әгәр ҙә ки Александр булмаһам, Диоген булыр инем", - тип әйткән, имеш.

Эйе, Диогендың үҙ ҡояшы була, уның исеме - фекер нурламы. Ул азат, бойондороҡһоҙ, аҡыллы фекерҙәре менән кешеләр донъяһын нурландыра, ҡараңғы донъяны яҡтырта белә. Ысынлап та, әҙәми затты хайуанлыҡтан өҫкәрәк күтәргән, мәҙәниәтле, әхлаҡлы һәм белемле иткән берҙән-бер сифат - фекерләй алыу, танып-белеү аша хәҡиҡәткә өлгәшеү. Был - Хоҙайыбыҙҙың кешегә тапшырған иң оло бүләгелер. Диоген хаҡындағы мәғлүмәттәр менән танышҡанда бер сәйерерәк тойолған фекер башҡа килә: йәшәйешебеҙ ҡанундарына ярашлы, һәр дәүләттә етәкселәр, идара итеүселәр, юлбашсылар, министрҙар, президенттар һәм уларға буйһоноусылар була. Әлбиттә, дәүләт идараһыҙ булмай. Әммә бәләкәй генә бер ойошманың етәксеһенең дә, иң юғары вазифа биләгән әҙәми заттың да яңылышыуы, миллионлаған кешеләрҙең ғүмерен ҡыйыуға алып барған юлға сығарыуы мөмкин. Ошоға миҫалдар бихисап: Сыңғыҙ хан, Тамерлан, Наполеон, батша Николай II, Сталин, донъя халыҡтарының ҡәһәре төшкән Гитлер, Муссолини, Пол Пот һ.б. Ҡыҙғаныс, әлбиттә, заманында ошондай тирандарға уларҙың ҡул аҫтындағы халыҡтар "Ҡояшты ҡапламағыҙ!" тип әйтә алмаған. Ошондай яһил шәхестәрҙе ваҡытында туҡтата алмау кешелек хәтеренә мәңгелек киҫәтеү билдәһе булып уйылып ҡалһын ине.

Ә шәхси тормошобоҙҙа һәр кемдең үҙ ҡояшы булырға тейеш, ул күңел күктәребеҙҙе нурлай, рухи маҡсаттарға илтеүсе юлдарыбыҙҙы яҡтыртып тора. Ниндәй генә һөнәр эйәһе булһаң да - игенсеме, баҡсасымы, балта оҫтаһымы, уҡытыусымы, табипмы, шағирмы, музыкантмы, ғалиммы, йә иһә башҡа бер эш эйәһеме - ҡылған ғәмәлдәреңде, тормошоңдо ғәмлерәк, фәһемлерәк итеүсе изге ниәттәрең булыуы мөһим. Яман уйҙар, көнсөллөк, башҡаларға яуызлыҡ ҡылыу әҙәм балаһының эске ҡояшын һүндерә, уңың күңелен ҡараңғылыҡ биләй. "Үҙ ҡояшығыҙҙы үҙегеҙ ҡапламағыҙ!" - тип әйтер ине бынан 24 быуат әүәл йәшәгән Диоген. Ә үҙебеҙҙең ата-бабаларыбыҙ "Урал батыр" эпосы аша быуындан-быуынға тапшырыла килгән изге васыятын ҡалдырған, һәм ул бөгөн дә халҡыбыҙ күңеленең Рухи Ҡояшы итеп ҡабул ителә:

*"Яҡшылыҡ булһын атығыҙ,*
*Кеше булһын затығыҙ;*
*Яманға юл ҡуймағыҙ,*
*Яҡшынан баш тартмағыҙ!"*

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

✔ *Йәйгеһен бар үләндәр ҙә шәп итеп үҫеп, ҡуҙғалаҡҡа ҡояшты ҡаплай һала. Шуға күрә ҡырҙа ҡуҙғалаҡты йәй башында ғына яҡшылап күреп өлгөрәбеҙ. Әммә тамырын ҡаҙып алып ҡайтып ултыртһағыҙ, уңырһығыҙ.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ҺИМЕРЕҮ...

## насар хәбәрҙән дә була

■ Майами университеты (АҠШ) хеҙмәткәрҙәре раҫлауынса, насар хәбәрҙән кеше артыҡ ауырлыҡ йыя икән. Бәктиһәң, негатив мәғлүмәт ишеткәндән һуң, кеше үҙе лә һиҙмәҫтән борсолоу тойғолары кисерә. Шул рәүешле стресс ҡорбанына әүерелгән кеше юғары калориялы продукттарҙы күберәк ҡуллана башлай. Бындай төркөмгә ҡараусылар насар яңылыҡтарға иғтибар итмәүселәргә ҡарағанда көнөнә 40 процентҡа күберәк ашай икән. Тикшеренеүҙәр Америкала президент һайлауҙары тамамланған осорҙа үткәрелгән. Президент кампанияһы мәлендә иҡтисади хәлдәрҙең насарайыуы, сәйәси хаталар тураһында күберәк һөйләнелә. "Был мәғлүмәттәр кешеләрҙе күберәк калория ҡулланырға мәжбүр итә, сөнки уларҙа эволюцияның миллион йылдары эсендә барлыҡҡа килгән инстинкт уяна. Улар "мәлен файҙаланып, туйғансы ашап ҡал" тигән принципҡа эйәрә һәм калориялы аҙыҡты ауыр көндәр өсөн "запас"ҡа тинлӛй. Шуға ла кем артыҡ ауырлығынан ҡотолорға теләй, сәләмәт йәшәү рәүешe алып барығыҙ һәм насар яңылыҡтар тыңламағыҙ", - тип билдәләй профессор Джулиано Ларан.

■ Кеше һәр ваҡыт оҙаҡ йәшәргә, сәләмәт булырға хыялана. Аҙ хәрәкәтләнеү, эмоциональ көсөргәнеш кеше организмының әүҙемлеген түбәнәйтә һәм йөрәк һәм ҡан тамырҙары, яман шеш, ревматизм, матдәләр алышыныуы менән бәйле сирҙәр барлыҡҡа килә. Былар барыһы ла организмдың иртә ҡартайыуына килтерә. Күп ғалимдар кешенең сәләмәтлегенә физик күнекмәләрҙең файҙалы булыуын билдәләй. Физик әүҙемлек метаболизм процестарын көйләп кенә ҡалмай, йөрәк ауырыуҙарын да иҫкәртә. Бынан тыш, әүҙем тормош алып барған кешенең кәйефе лә күтәренке була, ул стрестарға ла бирешмәй. Ғалимдар бигерәк тә йәйәү йөрөргә кәңәш итә. Яйлап ҡына атлап йөрөһәң, йөрәк ауыртмай, тиҙәр улар. Йәйәү йөрөргә яраҡһан кеше артыҡ ауырлыҡ менән дә яфаланмаҫ, уның үҙәк нервы системаһы ла нығ булыр. Тәүҙә 350-500 метрҙы йәйәү үтеп ҡарағыҙ, аҙаҡтан иһә тиҙлекте лә, арауыҡты ла арттырырға мөмкин. Йәй көнө ысыҡ төшкән үләндә ялан аяҡ йөрөү файҙалы, ул организмды нығыта.

■ Төнөн электрон китаптар уҡырға, телевизор ҡарарға, компьютер артында ултырырға кәңәш ителмәй. Уларҙың барыһының да экраны күк (һалҡын) яҡтылыҡ бүлә, ә ул йоҡо гармоны - мелатониндың бүленеп сығыуын тотҡарлай. Ике аҙна буйына һау-сәләмәт кешеләр "йоҡо лабораторияһы"нда йәшәй. Биш көн буйына бер төркөм йоҡлар алдынан 4 сәғәт буйына ғәҙәти китап, икенсе төркөм уның электрон вариантын уҡыған. Ике көн ял иткәндән һуң, улар ролдәре менән алышынған. Электрон китап уҡыусылар икенсе төркөмдәгеләргә ҡарағанда 10 минутҡа һуңыраҡ йоҡлап киткән, мелатонин күләме кәрһәтеүенсә, уларҙың биологик сәғәте теүәл бер сәғәткә артҡа кускән. Уларға кисен йоҡлап китеүе һәм иртән тороуы ауырыраҡ булған. Электрон китап уҡығанда зыяны аҙыраҡ булһын өсөн фонды аҡтан ҡарға, ә шрифт төҫөн ҡаранан аҡҡа алыштырырға кәңәш итә.

ЙӘШЕЛ УТ

**Тау битләүендә йәки юл ситендәге уйһыу йәшеллектә, нәҙек һәм һирәк үлән араһында ҡуйы йәшел оҙонса япраҡ күренә. Юл япрағы, ғәҙәттә, ус аяһындай яҫы була, ә был япраҡ бер аҙ бәләкәй һәм тарыраҡ. Йәнә лә был япраҡта юл япрағы кеүек ҡалын юлаҡтар күренмәй. Ергә тоташҡан ҡыҫҡа һабағы ҡыҙғылт төҫтә. Йомшаҡ үлән булғас, тиҙ генә өҙөлөп сыға ерҙән дә. Осон ғына семтеп тәмләп ҡарағыҙ әле? Ауыҙға әскелтем һут йүгерә. Хатта тештәр ҡамашып киткәндәй була. Тел ҡурыша. Ниндәй япраҡ-үлән ул? Эйе, һин ҡуҙғалаҡ таптың! Башҡортостан ере шулай файҙалы үләндәргә лә бай шул! Бары тик уларҙы килештереп ашай бел генә. Ҡуҙғалаҡ тураһында һөйләшәйек әле.**

# ҠУҘҒАЛАҠ

### "Ҡуҙы ҡолаҡ" ниндәй үлән-япраҡ?

Ни өсөн "ҡуҙғалаҡ" тигәндәр икән? "Ҡуҙы" тип һарыҡ малын атағандар борон-борондан. "Ҡуҙы йылы" йәки "Ҡуҙыйкүрпәс" атамалары ла шул мәғәнәлә. Ә ҡуҙғалаҡтың япрағы һарыҡ малының ҡолағына оҡшаған. Бер аҙ оҙонса һәм төп яғы кескәй кәмә кеүек уйылып тора. Бына шуға ла инде "ҡуҙы+ҡолаҡ" тигәндәр. Әкренләп, "ы" өнө йотолоп, "ҡуҙғалаҡ" булып киткән.

Яҙ етеп, үләндәр һутҡа тулыша башлағас, ҡуҙғалаҡ та баш ҡалҡыта. Тик ул июнь башына ҡәҙәре бик ҙураймай, тамыр йәйып ултыра бирә. Әҫене ярата. Япрағы ҡояш нурҙарын күберәк йотҡас ҡына ҙурая. Бер тамырҙан биштән алып унға тиклем япраҡ сыға. Өҙөлгән япраҡ төбөнән тиҙ арала тағы ла кескәй япраҡтар күренә башлай. Тимәк, бер ҡуҙғалаҡлы урында йылына бер-нисә бол алырға мөмкин. Шәп бит, ә! Әҙер витамин баҡсаһы!

Тик шуныһы: йәйгеһен бар үләндәр ҙә шәп итеп үҫеп, ҡуҙғалаҡҡа ҡояшты ҡаплай һала. Шуға күрә ҡырҙа ҡуҙғалаҡты йәй башында ғына яҡшылап күреп өлгөрәбеҙ. Әммә бер-нисә тамырын ҡаҙып алып ҡайтып, баҡса рәшәткәһе буйына теҙеп ултыртһағыҙ, уңырһығыҙ. Йәй буйы был төмле япраҡты ашап ҡыуанырһығыҙ. Бер генә иҫкәрмә: ултыртҡан йәйҙә, ҡуҙғалаҡ япрағы матур күренһә лә, бер бөртөгән дә өҙмәгеҙ! Юғиһә, киләһе йыл ул тамыр ҡороясаҡ. Ни өсөнмө? Сөнки ҡуҙғалаҡтың бар көсө - тамырҙа! Ә ҡырҙан, урмандан, ҡаҙып алғанда уның тамыры имгәнә, ҡыҫҡара. Шул тамырҙар бер йәй буйы көс йыя, нығына, үҫеп, ергә берегә.



### Ә был япраҡтың ниндәй файҙаһы бар икән?

Биолог-ғалимдар, ботаниктарҙың әйткәнен йыйып яҙғанда, бына шуларҙы беләбеҙ. Ҡуҙғалаҡ, русса "щавель", кеше организмы өсөн файҙалы үлән. Борон-борондан башҡорттар ҙа уны яратып ашаған. Бигерәк тә ниндәй ағзалар өсөн файҙалы икән?

● ***Ашҡаҙан*** - эсәк эшмәкәрлегенә ыңғай тәҫир итә. Мәҫәлән, эсәктәр эшмәкәрлеге һүлпәнәйә, йәғни ундағы аш эшкәртеү ферменттары әҙәйә башлағанда, йәғни ваҡыт-ваҡыты менән нимә ашауға бәтәнләй бәйләнмәгән эс китеү осраҡтарында файҙа итә. Эс китеүҙе туктата, эсәк эшмәкәрлеген көйләй. Ҡуҙғалаҡ кислотаһының көслө тәьҫирен кәметеү өсөн был үләнде ашағас, аҙағынан ниндәй ҙә булһа май ҡабып ҡуйырға мөмкин.

Ашҡаҙан эшмәкәрлеген дә яҡшырта. Аш эшкәртеүҙе тиҙләтеү генә түгел, халыҡта хатта ашҡаҙандың сей шеше, йәғни ҡырҡыу ауыртыу булғанда ла ҡулланғандар борон башҡорттар. Моғайын, был ҡуҙғалаҡта булған PP витамины тәьҫирелер (был витамин яранан аҡҡан ҡанды тиҙерәк туктатыуҙы көйләй). Бигерәк тә ашҡаҙандың сей яраһы өсөн ҡуҙғалаҡты "сумах" тип аталған аш тәмләткес менән ҡушып ашау файҙалы.

● ***Бауыр һәм үт ҡыуығы*** эшмәкәрлеген яҡшыртыуға ла булышлыҡ итә ҡуҙғалаҡ. Алдан яҙғанса, аш эшкәртеү ферменттарын арттыра, тинек. Ҡуҙғалаҡта үт ҡыуығы бүлеп сығарған ферменттар ҙа бар. Борон башҡорттар ҡуҙғалаҡ менән хатта "һары ауырыуы"н (желтуха) да дауалағандар. Ҡуҙғалаҡта барыбыҙға ла билдәле С витамины күп. Ә был витамин - организмдан кәрәкмәгән матдәләрҙе ҡыуып сығарыу көсөнә эйә. Фәнни телдә әйткәндә, "антиоксидант". Шул сәбәптән, ҡуҙғалаҡ күңел болғанып, ҡоҫҡо килеп торғанда, бигерәк тә ниндәйҙер ярамаған ашамлыҡ ашағас йәки араҡы эскәндән һуң (бахмур синдром) ашағанда файҙалы.

● **Ағыуланыу осрағына килешә.** Урманда яңылыш ағыулы бәшмәк ашағанда күңел болғана башлаһа, ҡуҙғалаҡ эҙләгеҙ. Һыу йә башҡа берәй дарыу табып булмаһа, ҡуҙғалаҡ япрағы һуты хәлегеҙҙе бер аҙ яҡшыртыр. Йәнә, бигерәк тә Азия илдәрендә, шундай ырым йәшәй: алдан күп итеп ҡуҙғалаҡ ашап яланға сыҡһаң, һине скорпион саҡһа ла, уларҙың ағыуы үлемесле булмай.

БАҠСАСЫ ҺӨЙЛӘЙ

# МИН НИСЕК АЙЫУ БАЛАНЫ ҮҪТЕРӘМ



**Был файҙалы емеше булған ҡыуаҡ тураһында мин 2011 йылдың майында Миәкә районында урынлашҡан изге Нарыҫтауҙа уҙған йыйынға барғас, тәүге тапҡыр ишеттем. Мәләүездән килгән Рәмил Абдуллин исемле уҙаман бер ус емеш менән һыйлап китте.**

Икенсе йыл яҙ баҙарға сыҡһам, бер баҡсасы айыу баланы (жимолость) үҫентеләре менән сауҙа итә. Һөйләшеп киттек, ул нисек итеп үҫентеләр үрсетеүен, ҡайһы ергә, кәмендә нисә дана ултыртырға кәрәклеген бәйән итте. Мин дүрт дана һатып алдым, шул уҡ көндә ултырттым һәм ул емеш ҡыуағы тураһында оноттом. Әйткәндәй, ҡыуаҡты баҡсаның төньяғына, һыуыҡ елдәрҙән ышыҡ, ҡояш күберәк төшкән өләшөнә ултыртыу мотлаҡ. Тик киләһе яҙ апрель аҙаҡтарында, баҡса ере кибеп тә бөтмәҫ элек, айыу баланы сәскә атып ултырғанын күреп аптырап киттем. Тирә-яҡта үлән япраҡ ярмаған мәлдә был ҡыуаҡ сәскә ата.

Ошо ҡыҙыҡһыныуым интернет селтәренә килтерҙе. Баҡһаң, жимолость беренсе булып емеш бирә башлай икән. Быйыл, мәҫәлән, 29 апрелдә ҡыуаҡ тулыһынса сәскә атып бөткәйне. Ә 28 майҙа беренсе емештәрен йыя башланым. Иртән, кисен йыяһың, һуңынан таҙартып, бергә бер нисбәтендә шәкәр ҡомо ҡушып, көнөнә бер нисә тапҡыр болғатып торам. Өс көн үтеүгә шәкәр иреп бөтә. Мин уны бер ваҡытта ла ҡайнатмайым, шулай файҙаһы нығыраҡ һаҡланалыр, тип уйлайым. Әҙер ҡатышманы 0,5л йәки 0,75л банкаларға тултырып, ҡышҡылыҡҡа һаҡларға ултыртам. Айыу баланы ер аҫты һыуҙары яҡын булыуын яратмай. Ундай урындарҙа үҫтерергә маташыусы таныштарым өсдүрт йылдан һуң да бер ҡыуаҡтан ни бары берәр стакан емеш йыйыуы хаҡындағы мәғлүмәт менән уртаҡлаша. Был ҡыуаҡ беҙ үҫтереп өйрәнгән ҡарағат кеүек түгел, ҡайһы берәүҙәр бер нисә ботаҡ һындырып биреүемде һорай, ләкин ул тамыр йәймәй торол, үҫеп китеренә бер кем дә гарантия бирмәй. Иң һәйбәте - махсус емеш-еләк питомнигынан районлаштырылған сорттарын һатып алыу, егерме-утыҙ йыл үҫтереү осоронда хаҡын бер нисә тапҡыр ҡайтарыр.

Айыу баланы тарихи Ватанында 56 градус һыуыҡҡа ла бирешмәй икән. Быйыл Благовещенск ҡалаһынан бер танышым ҡышын ҡыуаҡтары туңыуы менән уртаҡлашты, уларҙы заманында Урта Азиянан килтереп һатҡандар икән.

Яҙ етеп, ҡар ирегәс тә аммиак селитраһы менән туҡландырырға кәрәк. Бының өсөн нашатырь спирты ла ярай. Май айы аҙағында-июнь башында емешен йыйып алғас (өс-дүрт көн һайын өлгөрөп тора), калий фосфаты йәки составында азоты булмаған башҡа ашлама менән ашларға, тамырҙары өҫтә булыу сәбәпле һаҡ ҡына ерен йомшартып торорға. Һыуҙы бик йыш һипмәҫкә, картуф ҡаҙып алғас, ваҡын ҡарағат ҡыуағы аҫтына һалғанда жимолость ҡыуағын да онотмаҫҡа кәрәк, сөнки ул да крахмал ярата.

Октябрь айы урталарында ботаҡтарын һирәкләргә, сөнки быны ике-өс йыл буйы эшләргә онотһаң, һуңынан емеш йыйыр өсөн ҡыуаҡ эсенә ҡулыңды тыға алмаҫһың.

Тәүге йыл ике сорт ултыртҡайным, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, Золушка сорты үҙен аҡламаны, сөнки емеше ваҡ һәм тиҙ ҡойола. Шуға күрә эре емешле сорт үҫентеһе алып ултырттым. Ул күпләп емеш бирә башлағас, тәүгеләрен ҡаҙып алып ташлаясаҡмын. Быйыл, мәҫәлән, өс ҡыуаҡтан ун килограмм емеш йыйҙыҡ, шәкәр ҡушып болғатып, ун алты литр ҡайнатма алдыҡ.

Шуны ла әйтергә кәрәктер, организм өсөн файҙалы ҡайһы витаминды алһаң да, был емештә улар башҡаларҙан күберәк. Быға тиклем С витамины сығанағы булып ҡарағат һәм лимон иҫәпләнде. Ә айыу баланында ул икеһенән дә күберәк. Ҡыҫҡаһы, тәмле лә, файҙалы ла емеш үҫтереү өсөн айыу баланына йыл әйләнәһенә иғтибар бирергә кәрәк. Алма беш, ауыҙыма төш, тип ятһаң, ул бешмәҫ тә, төшмәҫ тә.

**Сәйфулла ӘМИРОВ.**
**Көйөргәҙе районы.**

✓ *Атаһы ҡыҙына ҡолаҡтарын ябырға ҡуша. Устары менән ике ҡолағын да ҡаплауы була, ата кеше урыҫ һәм башҡорт телдәрендәге һүгенеүҙәрҙе ҡысҡырып, ҡараҫҡыны арбанан ҡыуырға тотона.*



● **Ҡан тамыры сирҙәренә,** бигерәк тә ҡандағы "ҡыҙыл тәнсә" (эритроцит) кәмегәндә, ошо сәбәптән булған "анемия" осрағында килешә. Йәнә яранан аҡҡан ҡанды тиҙерәк туктатыу өсөн дә яҡшы. Урманда йөрөгәндә яраланып ҡуйғанда быны онотмағыҙ! Юл япрағын яраға бәйләп, ҡуҙғалаҡты ашап ҡуйһағыҙ, ҡан тиҙерәк туктар, яра төҙәлер.

● **Тән ауырыуҙары.** Элек аяҡта, ҡулда барлыҡҡа килгән "сей яра" (язва) өсөн дә ҡулланғандар ҡуҙғалаҡты. Бигерәк тә был юлы ашау өсөн яраҡһыҙ, әммә һаулыҡҡа файҙалы "ат ҡуҙғалағы" (конский шавель) яҡшы. Ат ҡуҙғалағы япраҡтарын бешекләп, яраға япҡандар. Ныҡ әсетмәһен өсөн тәүҙә яраға таҙа май һөртөргә мөмкин.

Шулай уҡ халыҡ әмәлдәре араһында ҡуҙғалаҡ япрағын бешекләп тән ауырыуҙары булған урынға япҡандар. Хатта витилиго, лишай, ҡысынма тигән сирҙәрҙә лә кәметкән. Япраҡ һутында булған эфир майҙары, кофеин һәм башҡа шундай башҡа үләндә осрамаған матдәләр файҙа итә торғандыр был осраҡта.

PP витамины ҡан ойошоуын көйләнә, "рутин" матдәһе иһә ҡан тамырының стеналарын ныҡыта.

● **Теш һыҙлауын баҫа,** теш ҡаҙнаһын ныҡыта, тимәк, ҡаҙнанан ҡан китеүен туктата ул ҡуҙғалаҡ. Япрағын оҙаҡ итеп сәйнәп йөрөргә кәрәк бының өсөн. Йәки күп итеп ҡабып сәйнәп, ауыртҡан урында тотоп торорға кәрәк.

● ***Аҡбур*** йәки ***тупраҡ*** ашағың килеп тик торһа, йәй буйы ҡайҙа табаһың, шунда ҡуҙғалаҡ аша. Был теләгең шулай әкренләп юҡҡа сығыр.

Хатта вирустарға ҡаршы, йә иһә диабет менән ауырығанда ла ҡуҙғалаҡ ярҙам итә икән. Быныһын инде ғалим яҙмаларынан табығыҙ.

● **Һаҡ булығыҙ! Кемдең бөйөр йә бауырҙа, үт ҡыуығында таш бар, ҡуҙғалаҡ ашамағыҙ. Был сирҙәр башҡа үләндәр менән дауалана. Иң мөһиме, һәр нимәлә сама белеү. Игтибар итегеҙ әле, хатта тәбиғәт тә ошоно иҫкәртә кеүек: ҡуҙғалаҡ япрағы үҙе һирәк осрай, үҙенең япрағы йоҡа, бәләкәй, наҙлы ғына. Хатта бик теләһәгеҙ ҙә уны күп итеп ашап булмай, берҙән, әҙ, икенсенән, ҡырҡыу әсе тәме бар. Тимәк, ҡуҙғалаҡты, әгәр организм үҙе "һорап" торһа, көн һайын, тик әҙләп кенә ашарға ярай. Шунда бер зыян да булмаҫ.**

## Баҡсала ла үҫтерәләр уны

Хәҙер магазиндарҙа төрлө орлоҡтар һатыла. Ҡырҙан ҡаҙып килтереп ултыртыу ҙа кәрәкмәй. Бары тик шуны онотмағыҙ: орлоҡтан үҫтерелгән, баҡса өсөн махсус сығарылған сорттар ялан шартында, тупраҡтың бөтә файҙалы матдәләрен алып үҫкән "ялан ҡуҙғалағы" кеүек файҙалы булмай. Баҡса ҡуҙғалағы тәме сөсөрәк, һуты күберәк. Әлбиттә, япрағы ҙур, тимәк күп итеп ашап та була.

Ҡала ерендә ҡуҙғалаҡ ашарға яратыусылар өсөн дан инде. Шәхсән үҙем бер-нисә тапҡыр уның орлоҡтарын һатып алып, баҡсала үҫтерергә маташып ҡараным. Орлоғо мәк орлоғо кеүек ваҡ ҡына. Бер нисек тә үҫмәне. Моғайын, өйҙә рассада кеүек үҫтереү кәрәктер?

Ә ҡуҙғалаҡ ашағы килә бит! Бер танышымдан тамырын алдым. Тәүге йылда бик ҡоро йәй булды. Өҫтәге йәшел өлөшө бөтөнләй юғалды. Икенсе йыл да ул урында үсенте күренмәне. Мин инде онотоп та бөттөм. Булманы был, тинем. Шунан өсөнсө йәй бик ямғырлы булғайны, теге урындан бик матур булып күтәрелеп китте ҡуҙғалағым! Бына нисек көслө икән уның тамыры...

**Һығымта:** ҡырҙа бер урында ҡуҙғалаҡ күрһәгеҙ, тимәк, шул ерҙә ул гел буласаҡ. Хәтерләп ҡуйығыҙ. Бер йылда булмаһа, киләһе йыл сығасаҡ. Бына нисек хикмәтле ул тәбиғәт!

Баҡсаға киләйек. Ҡуҙғалаҡ, әйтеүемсә, кешегә бик күп миҡдарҙа кәрәкмәй. Шуға баҡсала ла уртаса ҙурлыҡтағы түтәл етә. Тирә-яҡҡа таралып, үҙегеҙгә эш өҫтәмәһен өсөн, түтәлде кәртәләп ҡуйыу яҡшы. Тупрағын ара-тирә йомшартып, сүптәрҙе алып тороу ҙа етә. Махсус рәүештә һыу ҡойоп йә ашламалар һалыу ҙа кәрәкмәй. Башҡортса әйтһәк, хатта әрһеҙ.

Бер иҫкәрмә бар: яҙ башында күпереп сыҡҡан ҡуҙғалаҡты, йәлләмәйенсә, төбөнән уҡ барыһын да ҡырҡып алығыҙ. Юғиһә, тиҙ арала оҙон булып урта һабағы үҫер, тамыр көсөн алыр һәм аҙаҡ йәй буйы һәр төптә биш-алты бөртөк япраҡ булыр. Ғөмүмән, япраҡтарҙы шулай күмәртәләп ҡырҡып алыу яҡшы. Ҡабарып ятһа ла, бешкәс ныҡ кәмей бит ул япраҡ. Айына бер тәмле бөлеш ашап, ҡуҙғалаҡ ашы эсеп алырһығыҙ.

Кем дауаланыу өсөн ҡулланырға уйлай (бигерәк тә тире сирҙәре өсөн күп кәрәк бит) улар урманға бара, йәки шул уҡ сифаттарға эйә (ашарға яраҡһыҙ) ат тигәнен йыя. Уның бар ере лә файҙалы (япрағы, орлоғо, тамыры).

Баҡсалағы ҡуҙғалаҡ - тәмле бөлеш, бәйәрәк, аштар өсөн яҡшы.

**Һау-сәләмәт булайыҡ! Йәшел утыбыҙ һүнмәһен!**

**Лилиә ҠӘЙЕПОВА.**

*ЙӘНӘШ ДОНЪЯ*

# МӨҒЖИЗӘЛЕ ХӘЛДӘР

## Ҡаза килтереүсе малай



**Был тарихты кемдән яҙып алғанымды әйтә алмайым. Бәлки, Учалы районында сәйәхәттә йөрөгәндә ишеткәнмендер: дуҫым Юлай менән велосипедта Силәбе өлкәһенә барғанда ике мәртәбә ошо район аша үткәйнек. "Өргөн" ял йортонда иһә айға яҡын йәшәргә тура килде - бәлки, шунда учалыларҙың берәйһе һөйләгәндәрҙе яҙып алғанмындыр. Әйтеүе ауыр, сөнки ярты быуат самаһы ваҡыт үтеп китте бит был шомло тарихты ишетеүемә.**

Учалы районында йәшәгән бер иргә күршеләге ауылға барырға кәрәк булып китә. Шунда йәшәгән танышы, ике тоҡ игенем көбөгә һыйманы, һиңә шуны бушлай бирәм, тигән икән. "Атай, минең дә барғым килә, зинһар, мине лә арбаға ултырт инде", - тип өндәшә уға ҡыҙы. Туғыҙ йәш тирәһе була ул ҡыҙыҡайға.

Сәй эсеп, тоҡтарҙы тейәгәндән һуң, атаһы менән ҡыҙы ҡайтырға сыға. Эңер төшөп, ҡараңғылана башлаған мәлгә тура килә уларҙың юл башы. Ярты юлды үтеүгә, төн юлсыларҙы үҙ ҡосағына ала. Шундағы ҡалҡыулыҡ эргәһенән үтеп барғанда атаһы ҡыҙына шыбырлай: "Юл эргәһендә ятҡан анау йоморо ҙур ташты күрәһеңме? Бик сетерекле урын был. Әгәр берәй көтөлмәгән хәл-әхүәлгә осраһаҡ, ҡуркма. Ҡысҡырма ла, илама ла. Мин эргәңдәмен бит".

Тәүҙә ат тыныс ҡына бара. Көтмәгәндә ул, нимәнәндер ҡурҡып, ситкә һикерә. Арба таш ятҡан яҡҡа шундай ныҡ ауыша - бала менән атаһы ергә саҡ-саҡ ҡолап төшмәй ҡала. Ошоғаса еңел генә юртып барған ат, таш тейәлгән арбаны һөйрәгәндәй, йөктә аяҡтарын тарбайтып тарта. Ауыҙынан күбектәр аға, һырты ҡара тиргә бата.

Шул саҡта атаһы, ҡыҙының яурынына ҡулын һалып, артҡа ҡара, тип ымлай. Ҡыҙы боролоп ҡараһа, арбаның артҡы иң осонда таныш булмаған бала ултырғанын күрә. Арҡаһы менән боролоп ултырған малайға ун йәш тирәһе булырға тейеш, тип фараз итә ҡыҙ бала. Ҡараңғы булыуға ҡарамаҫтан, таныш булмаған юлсының башын бик аҫҡа эйгәнен дә шәйләй ул. Малайҙың ҡыҫҡа ғына һырылған көпө кейгәнен, ә башында ҡолаҡсын бүрек булыуын да аңғара.

Атаһы ҡыҙына ҡолаҡтарын ябырға ҡуша. Устары менән ике ҡолағын да ҡаплауы була, ата кеше урыҫ һәм башҡорт телдәрендәге һүгенеүҙәрҙе ҡысҡырып, ҡараҫҡыны арбанан ҡыуырға тотона. Ҡаты өндәшеү ярҙам итмәгәс, доғалар уҡый башлай. Бынан файҙа була: ҡыҙы менән атаһы арбанан һикереп төшкәндә була торған тауышты ишетә. Бәләкәй бала ундай тауыш сығара алмай - мыҡты ҡәүҙәле ир генә быға һәләтле, тигән уйға килә улар.

Ҡараҫҡы һикереп төшөүе була, арба, ауыр йөктән ҡотолғандай, шығырлап, яныннан элекке хәленә ҡайта. Ошоғаса тарбанлап саҡ барған ат иһә күңелләнә һәм еңел генә юртып китә.

Күп тә үтмәй, юлсылар ихаталарына килеп етә. Өйгә инеү менән оло ғауға тыуғанын аңлайҙар. Бер йортта ике ғаилә йәшәгән була шул осорҙа. Атаһы, әсәһе, ҡыҙынан тыш, улы һәм уның ҡатыны бергә тормош көтәләр. Йәштәр татыу йәшәйҙәр. Бер нисә ай элек кенә оло быуын кешеләрен ейәнле итәләр. Яңы ғына тыуған малай ауырымай, мыжымай үҫә башлай.

Ғауғаның сәбәбен килене аңлатып бирә. Юлсылар килер алдынан ғына ул сабыйҙы бәүетеп ултырған була. Бала ҡапыл ғына ҡысҡырып ебәрә һәм иларға тотона. Килен кеше ишек яғына ҡараһа, тупһала ун йәш тирәһендәге малай тороуын күрә. Һырылған ҡыҫҡа көпө, башына ҡолаҡсын бүрек кейгән була ул. Теләп ҡараһа ла, ошоғаса был малайҙы бер ҡасан да, бер ҡайҙа ла күрмәүен аңлап өлгөрә йәш әсә.

Тупһа янында оҙаҡ тормай саҡырылмаған ҡунаҡ. Тиҙ-тиҙ атлап, сәңгелдәк эргәһенә килә. Унда ятҡан сабыйға ҡарап тора ла... ҡапыл юҡҡа сыға. Әйтерһең, томан кеүек һауаға тарала. Бала иһә быуылып илауҙан туктамай. Кәүҙәһе тотошлайы менән ҡалтырана, тартышыуҙан һығылып-бөгөлә. Күп тә үтмәй, сабый тынып ҡала.

Тиҙ генә шәфҡәт туташын саҡырып килтерәләр. Ул көттөрмәйенсә килеп етһә лә, ярҙам итә алмай: бала йән биргән була.

Аҙағыраҡ ауылдың ҡарттары ҡазаның ҡайҙан килеүен аңлатып бирәләр. Ҡәҙимге малайға түгел, ә ен-пәрей тоҡомонан булған затҡа юлыҡҡандар улар. Кешегә зыян килтереү, сабыйҙарҙы урлау йәки уларҙы һәләк итеү тик уларға ғына хас шөғөл, тиҙәр улар.

Районда хөрәфәтле урындар берәү генә түгел. Уларҙың ҡайҙа икәнен тик ололар ғына белә. Йәштәр уларҙы тыңламай, иҫкәртеүҙәргә ҡолаҡ һалмай. Шундай заман килде бит инде - ни эшләмәк кәрәк...

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ**
**яҙып алды һәм баҫмаға әҙерләне.**
**(Дауамы. Башы 25-се һанда).**

*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Һоро ябалаҡ**
**(Серая неясыть)**



Урта ҙурлыҡтағы, һоро йәки ерән төҫтәге, ҡыҫҡа ҡанатлы, ҙур ҡара күҙле ябалаҡ. Түшендә ҡара ҡауырыйҙары бар. Төнөн генә һунар итә. Инә ҡоштоң һайрауы йыраҡтан ишетелгән поезд гудогын хәтерләтә, ә ата ҡош эңерҙә һәм төнөн ҡысҡыра, ул башҡа ябалаҡтарҙың тауышына бөтөнләй оҡшамаған, "кувитт" тип ишетелә.

Европаның бөтөн төбәгендә лә осрай. Элекке Өфө һәм Бөрө губернияларында ла ғәҙәти ҡош иҫәпләнгән, 1975 йылда ла ғалимдар уларҙың тауышын Йылайыр, Архангел, Ғафури урмандарында ишетеп, теркәп ҡуйған. Беҙ иһә һоро ябалаҡты 1964 йылдың көҙөндә Өфөнөң М. Ғафури паркында күрҙек. Ул ҙур ағастағы өңө эргәһендә ултыра ине, аҙаҡтан шунда инеп йәшенде. Ырымбурҙа оя ҡороп йәшәй.

Иртә яҙын ҡатнаш урмандарҙа, боронғо парктарҙа оя ҡора. Ояһы ағас өңөндә, һирәгерәк ҡаяларҙағы бушлыҡтарҙа, кәрниз яҫтарында, шулай уҡ ҡарға һәм һайыҫҡандарҙың ояларында. Шулай уҡ һоро ябалаҡтың ергә ҡоролған ояһына ла тап булғаныбыҙ бар. Ояһына бер нәмә лә түшәмәй. Йоморткаларын 28-30 көн баҫа. Бәпкәләрҙең йөнө башта аҡ була, һуңынан ул һоро-ерәнгә әйләнә, арҡыры буйлы һыҙаттар барлыҡҡа килә.

Төп ризығы - ҡыр сысҡаны, уны һоро ябалаҡ, башлыса ишетеү һәләте ярҙамында, төнөн тота. Шулай уҡ һыҡыр сысҡанды ла, йоҡлап ултырған ҡоштарҙы ла аулай. Ҡышын йәйен йәшәгән ерен ташлап китмәй, ҡайһы саҡта йәйге ояһынан саҡ ҡына ситкәрәк китеүе ихтимал. Ә бына ҡар күп ҡыштарҙа, ризыҡ аҙ булған йылдарҙа күмәкләп сит төбәктәргә лә осоп китә. Көҙөн һоро ябалаҡты ауыл һәм ҡалаларҙа күрһәгеҙ, тимәк, улар унда тап аҙыҡ - турғай, күгәрсен, ҡомаҡ һәм сысҡандар артынан килгән. Беҙгә билдәле иң оҙаҡ йәшәгән һоро ябалаҡтың йәше - 19 йәш.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары"**
**китабынан.**
**(Дауамы бар).**



## 7 ИЮЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.10 "Модный приговор". [0+]
10.00 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.30, 2.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.55 "Время героев". [16+]
13.00, 14.15 Информационный канал. [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.00 Т/с "Ищейка-6". [16+]
20.00 "Большая игра". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Чужой". [16+]
22.45 Т/с "Серебряный волк". [16+]
23.45 "Большая игра" с Дмитрием Саймсом. [16+]
1.00 Д/ф Премьера. "Поднимающий знамя". К 100-летию со дня рождения Гелия Коржева". [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.05, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Сёстры". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.12 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 Сәләм.**
**10.00 Т/с "Принц Сибири". [12+]**
**11.00 Новости недели (на русс. яз.). [12+]**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Специальный репортаж. [12+]**
**12.15 Специальный репортаж ГИБДД. [12+]**
**12.30, 3.30 Күстәнәс. [12+]**
**13.00, 4.00 "Башҡорт йыры" представляет. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 5.30 Колесо времени. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Асыш. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Башҡорттар. [6+]**
**16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**17.45, 20.15 Профессионалы. [12+]**
**18.00 Защитники Отечества. [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 О чем молчат Памятники. [12+]**
**21.00 Д/с "Герои". [12+]**
**22.00, 3.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**0.00 Т/с "Двойная сплошная". [16+]**
**1.30 Спектакль "Откройте, милиция!" [12+]**
**4.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**5.00 Хазина. [12+]**

## 8 ИЮЛЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.00 Т/с "Ищейка-6". [16+]
20.00 "Большая игра". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Чужой". [16+]
22.45 Т/с "Серебряный волк". [16+]
23.45 "Большая игра" с Дмитрием Саймсом. [16+]
1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.05, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Сёстры". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.12 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 Сәләм.**
**10.00 Т/с "От ненависти до любви". [16+]**
**11.00 Из жизни доктора. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45, 21.00 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 3.45 Күстәнәс. [12+]**
**13.00, 4.15 "Башҡорт йыры" представляет. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 5.30 Колесо времени. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**17.00, 22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Профессионалы. [12+]**
**20.30 Детей много не бывает. [6+]**
**21.15 Д/ф "Уфимский хоспис: день, чтобы..." [12+]**
**23.00 Башҡорт йыры-2025. [12+]**
**0.00 Т/с "Двойная сплошная". [16+]**
**1.30 Спектакль "Зятек". [12+]**
**4.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**

## 9 ИЮЛЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.00 Т/с "Ищейка-6". [16+]
20.00 "Большая игра". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Чужой". [16+]
22.45 Т/с "Серебряный волк". [16+]
23.45 "Большая игра" с Дмитрием Саймсом. [16+]
1.00 Премьера. "Шоу Вована и Лексуса". [16+]
1.50, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.05, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Сёстры". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.12 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 Сәләм.**
**10.00 Т/с "От ненависти до любви". [16+]**
**11.00 Дорога к храму. [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15 Криминальный спектр. [12+]**
**12.30, 3.30 Күстәнәс. [12+]**
**13.00, 4.00 "Башҡорт йыры" представляет. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 5.30 Колесо времени. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Экологично. [6+]**
**15.30 Атайсал. [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**17.45 Специальный репортаж ГИБДД. [12+]**
**18.00 Тормош. [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Профессионалы. [12+]**
**20.30 Защитники Отечества. [12+]**
**21.00 Д/с "Заповедники России". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 Байыҡ-2025. [12+]**
**0.00 Т/с "Двойная сплошная". [16+]**
**1.30 Спектакль "Песнь во сне". [12+]**
**4.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**5.00 Тайм-аут. [12+]**

## 10 ИЮЛЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.00 Т/с "Ищейка-6". [16+]
20.00 "Большая игра". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Чужой". [16+]
22.45 Т/с "Серебряный волк". [16+]
23.45 "Большая игра" с Дмитрием Саймсом. [16+]
1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.05, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 Т/с "Сёстры". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.12 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 Сәләм.**
**10.00 Т/с "От ненависти до любви". [16+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на рус. яз.). [12+]**
**12.15 Профессионалы. [12+]**
**12.30, 3.30 Күстәнәс. [12+]**
**13.00, 4.00 "Башҡорт йыры" представляет. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 23.00, 5.30 Колесо времени. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Сулпылар. [6+]**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Патриот РФ. [12+]**
**16.15 Дознание. [16+]**
**17.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Йома. [6+]**
**19.00 Телецентр.**
**19.45 Мама. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Д/ф "Вода и злато". [12+]**
**21.00 Д/с "Герои". [12+]**
**22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**0.00 Т/с "Двойная сплошная". [16+]**
**1.30 Спектакль "Близнецы". [12+]**
**3.15 Письма солдатам. [12+]**
**4.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**

## 11 ИЮЛЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.55 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
15.10 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 Т/с "Ищейка-6". [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Что? Где? Когда?" [16+]
22.55 Премьера. "Наша новая музыка". [12+]
0.15 Х/ф "Брат и сестра". [18+]
2.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.50 Торжественная церемония открытия XXXIV Международного фестиваля "Славянский базар в Витебске".
23.55 Х/ф "Когда меня не станет". [12+]
3.30 Х/ф "Только вернись". [16+]
4.58 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 Сәләм.**
**10.00 Т/с "От ненависти до любви". [16+]**
**11.00 Йома. [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]**
**12.15 Криминальный спектр. [12+]**
**12.30, 3.30 Күстәнәс. [12+]**
**13.00, 4.00 "Башҡорт йыры" представляет. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 5.30 Колесо времени. [12+]**
**15.00 Асыш. [6+]**
**15.15 Тирмәкәй. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Хазина. [6+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 Профессионалы. [12+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Башҡорт йыры-2025. [12+]**
**22.00 СВОих не бросаем. [12+]**
**22.15 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 Ҡурай-шоу. [12+]**
**23.30 Ете егет. [12+]**
**0.30 Т/с "Двойная сплошная". [16+]**
**2.00 Спектакль "Радость нашего дома". [12+]**
**4.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**5.00 Автограф. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**

## 12 ИЮЛЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф "Улыбка на память". Ко дню рождения Жанны Фриске". [12+]
11.05 Д/ф "Поднимающий знамя". К 100-летию со дня рождения Гелия Коржева". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Играем свадьбу!" [12+]
13.10 "Наше всё". [12+]
14.00 Т/с "Убойная сила-3". [16+]
16.55 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Премьера. "День семьи, любви и верности". Праздничный концерт. [12+]
21.00 "Время".
21.35 "Сегодня вечером". [16+]
23.25 Х/ф "Легенда о самбо". [12+]
1.25 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Большие перемены.
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Крайняя необходимость". [12+]
0.45 Х/ф "Наваждение". [16+]
4.30 Х/ф "Бесприданница". [16+]
6.01 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.30 Хазина. [6+]**
**9.00, 20.15 Профессионалы. [12+]**
**9.15 Ҡурай даны. [12+]**
**9.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**9.45 СВОих не бросаем. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Книга сказок. [6+]**
**10.45 Зерно. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Асыш. [6+]**
**11.30 Атайсал. Беззекел?р! Знай наших! [6+]**
**12.00 Елкән. [6+]**
**12.30, 3.45 Ете егет. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Спектакль "Алима или свадьба старика Мырдаша". [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Территория женского счастья. [12+]**
**19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Байыҡ-2025. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00, 6.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.45 Т/с "Двойная сплошная". [16+]**
**1.15 Спектакль "Девушка с монистами". [12+]**
**4.30 Новости недели (баш. яз.). [12+]**
**5.15 Письма солдатам. [12+]**
**5.30 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**

## 13 ИЮЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00, 10.00 Новости.
6.10, 0.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.40 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь других". [12+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Премьера. "Будем жить!". [16+]
13.10 "Видели видео?" [0+]
14.10 Х/ф "Труффальдино из Бергамо". [0+]
16.50 Д/ф "Уроки забвения". [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.35 "Эээх, Разгуляй!" [16+]
21.00 "Время".
23.00 Т/с "Триггер". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
6.05, 1.35 Х/ф "Любовь для бедных". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 "Парад юмора". [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.16 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Тормош. [12+]**
**8.15 Легенды Урала. [12+]**
**8.30 Күстәнәс. [12+]**
**9.00 Профессионалы. [12+]**
**9.15 Мама. [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Тирмәкәй. [6+]**
**10.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Беседка. [6+]**
**11.30 Асыш. [6+]**
**12.00 Сулпылар. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15, 15.45, 20.15 Квадратные метры. [12+]**
**13.30 Д/с "Заповедники России". [12+]**
**14.00 Дорога к храму. [6+]**
**15.00 Честно говоря. [12+]**
**16.00 Опера "Искатели жемчуга". [12+]**
**19.00 День семьи, любви и верности. [12+]**
**19.15 Әлләсе... [12+]**
**20.00 Патриот РФ. [12+]**
**20.30 Автограф. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Концерт Айгуль Асадуллиной. [12+]**
**0.45 Спектакль "Последние". [12+]**
**3.00 Колесо времени. [12+]**
**4.00 Письма солдатам. [12+]**
**4.15 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**4.45 Башкирские каникулы. [12+]**
**6.00 Новости недели (на русс. яз.). [12+]**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1447 һижри йыл.*

| Июль (Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 7 (12) дүшәмбе | 2:45 | 4:49 | 13:30 | 19:03 | 21:53 | 23:23 |
| 8 (13) шишәмбе | 2:46 | 4:50 | 13:30 | 19:03 | 21:52 | 23:22 |
| 9 (14) шаршамбы | 2:47 | 4:52 | 13:30 | 19:02 | 21:51 | 23:21 |
| 10 (15) кесе йома | 2:48 | 4:53 | 13:30 | 19:02 | 21:50 | 23:20 |
| 11 (16) йома | 2:48 | 4:54 | 13:30 | 19:01 | 21:49 | 23:19 |
| 12 (17) шәмбе | 2:49 | 4:55 | 13:30 | 19:01 | 21:48 | 23:18 |
| 13 (18) йәкшәмбе | 2:50 | 4:57 | 13:30 | 19:00 | 21:47 | 23:17 |

*БР Мосолмандары диниә назараты сайтынан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БАШҠОРТ ГРАММАТИКАҺЫН БЕЛӘҺЕҢМЕ?




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**25-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ризаитдин. Крыжановский. Сарбай. Грамм. Ҡалым. Аҡмулла. Арбат. Мөхәммәт. Радар. Автолавка. Титов. Нөктәләр. Дао. Арпа. Ләм. Мәскәүле. Аргентина. Әкиәт. Зөлхизә. Батыр. Арба. Байтал. Мөжәүир. Рәсүлү. Оло. Нәсихәт. Ейлу. Зәйнулла.Илама. Сымыры. Шәүүәл. Үрмәле. Тайм.

**Вертикаль буйынса:** Дана. Астролог. Тойғо. Мендәр. Ураҙа. Алма. Роми. Кәсә. Ҡарама. Асира. Әрепләшеү. Рәжәб. Рауза. Йомарт. Азов. Герб. Урманлы. Мәрт. Декларатив. Сеул. Мөьмин. Мәте. Алырым. Өлкә. Зәйтүн. Сөйлө. Әфтиәк. Лемнос. Әруах. Рәүеше. Әкәмәт.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# НАМАҘ ТУРАҺЫНДА ХӘҘИСТӘР

"Эй, Ғәли, - тигән Бәйғәмбәр (с.ғ.с), - өс нәмәне: ваҡыты килеп еткән намаҙыңды, әҙерлек хәленә еткерелгән мәрхүмеңде ерләүҙе, кешеһе тура килгәндә тол ҡатынды кейәүгә биреп ҡалыуҙы кисектерә күрмә".

"Намаҙ ваҡытының башланыуы - Аллаһ ризалығына бер сәбәп, намаҙҙың һуңы - Аллаһ Тәғәләнең ярлыҡауына өмөт".

"Бер нәмәне лә имамдан элек эшләмәгеҙ. Ул "Аллаһу Әкбәр!" тигәс кенә, һеҙ ҙә "Аллаһу Әкбәр!" тиегеҙ".

"Эй, кешеләр! Мин - һеҙҙең имамығыҙ. Рөкуғта, сәждәлә, ҡыямда минән уҙып китмәгеҙ".

"Имамды үҙенә эйәреү өсөн имам иткәндәр. Ул "Аллаһу Әкбәр!" тиһә, һеҙ ҙә "Аллаһу Әкбәр!" тиегеҙ, ул Ҡөрьән уҡығанда өндәшмәй тороғоҙ".

"Намаҙ - ул Ҡөрьән уҡыу һәм Аллаһты хәтергә төшөрөү. Намаҙ уҡығанда уйығыҙҙа ла намаҙ ғына булһын".

"Намаҙ уҡығанда битегеҙҙе яулыҡ менән ҡапламағыҙ, өҫ кейемегеҙҙе иңегеҙгә һалып ҡына намаҙға баҫмағыҙ".

Бер ваҡыт сәхәбәләрҙән Әбү Хәмид Әс-Сәғиҙиҙең ҡатыны килеп: "Эй, Аллаһ илсеһе! Намаҙҙы мин һеҙҙең менән бергә уҡырға яратам", - ти. "Минең менән намаҙ уҡыуҙың һиңә бик тә оҡшауын мин беләм, әммә үҙеңдең йоҡо бүлмәңдә уҡыған намаҙың һиңә ҡунаҡ бүлмәһендә уҡылған намаҙҙан, ҡунаҡ бүлмәһендә уҡығаның үҙ өйөңдә уҡыған намаҙҙан, үҙ өйөңдә уҡыған намаҙ мәхәллә мәсетенә килеп уҡылғандан яҡшыраҡ", - ти Бәйғәмбәр (с.ғ.с) .

Бәйғәмбәребеҙ һүҙҙәренән һуң был ҡатын өйөнөң иң төпкөл бер ерендәге мөйөштө һайлап ала ла намаҙҙы ғүмер буйы шунда уҡый. Беҙҙә лә бит намаҙ ваҡыттарында фәҡәт ҡатын-ҡыҙҙар шаулашып ултырыусан, хөтбә һөйләнгән саҡтарҙа ла тауышланып йөрөүселәр етерлек.

Әйткәндәй... Кешеләр күп ерҙә намаҙ уҡырға тура килгәндә алдынан үтеп-һүтеп йөрөргә мәжбүр булғандар гонаһлы, ә һин үҙең, уларға гонаһ эшләүгә сәбәпсе булмаҫ өсөн, үҙ алдыңа сутра ҡуяһың. Сутра терһәк бейеклегендәге бер нәмә - ултырғыс, дөйә эйәре, бармаҡ йыуанлығындағы бер ағас йәки башҡа нәмәләр булырға мөмкин.

Йәмәғәт менән намаҙ уҡығанда үҙ алдына һәр кем сутра ҡуйып тормай, имам алдындағы, имам ҡулындағы таяҡ бөтәһе өсөн дә етә.

ЙӘШЕЛ ДАУА

# ҠАРА ҠЫЛАУҘЫ ДАУАЛАЙ

**Укроп бик күп ауырыуҙарҙан дауа булыуын барыһы ла белә. Ул шулай уҡ күҙҙең ҡара ҡылау ауырыуынан да яҡшы ярҙам итә икән.**

Бының өсөн 20 грамм укроп орлоғона 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә кәрәк. Төнәтмәне өскә бүлеп, көн дауамында эсергә. Ошо уҡ төнәтмә менән көнөнә бер нисә тапҡыр күҙҙәрҙе сайырға һәм сылатҡыстар яһарға була. Уны көн һайын яңыртып әҙерләргә.

Ҡара ҡылауҙы дауалауҙың тағы бер ысулы бар:

- байканан 5х5 сантиметрлыҡ ике бәләкәй муҡса тегергә;
- һәр муҡсаға 3-әр балғалаҡ укроп орлоғон һалып, ауыҙын бәйләргә. Шунан эмалле көрөшкәгә һалырға һәм өҫтөнә сығарғансы һыуыҡ һыу ҡойоп, утҡа ҡуйырға;
- 2 минут ҡайнатырға, әҙерәк һыуынғанын һәм һыуы һарҡығанын көтөргә. Күҙҙәрҙе йомоп, йылымыс муҡсаларҙы һалырға һәм өҫтөнән целлофан муҡса, таҫтамал ябырға.
- Һыуынғансы, 10-15 минут торорға. Был рәүешле төнгөлөккә дауаланырға.
- Муҡсалағы укропты ике тапҡыр ҡулланырға була. Шунан орлоҡтарҙы ташларға, муҡсаларҙы һабынһыҙ ғына сайып алырға, яңы орлоҡтар һалып, дауаланыуҙы дауам итергә.

Укроптың һәр өлөшө файҙалы. Унда анетин, май, аҡһым матдәләре, сахаридтар, тимер, кальций, калий, фосфор, тиамин, рибофлавин матдәләре, никотин, аскорбин, фолий кислоталары һәм башҡа матдәләр бар. Укроп ҡан тамырҙарын киңәйтә, артериаль һәм глаукома ҡан баҫымын түбәнәйтә, сөнки бәүел ҡыуҙыра. Шулай уҡ неврозҙан, тынғыһыҙ йоҡлағанда, йөрәкте тынысландырырға ярҙам итә. Уны бауыр, эсәктәр, ашҡаҙан ауырыуҙарынан да ҡулланалар.

Күҙ күреү һәләтлеген яҡшыртыу өсөн миҙгелендә ҡара көртмәле, ҡайын еләге, ҡарағат, йыуа, укропты күп итеп ашап ҡалырға кәрәк. Шулай уҡ йәшелсәнән турамалар, һоло һәм ҡарабойҙай ярмалары, йәшелсә аштары, тауыҡ ите, һөт, ҡатыҡ ашау ҙа файҙалы. Көҙгөһөн көн һайын ҡабаҡ һутын эсергә, бутҡаһын бешереп ашарға ла була. Әйткәндәй, укроп конъюктивит, блефарит, күҙ ҡабағы шешкәндә лә ярҙам итә.

ӘЙТКӘНДӘЙ

# ЯҢЫ ЙЫЛ БАШЛАНДЫ!

**Билдәле булыуынса, 26 июндә һижри календарь буйынса 1447 йыл башланды.**

Динебеҙҙә әйтелеүенсә, мөхәррәмдең тәүге ун көнөндә яңы эштәр башлау хәйерле. Был осорҙа элек-электән туйҙар үткәрелгән, йортҡа нигеҙ һалынған. Мөхәррәм шулай уҡ "тыйыу айы" тип һаналған - унда борондан һуғыш башларға ярамаған. Яңы йылдың тәүге айының унынсы көнө - Ғәшүрә. Уны ураҙа тотоп үткәреү хәйерле һанала, был турала байтаҡ хәҙис бар. Быйыл Ғәшүрә 5 июлгә тура килә. Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәләйһис-сәләм былай тигән: "Кем һәр айҙың өс көнөндә һәм рамаҙан айында ураҙа тота, шул һәр ваҡыт ураҙала йөрөгән кеүек булыр. Ғәрәфә көнө өсөн Аллаһ Тәғәлә үткән йылда һәм быйыл ҡылынған гонаһтарҙы кисерер, тип өмөт итәм. Ә Ғәшүрә көнөндә тотолған ураҙа өсөн Аллаһ былтырғы гонаһтарҙы юйыр тип ышанам".

*✓ Төбәктәр араһында иң күп награда беҙҙә. Республикабыҙ өсөн рекорд. 2025 йылда ете "Алтын битлек". Премияға өс театрыбыҙ 17 категорияла номинацияға тәҡдим ителде.*



МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# ӘЛЕГӘ ЯЛ ИТӘЛӘР



**Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры сағыу премьераларға һәм ваҡиғаларға бай ижади тормош менән тулы 105-се миҙгелде япты.**

Ҙур зал сәхнәһендә миҙгел йомғаҡтары буйынса бүләкләү тантанаһы уҙҙы.

"Иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ роле" призына "Яратам, тип әйтеп өлгөрмәнем" спектаклендә Фәрхинур роле өсөн Илгизә Ғилманова, "Иң яҡшы ир-егет роле"нә "Йырланмаған йырым һин..." спектаклендә Хәсән роле өсөн Азамат Ғафаров һәм ошо уҡ спектаклдә йәш Хәсән ролен башҡарған Алмаз Йосопов лайыҡ булды.

"Икенсе пландағы иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ роле" призы "Йырланмаған йырым һин..." спектаклендәге Нәжибә роле өсөн Илүзә Күсәбаеваға, "Икенсе пландағы иң яҡшы ир-егет роле" "Яратам, тип әйтеп өлгөрмәнем" спектаклендәге Томас роле өсөн Ирек Булатовҡа һәм Азамат Ғафаровҡа тапшырылды. "Намыҫлы һәм фиҙаҡәр хеҙмәте өсөн" призы менән Рәүис Заһитов бүләкләнде.

"Иң яҡшы эпизодик ролдәр" призы "Яратам, тип әйтеп өлгөрмәнем" һәм "Йырланмаған йырым һин..." спектаклдәрендәге ролдәре өсөн Лилиә Сәғитоваға бирелде, "Иң яҡшы дуэт" - Артур Кәбиров, Артур Ҡунаҡбаев, Урал Әминев, "Алтын ҡул оҫтаһы" - Глеб Соловьев, "Ролдәр ансамбле" - "Ваня ағай" спектаклендә уйнаусылар Фәнис Рәхмәтов, Милена Сираева, Лилиә Ғәлина/Илүзә Күсәбаева, Минзәлә Хәйруллина/Гүзәл Маликова, Азат Вәлитов, Руслан Хайсаров, Илсур Байымов, Эльвира Юнисова.

Видеограф һәм фотограф Руслан Юлтаев "Алтын объектив" номинацияһында бүләкләнде, ә актриса Милена Сираева баш режиссерҙың махсус призына лайыҡ булды.

"Был миҙгелдә театр биш яңы спектакль сәхнәләштерҙе. Ырымбурҙа, Астанала, шулай уҡ Башҡортостандың күп кенә ҡала һәм райондарында гастролдәрҙә йөрөп ҡайттыҡ. "Бөйрәкәй" спектакле "Алтын битлек" исемлегенә индерелде, ә "Ваня ағай" спектаклен Ҡаҙанда Халыҡ-ара театр олимпиадаһында ҡурһәттек", - тип һөйләне театр директоры Иршат Фәйзуллин.

# "ЕТЕ "АЛТЫН БИТЛЕК"

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Башҡорт опера һәм балет театры артистарын Рәсәйҙең "Алтын битлек" милли театр премияһындағы уңыштары менән ҡотланы.**




Билдәләнеүенсә, беҙҙең республика ете награда менән бүләкләнде. Башҡорт академия опера һәм балет театрының "Ай тотолған төндә" операһы бер юлы биш номинацияла "Алтын битлек"кә лайыҡ булды: "Иң яҡшы дирижер эше" (Валерий Платонов), "Иң яҡшы ир-егет роле" (Василий Ефимов), "Иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ роле" (Любовь Буторина), "Иң яҡшы ҡуйыусы рәссам эше. Музыкаль театр" һәм "Костюмдар буйынса рәссамдың иң яҡшы эше (икеһендә лә - Екатерина Малинина).

"Рахманинов. Ғүмергә торошло симфония" балеты "Иң яҡшы ир-егет роле. Балет" номинацияһында (Сергей Бикбулатов) "Алтын битлек" алды.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, быйыл яҙ ошо спектакль Мәскәүҙең Ҙур театрында ҡурһәтелде.

"Төбәктәр араһында иң күп награда беҙҙә. Республикабыҙ өсөн рекорд, быға тиклем театрҙарыбыҙ ошондай күп премия яулағаны юҡ ине. 2025 йылда ете "Алтын битлек". Премияға өс театрыбыҙ 17 категорияла номинацияға тәҡдим ителде. Опера һәм балет театрынан тыш, Курсаҡ театры һәм Стәрлетамаҡ рус драма театры. Быны мәҙәниәтебеҙҙең ысын ҡаҙанышы, коллективтарыбыҙҙың юғары оҫталығын таныу тип иҫәпләйем. Ҡатнашы булғандарҙың барыһын да ҡотлайым!" - тип билдәләне Радий Хәбиров.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠУРЫҢ БӨТҺӘ...

## кеше ҡәҙерен белерһең

Ярлының ярлылығы бөтҡәс тә, ярлылыҡ әҫәре ҡырҡ йылға етер; байҙың байлығы бөтҡәс тә, байлыҡ әҫәре ҡырҡ йылға етер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Аҡыллы әҙәм ҡатын-ҡыҙҙы ла, быяланы ла һынауҙарға дусар итмәҫ.

**(Лопе де Вега).**

Кешелеккә хеҙмәт итмәгән аҡыл бик ҡурҡыныс.

**(Софокл).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер фермерҙың ишәге ҡоҙоҡ эсенә ҡолап төшә. Фермер ни эшләргә белмәйенсә, йүгергеләргә тотона, шул уҡ ваҡытта ҡоҙоҡ төбөндәге ишәктең ғазаплы, йәлләткес тауышы уны ҡаушатып, ниндәйҙер сара күрергә ҡамасаулай. Шулай ҙа фермер үҙендә бер көс табып, шундай ҡарарға килә: ишәк ҡарт инде, ҡоҙокто ла күптән күмеп ҡуйырға йыйына ине. Шуға ла хайуанды унан һөйрәп сығарыуға көс әрәм итеп тормаҫҡа, ҡоҙокто ишәге-ние менән бергә күмеп ҡуйырға!**

**Фермер эргәмә күршеләрен саҡыра. Барыһы ла дәррәү көрәккә тотоноп, ҡоҙоҡҡа тупраҡ ырғыта башлай. Ишәк эштең ниҙә икәнен шунда уҡ һиҙенеп, ҡурҡыныс итеп үкерергә тотона. Шунан ҡапыл тынып ҡала. Күпмелер тупраҡ ырғытҡандан һуң, фермер ҡоҙоҡ эсенә күҙ ташлай. Унда күргәндәренән шаҡ ҡата: ишәк һәр ырғытылған тупраҡты өҫтөнән һелкеп төшөрөп, тупраҡ өҫтөнә баҫа бара. Шулай итеп, ул бик тиҙ ҡоҙоҡ буйлап өҫкә күтәрелә һәм һикереп сығып, сабып китә. Көрәк тотҡан кешеләр аптырап тороп ҡала...**

**Эйе, һинең тормошоңда ла бындай ауырлыҡ, кәртәләр осрар, улар әленән-әле өлөшләп ебәрелә торор.**

**Өҫтөңә ниндәйҙер "тупраҡ" ырғытылғанда, уны һелкеп ташлап, юғарыға күтәрел - шул саҡта ғына тубыҡтарыңды йәҙып, турайып баҫа алырһың.**

**Барлыҡҡа килгән һәр ауырлыҡ - ул юлыңа ишелеп төшкән таш өйөмө һымаҡ. Туктап ҡалмағанда һәм бирешмәгәндә был таш өйөмөн дә аша сыға алырһың.**

**Өҫтөңә ишерелгән һәр "тупраҡты" һелкеп ташла һәм юғарыға күтәрел!**

**Бәхетле булыу өсөн ошо ябай ғына биш ҡағиҙәне иҫеңдә тот:**

**- Йөрәгеңде нәфрәттән арындыр һәм ғәфү ит.**

**- Йөрәгеңде борсолоуҙарҙан азат ит - уларҙың күбеһе сәбәпһеҙ һәм урынһыҙ килеп тыуа бит.**

**- Ябай ғына итеп йәшәргә тырыш, булғанына шөкөр ит.**

**- Үҙең кешеләргә күберәк бир.**

**- Башҡаларҙан күпте өмөт итмә.**

МАТУР БАШҠОРТ ҺҮҘЕ

# ҠОЯШ



**Ҡояш - иң матур, иң йылы һүҙ. Был һүҙҙе ишетеү менән үк күңелгә яҡтылыҡ, шатлыҡ, өмөт тулып китә.**

Ҡояш - Ерҙәге бар тереклеккә ғүмер, йәшәү көсө биргән ҙур йондоҙ. Ул беҙҙе һәр иртәлә нурҙары менән сәләмләй, донъяны яҡтырта, йылыта, үҫемлектәргә, кешеләргә, хайуандарға йәшәү өсөн кәрәкле энергия бүләк итә.

Ҡояштың йылылығы һәм яҡтылығы булмаһа, Ерҙә тормош та булмаҫ ине. Үҫемлектәр ҡояш нурынан көс ала, улар аша беҙгә аҙыҡ, һауа килә. Ҡояш нурҙары тәбиғәтте уята, сәскәләрҙе астыра, ағастарҙы өлгөртә. Кешеләр ҙә ҡояшлы көндәрҙә үҙҙәрен дәртле, шат, бәхетле итеп тоя.

Ҡояш - яҡтыртыусы, йылытыусы, күңелдәргә өмөт биреүсе символ. Ул һәр ваҡыт юлыбыҙҙы яҡтыртып, күңелдәребеҙгә яҡшылыҡ, изгелек, шатлыҡ өҫтәп тора. Башҡорт халыҡ ижадында ла ҡояш тураһында күп йырҙар, мәҡәлдәр, шиғырҙар бар. "Ҡояшлы көн - бәхетле көн", тиҙәр. Ҡояш нурҙары кеүек яҡты, йылы һүҙҙәр кешенең күңеленә лә йәм, йылы өҫтәй.

Ҡояш - тәбиғәттең могжизәһе, ул һәр кемгә берҙәй йылылыҡ, яҡтылыҡ өләшә. Ҡояшлы иртәләр - яңы өмөт, яңы шатлыҡ, яңы мөмкинлектәр билдәһе. Шуға күрә "ҡояш" һүҙе - иң матур, иң яҡты һүҙҙәрҙең береһе.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

ТЕЛҺӨЙӘР

# ҺУЙҘАЙ КЕШЕ

**Бөгөн ҡабатлаясаҡ һүҙҙәр ҙә йәнле телмәрҙә бик килешле яңғырарына шик юҡ. Үҙҙәрен иҫтә ҡалдырыуы ла ауыр түгел.**

**Һуйҙай.** "Оҙон буйлы, ябыҡ, килбәтһеҙерәк кәүҙә-ҡиәфәтле" тигән теҙмәне ошо бер һүҙ ҙә алыштыра ала. *Һуйҙай кеше. Баланың һуйҙай үҫмергә әйләнгәнен һиҙмәй ҙә ҡалғандар.*

**Һум.** Һум тигәндә был юлы аҡсаны күҙҙә тотмайбыҙ. Һум тағы ла - "Бөтөн, тотошлай, эшкәртелмәгән, бер нимә лә ҡушылмаған" тигән күп мәғәнәләрҙә белдерә. *Һум ағас. Һум алтын. Һум тимер.*

**Һупалаҡ.** Һупалаҡтың синонимы - йомарлам. Һыҡы ҡар һупалағы. *Ҡаймаҡтан бер һупалаҡ май бешелде.*

**Һүҙләү.** Элек "һөйләү" урынына "һүҙләү" тип тә һөйләгәндәр. Моғайын, тәүгеһе шул икенсеһенән килеп сыҡҡандыр ҙа. *Миҫалға туҡталайыҡ: Һүҙләр алдынан фекер туплау. Балаға әкиәт һүҙләү.*

**Һүрмә.** Сепрәк балаҫты ҡайны бер ерҙә "һүрмә" тиҙәр. *Сағыу биҙәкле һүрмә. Иҙәнгә һүрмә түшәү.*

**Шулай итеп, ҡабатлаған һүҙҙәр оҫта һүҙләүгә ҡеүәт бирһен.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**


"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 25026

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәррирриәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33.
(453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
3 июль 17 сәғәт 00 мин.
**Ҡул ҡуйылды -**
3 июль 14 сәғәт 30 мин.



«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.



«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 2707
Заказ - 1251